✓Һүҙ һөйләгәндә ант итмәгеҙ. Дөрөҫ һөйләйем, тимәйенсә, гонаһ эшләмәйенсә, үҙ инсафлылығығыҙға таянып, дөрөҫ һөйләгеҙ. Ант итеү һәм "ысын һәм дөрөҫ һөйләйем" тип әйтеү - ялғансылар ғәләмәтелер.

**РИЗАИТДИН нәсихәттәренән.**


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

www.kiskeufa.ru

27 ИЮНЬ - 3 ИЮЛЬ (ҺӨТАЙ - МАЙАЙ)

2009 ЙЫЛ

№26 (340)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Был һүҙҙе йышыраҡ ҡабатла...**

тормошоң котайыр



2

**Мосолмандың рухи кәлғәһе...**

Торатауҙа булыр



6

**Беҙ ҡыҙыл да, аҡ та түгел...**

йәки Башҡорт халҡының милли идеологияһы тураһында



8-9

**Тамуҡҡа тәүге аҙым...**

бик бәләкәй ҡылыҡтан башлана



13

**ТВ программа**

14


## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**РФ Элемтә һәм киң коммуникация министрлығы Законға төҙәтмәләр индереүҙе тәҡдим итә. Уның буйынса, рус телен насар белгәне өсөн чиновниктарҙан штраф түләтмәкселәр. Шуға бәйле һорау:**

### Был төҙәтмәне Законға индереүҙе туған теле рус теле булмаған чиновниктарға ҡаршы ойошторолған сара, тип баһалап буламы?

*Сәфәрғәле ЙӘНТҮРИН, биология фәндәре докторы, профессор:*

- Тап шулай. Ни өсөн тигәндә, был төҙәтмә иң тәүҙә милли республикалар чиновниктарына килеп ҡағыласаҡ. Рус телен насар белеү генә кешенең насар икәнлеген аңлатмай, хеҙмәт кешеһе булараҡ, уның сифаттарын билдәләмәй. Әлбиттә, үҙ ҡулы аҫтында эшләүселәр алдында етәксе булған кешенең телмәр мәҙәниәтен, төрлө телдәрҙе яҡшы белеүен, үҙ фекерен башҡаларға аңлатыу маһирлығын инҡар итеп булмай, әммә уның яҡшы итеп һөйләй белеүен генә үҙмаҡсат итеп ҡуя башлаһаҡ, шыма һөйләүсе кеше генә яҡшы етәксе тигән фекер үҙенәнүҙе нығынасаҡ. Был бер миңең генә фекерем түгел, бик күп башҡорт, татар, йәһүд милләтле зыялылар менән ошо хаҡта һөйләшкәнебеҙ бар. Уларҙың барыһы ла тиерлек бер фекерҙә тора: ниндәйҙер телдә яҡшы итеп һөйләй белеү генә кешенең сифатын билдәләмәй.

*Рәшит САБИТОВ, Башҡортостан яҙыусылар союзының татар телле әҙиптәр берләшмәһе рәйесе:*

- Беҙ рус телен байытыусы, уны үҙенсәлекле яңғырашлы итеүсе рус телендәге башҡорт, татар, Кавказ, Урта Азия халыҡтары акцентын да яҡшы беләбеҙ. Шуныһы ла мөғлүм: әсә теле рус теле булмағандар, русса нисек кенә дөрөҫ һөйләшһә лә, барыбер акцент ҡаласаҡ. Законға төҙәтмәләр индерергә теләүселәр ана шуны иҫәпкә аламы икән? Икенсенән, беҙ, телдәребеҙ русса асылмағандар, үҙ телебеҙҙә фекер йөрөткәс, телдәге ҡытыршылыҡтарҙан беребеҙ ҙә азат түгелбеҙ. Совет осоронда һымаҡ, хәҙер ҙә сорттарға бүлеү ошолай итеп башланамы икән?

*Әнүәр ХӘЛИСОВ, уҡытыусы:*

- Халыҡта "Йомшаҡ түшәп, ҡатыға ултыртыу" тигән әйтем бар. Беҙҙә рус теле грамматикаһын бик яҡшы белгән, ялҡынлы һөйләү оҫталығына маһир Михаил Горбачев ҡатыға ултыртты бит инде. Тормошта бит күп осраҡта шулай килеп сыға: матур итеп һөйләгән кешенең эшкә барымы булмай, йә - киреһенсә. Миненсә, һөнәре телмәр тотоуға туранантура бәйле контингентҡа ғына был төҙәтмә ҡағылырға тейештер.

**Әмир ҒҮМӘРОВ әҙерләне.**

## АФАРИН!

# "УРАЛ БАТЫР" ЭПОСЫ...

## именлекте раҫлап яңғыраны тағы



Юлай КӘРИМОВ фотоһы.

**Бәләбәй районының "Аҡсарлаҡ" белем биреүһауыҡтырыу үҙәгендә "Урал батыр" эпосын яттан һөйләү буйынса йәш сәсәндәрҙең XI республика бәйгеһе тамамланды.**

Быйылғы конкурс Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәшит Ниғмәти һәм С. Юлаев исемендәге премия лауреаты, яҙыусы һәм шағир Баязит Бикбайҙың тормошо һәм ижадына арналды.

Быға тиклем уҡыусы эпостың кәмендә 2400 юлын ятларға тейеш булһа, быйылғы конкурста 2600 юлды ятлау мотлаҡ ине. Тик былан да күберәк юлды яттан һөйләүсе уҡыусылар ҙа булды: конкурстың иң йәш башҡарыусыһы - Стәрлетамаҡ районынынан килгән 7 йәшлек Элина Ғәлина 800 юл ятлаһа, Әбйәлилдән 4-се синыф уҡыусыһы Дәүләт Сафин 3002 юл ятлап күрһәтеп, барыһын да таң ҡалдырҙы. Бынан тыш, "Урал батыр" эпосын хәҙер башҡорт, урыҫ, инглиз, немец, ғәрәп телдәрендә лә һөйләүселәр күбәйә бара. Жюри ағзаһы, филология фәндәре докторы Мирас Иҙелбаев әйтеүенсә, йыл һайын эпосты 14-15 конкурсант тулыһынса ятлап килә.

Визитка, "Урал батыр" эпосынан өҙөк ятлау, Р.Ниғмәти һәм Б.Бикбайҙың тормошо һәм ижадына арналған викторина һорауҙарына яуап биреү, эпостан өҙөктәр сәхнәләштереү турҙарынан торған конкурста дүрт кешенән торған алты тиҫтәгә яҡын команда ҡатнашты. Ә бәйгенең Гран-прийын Дыуан районының Мәсәғүт лицей-интернаты уҡыусыһы Зөлфирә Таһирова яулаһы.

**Шулай итеп...**

**"Конкурсҡа мәшһүр эпосыбыҙҙы һөйләйем, тип, төрлө төбәктәрҙән уҡыусыларҙың атлығып килеүе "Урал батыр" эпосы идеяһының ойоштороу һәләтен күрһәтеүсе дәлил булып тора, тимәк, Урал батыр бөгөн дә үҙенең батырлыҡ вазифаһын үтәй. Бында ҡан көсәү юҡ - эпостың йәнә бер үҙенсәлеге ошонда. "Урал батыр" эпосы ерҙә имен йәшәүҙе раҫлай", тип үҙенең конкурсҡа ҡарата фекерен белдергәйне жюри рәйесе, фольклорсы ғалим Әхмәт Сөләймәнов. Донъяға Урал батыр күҙе менән баҡҡан, бар Ғаләмде именлеккә өндәгән балаларҙы бер урынға йыйып, аралашырға мөмкинлек биреүе менән генә булһа ла иғтибарға һәм ихтирамға лайыҡ был бәйге.**

✓ *Былтыр күпме урманды ғәрәсәт ҡырҙы - урман ҡотона күҙ тейҙе. Күпме ағасты ҡырҡалар, ташыйҙар, тәләф итәләр, ҡайһы бер урмандар ҡотһоҙ-шыҡһыҙға әйләнә. Былай барһа, урман ҡото беҙҙе ташлап китмәҫме?*



ҠОТ

# БЫЛ ҺҮҘҘЕ ЙЫШЫРАҠ ҠАБАТЛА...

## тормошоң ҡотайыр

**Тау башынан ҡарап торам Илаһи донъяға һоҡланып. Шул илаһилыҡтың ҡотҡонайы, Китә күрмәһен, тип уйланып. Тауҙарҙа, йылға буйҙарында мин яңғыҙ йөрөргә яратам, сөнки кеше менән йөрөһәң, уй уртаҡлана, фекер тарҡала. Үҙем тау ҡыҙырам, үҙем уйланам, баштағы уйҙарҙың осона сығырлыҡ түгел. Бергәләп уйлашһаҡ, асыш-табыштар күберәк булыр кеүек. Шуға, фекерҙәремде һеҙгә лә еткерәм.**

Йыл әйләнәһенә күпме Ҡөрьән ашында, байрам табындарында, ауыҙ асыуҙарҙа булабыҙ, тормоштоң бөтә "нөктәләре"н тикшерәбеҙ, илдәге хәл, кешеләр, мәрәкәләр телдән төшмәй. Тик ҡот, ҡотло булһын, ҡотайған, ҡотһоҙ һ.б. кеүек һүҙҙәрҙе бөтөнләй әйтмәйбеҙ икән дәһә! Был минең өсөн һағышлы бер асыш булды. Уйлап ҡараһаң, был һүҙҙәр беҙгә бәләкәй саҡтан таныш, күңелгә һеңгән. Ҡотлобикә, Ҡотлобай исемдәрен әйтеп, иртә менән тауышланһаң, ҡотло донъяндағы ҡот фәрештәләре ҡаса, тигәнде ишетеп үҫтек. Ашаған һайын табын ҡото - икмәкте алдан ҡуйырға өйрәттеләр, ә хәҙер ҡайһы берҙә икмәкте ауыҙ ҙа итмәйбеҙ. Бына ҡайҙа ул ҡотһоҙлоҡ!

Яңы кейемебеҙҙе өй һайын йөрөп ҡотлаттыҡ, тәңкә баҫһалар, ҡыуаныстан осондоҡ. Белем алғас, аттестат, дипломды ҡотланылар, белемебеҙҙең ҡото башҡаларға ла йоғоуын күргеләре килде. Ғаилә ҡорғанда туйҙы, аҙағыраҡ сабыйлы сәңгелдәкте ҡотлап шатландырҙылар. Яңы өй эшләп сыҡҡас, туғандар-дуҫтар өйҙөң, нигеҙҙең ҡотло булыуына, ҡотайып йәшәүгә, ҡот фәрештәләренең ҡанат елпеп тороуына фатиха бирҙеләр. Килен төшөргәндә "Ҡотло аяғың менән!" тип ҡотлайбыҙ, йортҡа ҡот килтереүенә өмөтләнәбеҙ.

Килен тигәс, иҫкә төштө әле: ҡәйнәм Мәхмүзә Бикмырҙа ҡыҙы аңлы, сәсән телле, һынамсыл әбей ине. Күрәһең, мине лә һынап йөрөгәндер инде, малы ауырыһа, йә һыйыры быҙаулай алмаһа, "Аяғың ҡотло һинең", тип, минән малына "типтертә". Хикмәт, малы йүнәлә, һыйыры быҙаулай - күршеләр аптырай, ҡәйнәм ҡәнәғәт йылмая, ә мин көләм - тапҡандар ҡыҙыҡ, йәнәһе.

Беҙҙең ауылда малдың берелен кәртәбаш тип йөрөттөләр. Шуны тотонһаң, ҡалғандар сикегә, ҡазалай. Әсәйемдең "Кәртәбаш менән ҡот китте", тип уфтаныуы әле лә иҫтә. Ғаиләлә лә ҡотто бер ғаилә ағзаһы тотоп тора, минеңсә. Мәхмүт ағайым үлгәс, бөтә умарталары үлде, баҡсалағы алмағастары ҡороно, малдары бөттө.

Һуғыш йылдарында өләсәйемдең "Йәҙрә тауышынан ҡот фәрештәләре күккә ашты, донъя ҡото түңкәрелә күрмәһен", тип, гел генә ҡайғырыуы күҙ алдында. Һуғыш бөткәс, ул йылмайып "Һуғыш бөттө, ҡот ҡайтыр, әҙәм балалары ҡотайыр, ҡотой-мотой ашауҙан да ҡотолорбоҙ, иншалла", тип, көллөбөҙҙө һөйөндөргәйне.

Баҡһаң, ҡот биреүсе ҡотло таштар ҙа бар икән. Ағиҙелдең беҙ ҡойонған ерендә урындыҡтай ғына таш ятты. Уны бик борондан уҡ ҡотойташ, ҡотло таш, тип йөрөткәндәр. Ыҙғар менән, йә һыҙланып ауырыусылар шунда ултырып йыуынһа, йүнәлә ине. Беҙ ҙә шулай эшләнек. Тимәк, таш - һаулыҡ ҡото биргән.

Егет, ҡыҙҙар буй етһә, ололар ҡотло ҡатын, ҡотло кейәү теләп, доға ҡыла инеләр. Әсәйем "Ҡотло ҡатын ат тотторһа, ҡотһоҙо ут йоттора", "Ҡотло ҡатын юҡтан бар итә, ҡотһоҙо барҙы ла юҡ итә", "Ҡотло ир донъя ҡотайта, ҡотһоҙо ҡоймаһын вата", тип тә өҫтәй. Былары инде егет һәм ҡыҙҙарға ниндәй булырға кәрәк икәненә ишара яһаған.

Электән үк арҙаҡлы шәхестәрҙе, күренекле кешеләрҙе ил ҡото, ҡот таратыусылар тип баһалайҙар, әле лә шулай. Ҡот осоу, ҡот ҡойоу кеүек йолалар бар, уны айырым кешеләр генә башҡара - ҡотто эйәһенә ҡайтара. Донъяһы нурланып тора, ҡот ҡунған, тип тә һөйләшәбеҙ.

Ябай ғына ҡот, ҡотло булһын, ҡотайған тормош насип булһын һүҙҙәренән күңел үҫә, дәрт арта. Уларҙы йышыраҡ әйтһәк тә зыян юҡ.

Шулай ҙа ҡайһы берҙә күңелгә шомло уй ҙа килеп инә. Хәҙер Башҡортостанға сит ер вәкилдәре йыш килә, төрлө саралар үткәрелә.

Килеүселәр башҡорт еренә һоҡланып, ҡыҙығып ҡарай, көнсөл ҡараштар ҙа юҡ түгел. Ана шундай кешеләр ҡотобоҙҙо ҡурҡытмаһа ярай ҙа, тип шикләнәм. Былтыр күпме урманды ғәрәсәт ҡырҙы - урман ҡотона күҙ тейҙе. Күпме ағасты ҡырҡалар, ташыйҙар, тәләф итәләр, ҡайһы бер урмандар ҡотһоҙ-шыҡһыҙға әйләнә. Былай барһа, урман ҡото беҙҙе ташлап китмәҫме? Ә бит урман ҡото китһә, донъя ҡото ла китәсәк.

Мин иҫләгәндәрҙән генә лә ҡот, ҡотло, ҡотайған, ҡотһоҙ һүҙҙәренең халыҡ тормошонда киң ҡулланылышы, мәғәнәһенең сикһеҙлеген күрәбеҙ.

Ҡот тураһында ғаиләлә лә, мәктәп уҡыусылары менән дә әңгәмә, фекер алышыу үткәрһәк, ниндәй фәһемле, оло мәғәнәле, файҙалы тормош һабағы булыр ине. Күпме кеше юҡты-барҙы һөйләп, ваҡыт әрәм итеп, ҡотһоҙланып йөрөмәҫ ине, тим.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы**
**Байым ауылы.**


Инәйҙәрҙең ҡотло ҡулдары тыуҙырған мөғжизәле ҡорамалар.

*БАЛАҢА УҠЫ!*

# АШЫҠҠАН ЭШ - ШАЙТАНДАН

Миңлебай ағай үҙенең ҡатыны менән яланда эшләп йөрөй. Уларҙың бәләкәс кенә улдары Ҡарабаш исемле эт менән бергә ялан ситендәге ағас аҫтында серем итеп ята.

Ата-әсә ағас эргәһенә килгәс, ҡурҡыныс күренешкә шаһит була: уларҙың бәләкәс балаһы салҡан ята, ә Ҡарабаш ҡанға буялып, ҡыҙғаныс төҫ менән бала эргәһендә ултыра.

Миңлебай ағай, Ҡарабаш сабыйға тейгән икән тип уйлап, эттең башына салғыһы менән һуғып ебәрә. Эт шундуҡ ҡанһырап ергә йығыла.

Сабыйҙарының тыныс йөҙ менән килеп тороуына ата-әсә бигерәк тә аптырай. Ә баланың эргәһендә ятҡан үлек йыланды күргәс, ата-әсә бик ныҡ яңылышҡанын аңлай: Ҡарабаш сабыйҙы ҡотҡарам, тип йылан менән алышҡан булған икән...

Әгәр ҙә Миңлебай ағай тәүҙә үк асыуын ҡабартмай, тыныс тотһа икән үҙен! Бәйғәмбәр ҙә бит хәҙисендә шулай тип иҫкәрткән кешеләрҙе:

"Уйлап эшләнгән эш - Аллаһтан, ашығып эшләнгәне - шайтандан".

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ 1 июлдән тәбиғи газға хаҡтар күтәрелә. Бер кубометр газдың хаҡы, иҫәпләү приборҙары булған осраҡта, 2 һум 37 тингә етһә, торлаҡ биналарын йылытыу өсөн ҡулланылған газға - 1 һум 74 тин, үҙәкләштерелгән йылы һыу менән тәьмин ителмәгән йорттарҙа аш-һыу әҙерләүгә тотонолғаны 3 һум 62 тин торасаҡ. Газға хаҡ 1 октябрҙә лә күтәреләсәк.

✓ Үткән аҙнала Өфөгә эш сәфәре менән РФ Президенты Хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары В.Сурков килеп ҡайтты. "ИТАР-ТАСС" һәм башҡа үҙәк матбуғат баҫмалары хәбәр итеүенсә, В.Сурков БР Президенты Мортаза Рәхимовты, уның эшмәкәрлегенә баһа биреп, "Федерация субъекттарының иң абруйлы етәкселәренең береһе", тип атаған. "Милли республикаларға Башҡортостан тәжрибәһен өйрәнергә кәрәк" - тигән ул.

✓ БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев етәкселегендәге рәсми делегация Төркиәнең баш ҡалаһы Истанбулда Башҡортостан мәҙәниәте көндәрендә ҡатнашты. Төрлө рәсми һәм ғилми-ғәмәли осрашыуҙарҙан һуң Изге София ҡорамы һәм Зәңгәр мәсет янында башҡорт һабантуйы үтте. Шулай уҡ Истанбулда Башҡортостандың Төркиәләге вәкиллеге ҡарамағындағы Башҡорт халҡы тарихы һәм этнографияһы йортон асыу тантанаһы булды.

✓ БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев Мәскәүҙә РФ Хөкүмәте Рәйесе урынбаҫары - Рәсәй финанс министры Алексей Кудрин менән осрашты. Осрашыуҙа бюджет-ара мөнәсәбәттәрҙе уңышлы үҫтереү мәсьәләләре ҡаралды. Шул уҡ көндә Премьер-министр Рәсәй сәнәғәт һәм сауҙа министры урынбаҫары Денис Мантуров менән республиканың сәнәғәт предприятиеларын үҫтереү перспективалары тураһында һөйләште.

✓ Республика юғары уҡыу йорттарында ҡабул итеү комиссиялары эшләй башланы. Мәктәп, башланғыс урта махсус уҡыу йорттарын тамамлаусылар өсөн ун ике дәүләт һәм дәүләттеке булмаған юғары профессиональ белем биреү учреждениеһы үҙ ишектәрен аса. Уҡыу йортона инеү өсөн ғариза һәм башҡа кәрәкле документтарҙы абитуриент 25 июлгә тиклем тапшыра ала, быйыл ҡабул итеү БДИ һөҙөмтәләре буйынса үткәреләсәк.

АҘНА ШАҢДАУЫ

# БӨГӨН - ЕВКУРОВ. Ә ИРТӘГӘ КЕМ?

## Кавказ "төйөнө" иртәме - һуңмы сиселергә тейеш



**Бөтәгеҙ ҙә беләһегеҙҙер. Ингушетия президенты Юнысбәк Евкуровтың иләк кеүек тишкеләнгән "мерседес"ын күргәнһегеҙҙер. Ишеткәнһегеҙҙер - ул үҙе ауыр хәлдә Мәскәүҙә.**

Беҙгә тағы ла дүшәмбе көнө президент Дмитрий Медведевты күрһәттеләр. Үҙ кабинетында. Бер яғында - Федераль именлек хеҙмәте директоры Александр Васильевич Бортников, икенсе яғында - Рәсәй эске эштәр министры Рәшит Ғүмәр улы Нурғәлиев. Уларҙың етди рәүештә президентты тыңлағандарын да күрһәттеләр. Нимә һөйләгәндәрен дә ишеттерҙеләр. Именлек хеҙмәте етәксеһе айырыуса ғәжәпләндерҙе. Евкуровҡа һөжүм итеү - республика хоҡуҡ һаҡлау органдарының тәртип урынлаштырыу буйынса әүҙем эшләүҙәренә бандиттарҙың реакцияһы, тип белдерҙе Бортников. Ингуш һәм чечен милиционерҙарының бергәләшеп әүҙем рәүештә үткәрелгән махсус операциялары бандиттарҙы Ингушетияның һәм Чечняның төпкөл райондарына ҡыуып ебәрҙе, тәбиғи, бандиттар ҡаршы сыға, тешләшә башланы, ти Федераль именлек хеҙмәте етәксеһе. Александр Васильевичтың логикаһына эйәрһәң, бандиттарҙы туҡмаған, ҡыуалаған һайын, улар шәбәйгәндән-шәбәйә бара, хатта республика президентының ғүмерен ҡыйырға һәләтле.

Евкуровты дүшәмбе көнө үлтерергә маташтылар. Ә шишәмбе көнө гәйеплеләр табылды. Баҡтиһәң, ҡулға алынған йәки үлтерелгән террорсыларҙың ҡатындары Евкуровтан ошолайтып үс алырға маташа, имеш. Көлкө түгелме ни? Хатта профессионал булмаған кешенең күҙенә ташланып тора бит. Был бик оҙаҡ һәм ентекле әҙерләнгән теракт. Уны кис уйлап, иртәнсәк тормошҡа ашырырға мөмкин түгел дә баһа. "Бандиттар" (мин рәсми рәүештә ҡабул ителгән терминологияны ҡулланырға мәжбүрмен - **авт.**) ҡайҙандыр шартлатҡыс табырға, машинаны ҡыуып алып китергә, уны әҙерләргә тейеш. Ә был ваҡыт һәм аҡса талап итә. Ҡеүәтле бомбаға әүерелдерелгән автомобилдең руле артына ултырған шәһиттә лә бит бер-ике көн эсендә әҙерләп булмай. Быға тиклем Дағстанда булған ҡанлы ваҡиға менән дә шул уҡ хәл. Кемдер снайперҙы әҙерләгән, уны махсус ҡорал менән тәьмин иткән, тейешле урынға алып барған, ҡорбанды - республиканың эске эштәр министрын күрһәткән.

Беҙ һаман да Төньяҡ Кавказдағы хәлдәрҙе күрмәскә, уларҙың сәбәптәрен аңламаҫҡа тырышабыҙ. Урмандарҙа һәм тауҙарҙа тырым-тырағай йөшеренеп-боҫоп яткан бандиттар ошондай юғары кимәлдәге акциялар үткәрергә һәләтлеме икән? Меңәрләгән асыҡ һәм йәшерен хеҙмәткәре, техник ҡорамалдары, ҡаҙнанан йыл һайын миллионлаған һум алып торған Федераль именлек хеҙмәте ай һайын тиерлек беҙгә ҡулға алынған, юҡ ителгән боевиктар, бандиттар, ваһһабиттар хаҡында хәбәр итеп кенә тора. Ә улар бөтмәй ҙә бөтмәй.

Евкуровҡа һөжүмдең тап 22 июнь - Бөйөк Ватан һуғышы башланған көндә ойошторолоуы ла бушҡа түгел. Премьер-министр Владимир Путин был хәлде ошолай аңлатты - быны эшләгәндәр фашистар менән бер рәткә баҫты, тине ул. Улар өсөн изге бер нәмә лә ҡалмаған. Әйтергә кәрәк, боевиктар был датаны беренсегә генә ҡулланмай. 2004 йылдың 22 июнендә боевиктар Ингушетияла ҙур һуғыш ойоштороп, ҡорал келәтен баҫып алып, 100-ләгән кешене (улар араһында күпселек - хоҡуҡ һаҡлау хеҙмәткәрҙәре) ҡырып киткәйне. Шуны ла оноторға ярамай: ингуш халҡы тарихында икенсе бер иҫтәлекле дата бар. 1943 йылдың 23 февралендә - Совет Армияһы, ә бөгөн Ватанды һаҡлаусылар көнөндә совет ғәскәрҙәре ингуштарҙы һәм чечендарҙы үҙ өйҙәренән һәм үҙ илдәренән ҡыуып сығара һәм Ҡаҙағстанға һәм Себергә мәңгелек һөргөнгә оҙата. Боевиктар бары тик Советтар Союзының "милли сәйәсәте"н үҙләштергән булып сыға түгелме?

Евкуровты үлтереү кемгә кәрәк булды икән? Был ниндәй һорау тиерһегеҙ. Әлбиттә, бандиттарға. Ә улар кем? Ошо һорауҙы кемдер үҙенә-үҙе йәки башҡаларға биргәне бар микән? Шул уҡ ингуштар йәки чечендар түгелме? Һис шикһеҙ. Республиканың бөгөнгө хәле менән риза булмағандармы, әллә, ғөмүмән, рәсми Рәсәйҙең милли сәйәсәте менән ҡәнәғәт булмаусылармы? Аныҡ ҡына нисек яуап бирәһең инде? Шуныһы аңлашыла: Евкуровты шартлатыу Дағстандың эске эштәр министрын үлтереү кеүек үк ябай кешеләр тарафынан эшләнеүе мөмкин түгел.

Үҙәк ваҡытлы матбуғат сараларында тағы ла бер ҡыҙыҡлы версия яңғыраны. Йәнәһе, Евкуровтың яҡындары араһында хыянатсы булыуы мөмкин, йәки уға ҡаршы терактты Ингушетия президенты ҡулы аҫтында эшләгән коррупционер-чиновниктар ойоштороуы ихтимал. Мәскәү журналистары тотош милләтте шик аҫтына ҡуйғанын үҙҙәре лә аңламай, шикелле. Ингуштарҙың һаны 300-400 мең тирәһе (төрлө сығанаҡтар буйынса). Улар бер-береһе менән туғанлыҡ, ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ ептәре менән тығыҙ бәйле. Иғтибар иткәнһегеҙҙер - президенттың водителе лә, шәхси һаҡ етәксеһе лә - Евкуровтар. Шуға күрә лә Юнысбәк Евкуров бер нисә көн элек кенә биргән интервьюһында, "бандиттар" менән һуңғы сиккә тиклем һөйләшергә әҙермен, тип белдерә. Мин көн һайын тиерлек бандформированиеларҙа ҡатнашыусыларҙың туғандары менән осрашам, ти ул (Асылда иһә ул үҙ туғандары - ҡоҙалары, ике, өс туған ағалары һәм ҡустылары, бажалары һәм башҡалар менән көрешкән булып сыға түгелме?) Туғандарҙы ҡырырға ярамағанлығын ул яҡшы аңлай. Уға тиклем башҡалар сеймәлтеп өлгөргән төйөндө тыныс юл менән сисергә тырыша ине Евкуров.

Рәсәй журналистары (әүлар араһында ла аҡыллы кешеләр бар) Евкуров фажиғәһенең сәбәптәрен асыҡларға маташа. Төрлөсә фекер йөрөтә улар. Берәүҙәр ваһһабиттарҙы гәйепләй. Икенселәр иһә - Кавказға ҡул һуҙған сит илдәрҙе. Өсөнсөләр ингуш террорсыларын ун туғыҙынсы быуатта батшаны шартлатырға маташҡан революционер-бомбасылар менән сағыштыра. Файҙаһыҙ. Уларҙың барыһы ла бер нәмәне аңламай. Бында бер генә сәбәпте айырып күрһәтергә мөмкин түгел. Эйе, Кавказ дәүләттәрендә Ислам дине ныҡ тамыр йәйгән. Әммә Исламдың төп мәғәнәһе - кафырҙар менән һуғыш түгел. Ололарҙы ихтирам ит, Аллаға буйһоноп йәшә, башҡалар иҫәбенә байырға тырышма, байлығың менән уртаҡлаш, саҙаҡа тарат, хәйер бир - ошо тәғлимәттәр ятмаймы ни Ислам нигеҙендә?

СССР (һәм Рәсәй) дәүләте тарафынан бер нисә тапҡыр алданған, юҡҡа сығыу сигенә еткән (1970 йылғы иҫәп буйынса ингуштарҙың һаны ни бары 150 мең тирәһе булған) һаман үҙҙәренең тарихи ерҙәренә ҡайтып, тыныс тормош көтә алмаған халыҡтан тағы ла нимә көтөп була икән?

Бөгөн ингуш йәмғиәтенең ҙур өлөшө Рәсәй менән бергә йәшәргә теләмәй. Рәсәй дәүләте улар өсөн (хәйер, башҡа милли аҙсылыҡтар өсөн дә тиергә мөмкиндер?) үгәй әсәй сифатында. Яратмай ҙа, һөймәй ҙә. Ихтирам да итмәй. Һәр ваҡыт ашаған икмәге өсөн битәрләргә әҙер тора. Унынына ғына түҙергә мөмкин ине лә бит... Уға ят булған йәшәү рәүешен көсләп тағыу бара. Халыҡ традицияларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен тәрән ихтирам иткән йәмғиәт быны бер нисек тә ҡабул итә алмай. Быға тағы ла иҡтисади проблемалар - эшһеҙлек, аҡсаһыҙлыҡ, үҫергә, үҙ аллы эш асырға мөмкинлектәр булмауы килеп ҡушыла. Шуға ла сит ил эмиссарҙары ташлаған "орлоҡ" бик уңдырышлы "тупраҡ"ҡа төшә. Нишләп бөгөн Ингушетияла һәм Дағстанда етәкселәргә, милиционерҙарға, судьяларға һөжүм итәләр? Халыҡ уларҙы дошман итеп күрә. Улар ришүәт ала, тип фекер йөрөтә кешеләр. Юғиһә, эш хаҡына ҡыйбатлы автомобилдәр һатып алырға, бер нисә ҡатлы особняктар төҙөргә мөмкин булыр ине микән?

Һәм һуңғыһы. Нисектер шулай килеп сығып тора - яңы Рәсәйҙең һәр бер президенты осоронда бөтә йәмғиәттә көслө шаңдау булып яңғыраған бер ваҡиға була. Ул, гүйә, ниндәйҙер Юғары көс тарафынан етәксенең рухи көсөн һынар өсөн ебәрелә. Ельцин президент булғанда Буденновск фажиғәһе булды. Путинға айырыуса ҡыйынға тура килде - "Курск" һыу аҫты кәмәһе батыуы, Беслан мәктәбен баҫып алыу, "Норд-Ост" фажиғәһе. Дмитрий Медведев әлегә тиклем тик еңеүҙәргә генә юлығып торғайны. Юнысбәк Евкуровҡа һөжүм итеү - бөгөнгө Рәсәй президенты эшмәкәрлегендә шундай ваҡиғаларҙың тәүгеһе. Әйтергә кәрәк, ул, башҡа етәкселәребеҙҙән айырмалы рәүештә, үҙен юғары кимәлдә күрһәтте. Евкуровтың хәлен дауаханаға барып белешеүе - күптәрҙең күңеленә хуш килгәндер. Был осраҡта Дмитрий Анатольевич чиновник булараҡ түгел, ә ябай кеше булараҡ яҡшы сифаттарын күрһәтте. Уға тиклем былдай кимәлгә бер генә оло түрә лә күтәрелә алғаны юҡ ине.

**Таһир ИШКИНИН.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔БР мосолмандары диниә назараты яңы биналы булды. Ул бинаның элекке хужаһы - "Башнефть" нефть компанияһы үҙ иҫәбенә бинаға реконструкция яһаны һәм уны БР мосолмандары диниә назаратына тапшырҙы. Яңы бинаны асыу тантанаһында республика башлығы Мортаза Рәхимов, Рәсәй мосолмандарының Үҙәк диниә назараты рәйесе, Юғары мөфтөй Тәлғәт Тажетдин, Рәсәй мөфтөйҙәре советы рәйесе Рауил Ғәйнетдин, БР мосолмандары диниә назараты рәйесе мөфтөй Нурмөхәмәт Ниғмәтуллин, Рәсәй һәм Башҡортостан төбәктәренән дин әһелдәре ҡатнашты.

✔Екатеринбург ҡалаһында, Һамар өлкәһенең Оло Чернигов районы Имелево ауылында, Ханты-Манси автономиялы округында башҡорт һабантуйҙары һәм башҡорт мәҙәниәте көндәре булып үтте. Сараларҙа Башҡортостан делегациялары ла ҡатнашты.

✔Өфөнөң Октябрь районында иң яҡшы төҙөлгән шәжәрә конкурс иғлан итепде. Әле уның һайлап алыу этабы бара. Октябрь-ноябрҙә йомғаҡлау этабы буласаҡ.

✔"Иммунопрепарат" сусҡа киҙеүенә ҡаршы моновакцина эшләүгә тотонасаҡ. Киҙеү вирусының штаммы Санкт-Петербургтағы фәнни-тикшеренеү институтынан алынған.

✔Рәсәй Федерацияһының 2008 йылдың 24 декабрендәге ҡарары менән Урал тауҙарының Ҡараташ армыттарындағы исемһеҙ бер түбәһенә "Өфө тауы" исеме бирелгәйне. Әле яңыраҡ Өфө ҡала округы хакимиәтенең физик культура һәм спорт буйынса комитеты хеҙмәткәрҙәре БР Туристик-спорт союзы вәкилдәре менән берлектә ошо тау түбәһенә күтәрелеп, унда Өфө ҡалаһы гербы төшөрөлгән иҫтәлекле таш ҡуйҙы.

✔Өфө дәүләт авиация техник университеты беренсе курсҡа ҡабул итеүгә документтар йыйа башланы. Хәбәр ителеүенсә, бындағы факультеттарға быйылдан өҫтәмә 300 бюджет урыны бирелде. Беренсе курсҡа барлығы мең ярым студент бюджет урынына ҡабул ителәсәк.

ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# РУХЫБЫҘҘЫ АРТТЫРҘЫ...

## үтеп киткән байрамдар

**Баш ҡалабыҙҙа Рәсәй көнөнә, Салауат Юлаевтың тыуыуына 255 йыл тулыуға һәм Өфө ҡалғәненең 435 йыллығына арналған байрамдар шаулап-гөрләп уҙып китте. Байрам тантанаһы баш ҡаланың Ленин майҙанында ла юғары кимәлдә ойошторолғайны. "Салауат - беҙ һинең нәҫеленән" тип аталған баш ҡала балалары байрамында йыр-моң, сабыйҙарҙың шат тауышы көнө буйы яңғырап торҙо. Ошо аҡта бер нисә кеше тәьҫораттары менән бүлеште.**




**Рита ТИМЕРҒӘЛИНА, Дим районы 102-се башҡорт мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы:** Баш ҡалабыҙҙа байрамға әҙерлек һиҙелеп торҙо. Мин айырыуса урамдарға "Салауат Юлаев - башҡортомдоң бөйөк батыры" тигән яҙыуҙар элеп ҡуйылыуына ҡыуанып бөтә алманым. Уны уҡыусы һәр кешенең батырыбыҙ өсөн ғорурлыҡ тойғоһо кисереүенә иманым камил. Салауатҡа арналған байрамдың баш ҡалабыҙҙа ла уҙғарылыуы ҙур әһәмиәткә эйә. Милли батырыбыҙ тураһында беҙҙең милләттәштәр генә түгел, сит милләт вәкилдәре лә белергә, таныРға тейеш. Ошондай байрамдар ойоштороп, беҙ Салауат батырҙы республикабыҙ халҡына тулыһынса танытһыҡ, хәтерҙәренә төшөрҙөк, тип әйтә алабыҙ.

**Айгөл БИЛАЛОВА, Өфө ҡала округы хакимиәтенең мәғәриф идаралығы белгесе:** Батырыбыҙ иҫтәлегенә бағышланған сараларҙа, ни өсөндөр, гел генә уның: "Мин үлмәнем, башҡорттарым" шиғыры иҫкә төшә. Халҡы Салауатты хәтерләгән һайын, уның рухы ҡыуаналыр, тип уйланам һәм батырҙың үҙенә: "Һин, үлмәнең әле, Салауат! Һин халыҡ хәтерендә мәңге йәшәйһең!" - тип әйтке килә. Ысынлап та, олоһо ла, кесеһе лә Салауатты ғорурланып телгә алғанда, ул халыҡ хәтеренән мәңге юйылмаҫ. Әле лә бөтә ҡалабыҙҙа байрам рухы бөркөлөп тора, кешеләрҙең йөҙөндә - йылмайыу сатҡылары. Өфө ҡалаһының һәр ете районынан мәктәп уҡыусылары үҙҙәренең ижади эштәренән күргәҙмә ойошторҙо.

**Гөлнара ЗАКИРОВА, 136-сы башҡорт лицейы уҡыусыһы:** Бөгөнгө байрам минә шул тиклем оҡшаны. Салауат Юлаевҡа арналған сараларҙы мәктәбебеҙҙә лә йыш уҙғарабыҙ, уға арнап шиғырҙар, иншалар яҙабыҙ. Ә бында халыҡ күп йыйылды, концерттар матур булды. Беҙ ҙә бейенек, төрлө уйындар уйнаныҡ, башҡа мәктәп уҡыусылары менән танышты҅ҡ, аралаштыҡ. Киләсәктә Салауат Юлаевтың тормош юлын ныҡлы өйрәнергә, тип үҙ алдыма маҡсат та ҡуйҙым.

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

БЕЛЕМ УСАҒЫ

**Һуңғы аҙнала республикабыҙ мәктәптәрендә сығарылыш кисәләре гөрләп үтте. Мәктәп уҡыусылары оло тормош юлына аяҡ баҫты, тыуған мәктәптәре, класс бүлмәләре, уҡытыусылары менән хушлашты. Нисә йылдар буйы белем тауҙарына менергә юл күрһәтеүсе, ныҡышмал, тырыш булырға өйрәтеүсе уҡытыусыларын, бер класта уҡып, серҙәр бүлешеп, ярышып, сәмләнешеп уҡыған иптәштәрен менән айырылыу кисәһендә һәр кемдең күҙҙәренә йәштәр эркелгәндер... Мәктәптәрендә сығарылыш кисәләре нисек уҙыуы, БДИ һөҙөмтәләре тураһында уҡытыусылар үҙҙәре һөйләһен әле...**

# ИМТИХАНДАР АРТТА ҠАЛДЫ,

## алда - тағы имтихандар...

**Юлай СОЛТАНГӘРӘЕВ, Республика иҡтисад лицей-интернаты директоры:** Быйыл лицейҙы бөтәһе 94 уҡыусы тамамланы. Берҙәм дәүләт имтихандарын тапшырып бөттөләр, күрһәткестәр юғары булыуы беҙҙе шатландыра. Уҡыусыларҙың күбеһе имтиханды теүәл фәндәрҙән тапшырҙы. Киләсәктә улар ӨДАТУ, БДУ, БДМУ, БДАУ студенттары булырға әҙерләнә. Бер нисә уҡыусы Эске эштәр министрлығының Юридик институтында һынау тотасаҡ. Лицейҙы алтын миҙалға тамамлаусы уҡыусыбыҙ Ләйсән Ғәбәйҙуллина Мәскәү ҡалаһының Юғары иҡтисад мәктәбенә имтиханһыҙ ҡабул ителәсәк.

Сығарылыш кисәбеҙҙе юғары кимәлдә, матур итеп ойошторҙоҡ. Сара лицейыбыҙҙы тамамлаусы уҡыусыларҙың, ата-әсәләрҙең, шулай уҡ уҡытыусыларҙың күңелендә изге тойғолар, йылы хистәр ҡалдырҙы. Уҡыусылар менән хушлашыу, әлбиттә, һәр йыл күңелдә моңһоу хистәр уята... Шулай ҙа уҡыусыларыбыҙ лицейҙарын онотмай килеп йөрөрҙәр, уҡытыусылары, бер-береһе менән бәйләнеште юғалтмаҫтар, тип ышанам. Мин уларға артабан күнелдәренә ятҡан һөнәр буйынса уҡырға инеүҙәрен, хыялдарының, маҡсаттарының тормошҡа ашыуын, тыуған илебеҙ, халҡыбыҙ мәнфәғәтенә эшләүҙәрен теләйем.

**Ирек ӘХМӘТШИН, 140-сы Башҡорт гимназияһының милли телдәр буйынса директор урынбаҫары:** Быйыл мәктәбебеҙҙе ике класс тамамланы. Ниһәйәт, иң көсөргәнешле, ҡатмарлы ваҡыттар - сығарылыш имтихандары ла үтеп китте. БДИ һөҙөмтәләре яҡшы булыуы беҙҙе бик ҡыуандыра, был уҡыусыларҙың ғына түгел, уҡытыусыларҙың да эш һөҙөмтәһе, уңышы тип әйтергә кәрәк. Урыҫ теле менән алгебра фәненән имтиханды мотлаҡ рәүештә барыһы ла тапшырҙы, ә ҡалған фәндәрҙе үҙҙәренең теләге буйынса һайланылар. Барыһы ла аттестат аласаҡ, имтихандарҙы насар биреүселәр булманы. Артабан уҡыусыларыбыҙ төрлө юғары уҡыу йорттарына юл аласаҡ. Барыһына ла студент булыу бәхете теләйһен! Уҡыусыларыбыҙ башлыса юғары техник уҡыу йорттарын һайлай. Күбеһе ӨДАТУ, ӨДНТУ студенттары булырға әҙерләнә. Сығарылыш кисәһен ата-әсәләр, уҡытыусылар менән бергә төүҙә мәктәптә, унан баш ҡалабыҙҙың иҫтәлекле ерҙәрендә йөрөп, Салауат Юлаев һәйкәле янында таң ҡаршылап уҙғарҙыҡ. Гимназиябыҙҙа сығарылыш кисәһен йыл да шулай үткәреү күркәм йолабыҙға әйләнде. Киләсәктә лә арабыҙҙа дуҫлыҡ ептәре өҙөлмәй, һәр саҡ бәйләнештә торорбоҙ. Ә әлегә уларға яратҡан һөнәрҙәре буйынса уҡырға инеүҙәрен, ҡайҙа булһалар ҙа ата-әсәләре, уҡытыусылары йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәй, матур йөрөүҙәрен теләйем.

**Зөлфирә ГАЗИНА, Дим районы 102-се башҡорт мәктәбенең директор урынбаҫары:** Беҙҙең мәктәптә лә Берҙәм дәүләт имтихандарын барыһы ла яҡшы тапшырҙы, һөҙөмтәләр беҙҙе лә, уҡыусыларҙы ла ҡыуандырҙы. Ғөмүмән, имтихандар бөтөнләй үк ауыр булды, тип әйтмәҫ инем. Тик ныҡлы әҙерләнергә, тырышырға ғына кәрәк, сөнки талаптар үтелгән программанан ситкә тайпылмай. Имтихан, тип башта уҡыусылар ҙа, уҡытыусылар ҙа шул тиклем ҡурҡтыҡ. Беҙҙең дә төн йоҡоларҙы йоҡламай борсолоп сыҡҡан ваҡыттар булды. Ҡурҡҡан эш хәйерле була, тиҙәр бит. Әгәр ҙә буласаҡ имтихандарға еңел ҡараһалар, бәлки, уны тапшырыуы ауыр булыр ине. Ә былай балаларыбыҙ көн-төн баш ҡалҡытмай әҙерләнде. Бөгөн беҙ уларҙың һәм уҡытыусыларҙың тырышлыҡ һөҙөмтәһен күрҙек тә инде.

**Әйткәндәй...**

**Башҡортостан мәктәптәрендә быйыл бөтәһе 29 992 уҡыусы 11 класты тамамлап, ҙур тормош юлына аяҡ баҫты. Үкенескә күрә, улар араһында аттестат ала алмаусылар ҙа бар. Алгебра менән рус теленән мотлаҡ имтихандарҙы тапшыра алмаусы уҡыусылар мәктәптән справка менән сығасаҡ. Был һан сығарылыш уҡыусыларының 2,2 процентынан ашып китмәҫ, тип күҙаллана. Дөйөм алғанда, сығарылыш уҡыусыларының яртыһы төрлө предметтар буйынса БДИ-нан иң юғары балл йыйҙы. Мәҫәлән, химия буйынса БДИ-ны республикабыҙҙа 20 уҡыусы 100 балға яҙҙы! Сығарылыш уҡыусыларының ҡайһы берҙәренә аттестаттан башҡа миҙал да тапшырыласаҡ. БР Мәғариф министрлығы хәбәр итеүенсә, миҙаллылар һаны быйыл сығарылыш уҡыусыларының дөйөм һанының 7-8 процентын тәшкил итә.**



Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия интернаты уҡыусылары. Й. КИНЯПИН фотаһы

**Зәкирә АБДУЛЛИНА яҙып алды.**

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә Рәсәй нейрохирургтарының V съезы булып үтте. Унда Рәсәйҙән һәм сит илдәрҙән 600-ләп делегат ҡатнашты. Белгестәр билдәләүенсә, Башҡортостандың нейрохирургия мәктәбе - илдә иң яҡшыларҙан береһе. Быйыл Н. Бурденко исемендәге нейрохирургия ғилми-тикшеренеү институты белгестәре ярҙамында Өфөлә Функциональ нейрохирургия үҙәге ойоштороу тураһында ҡарар ҡабул ителде. Өфөнөң ашығыс медицина ярҙамы дауаханаһы базаһында Төбәк ҡан тамырҙары үҙәге асылды. Бында баш мейеһе ҡан тамырҙарына операциялар яһаласаҡ. Өс муниципаль дауаханала ҡан тамырҙары патологияһын асыҡлау маҡсатында бесенсел бүлексәләр булдырылды.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә мәғлүмәт-аналитика булеге начальнигы Марат Ғәзизов хакимиәт пейджерына килгән мөрәжәғәттәр тураһында мәғлүмәт бирҙе. Билдәләнеүенсә, йыл башынан пейджерға 561 мөрәжәғәт килгән. Иң күп мөрәжәғәт Октябрь, Киров, Калинин райондарында йәшәүселәрҙән ҡабул ителгән. Баш ҡала халҡын бигерәк тә торлаҡ мәсьәләһе, ихаталарҙы төҙөкләндереү һәм транспортҡа бәйле һорауҙар борсой.

✓Бөгөн Салауат Юлаев майҙанында Йәштәр көнөнә арналған байрам үтә. Ҡатнашыусыларҙы бик күп төрлө ҡыҙыҡлы сығыштар, конкурстар көтә.

✓3-4 июлдә Бөрйән районының Мәндегол ауылы эргәһендә Башҡорт йәштәре көндәре үтәсәк. Быйылғы байрам "Сәләмәт тәндә - сәләмәт рух" тигән дөйөм девиз аҫтында үтәсәк. Программала "Рух" патриотик йырҙар һәм бейеүҙәр, "Шаян-шоу", "Район таҡмаҡтары" конкурстары, "Көслөләр һәм таһылдар" спорт эстафетаһы, төрлө спорт ярыштары, "Урал айыуы" тигән экстремаль көс һынашыу, уҡтан атыу һәм һөнгө бәреү кеүек милли ярыштар бәйгеһе уҙғарыласаҡ. Байрамға килеүсе йәштәр үҙҙәре менән палаткалар, аҙыҡ-түлек, һауыт-һаба алырға тейеш.

✓4 июндә Ғафури районының Ерек ауылында Шәжәрә байрамы үтә. Байрамға төрлө тарафтарҙа йәшәүсе ауылдаштар, яҡташтар, рәсми ҡунаҡтар һәм артистар саҡырыла.

ДОНЪЯУИ МӘШӘҠӘТ

# СИТ ИЛ ПАСПОРТЫН...

## алдан хәстәрлә



**Йәйге ял осоронда, ғәҙәттә, сит ил паспорты алырға теләүселәр һаны күбәйә. Шуға ла бөгөн гәзит уҡыусыларға сит ил паспорты алыу тәртибе, ваҡыты, һуңғы арала булған үҙгәрештәр тураһында Рәсәй Федерацияһының Башҡортостан Республикаһы буйынса федераль миграция хеҙмәте идаралығының өлкән хеҙмәткәре Салауат ХИЛАЛОВ һөйләй.**

● **Сит ил паспорты алыу халыҡ араһында ниндәйҙер ығы-зығы, шау-шыу тыуҙыра торғайны, хатта бер нисә йыл элек кенә сит ил паспорты алырға теләүселәргә оҙон сираттар үтергә тура килә ине. Был күренеш әле лә һаҡланамы, әллә сит ил паспорты алырға теләүселәр һаны кәменеме?**

- Ысынлап та, бынан алдағы йылдарҙа сит ил паспорты алыусылар күберәк ине. Быйыл элекке йылдар менән сағыштырғанда уларҙың һаны әҙерәк. Быны шулай тип аңлатырға була: беренсенән, республика халҡының күбеһе сит ил паспорты алып бөттө, шуға ла биш йыл үтмәйенсә, улар уны алыштырмаясаҡ, икенсенән, бында илдәге иҡтисади көрсөктөң дә йоғонтоһо барҙыр. Шулай ҙа төп сәбәп - күптәрҙә, сама менән республика халҡының яртыһында, сит ил паспорты булыуында.

● **Идаралыҡта граждандарға ике төрлө: ябай һәм микрочиплы сит ил паспорты бирелә. Уларҙың айырмаһы нимәлә?**

- Ябай паспорт та, микрочиплы паспорт та биш йылға бирелә. Төп айырма шунда: микрочиплы, йәғни биометрик паспортта уның эйәһе тураһындағы мәғлүмәт тә, фото ла электрон рәүештә микрочипҡа индерелә. Биометрик паспорт һәр бер кешегә айырым бирелә, йәғни элекке кеүек балаларҙы ата-әсәнең паспортына яҙыу мөмкин түгел. Тимәк, балағыҙға бер ай булһа ла, ун йәш булһа ла сит ил паспорты алыу кәрәк буласаҡ. Ябай паспорттан айырмалы рәүештә, биометрик паспортты белгестәр генә эшләй ала һәм ул ялғандан һаҡланған документтарҙың береһе һанала. Бындай паспорт өсөн дәүләт һалымы 1000 һум, балиғ булмағандар өсөн 500 һум тәшкил итә. Ябай паспорт өсөн һалым 400 һум, ә балиғ булмаған балалар өсөн 200, ата-әсәнең паспортына балаһы яҙҙырыу өсөн 50 һум түләргә кәрәк.

Биометрик паспорттар бынан ике йыл элек бирелә башлағайны, быйыл граждандарға бирелгән паспорттың һәр ун беренсеһе - биометрик паспорт. Былтыр миграция идаралығы хеҙмәткәрҙәре тарафынан бирелгән 108 меңдән ашыу сит ил паспортының туғыҙ меңе яңы типтағы паспорт ине. Тимәк, сит ил паспортының был төрө халыҡ араһында киң популярлыҡ яулай бара һәм күптәр уға өҫтөнлөк бирә. Әлбиттә, ҡасандыр иҫке формалағы паспорт төрөн биреү туҡтатыласаҡ, әммә уларҙы массалы алыштырыу булмаясаҡ, шуға ла кемдер быйыл иҫке формалағы сит ил паспорты алған икән, ул уның менән паспорттың ҡулланыу ваҡыты сыҡҡансы, йәғни 5 йыл йөрөй ала.

Сит ил паспорты биреү өлкәһендә тағы ла бер яңылыҡты әйтеп китергә кәрәк: элек ябай паспортҡа балаларҙың фамилияһы ғына яҙыла торғайны. Ә хәҙер фамилиянан тыш, балаға нисә йәш булыуға ҡарамаҫтан, фото йәбештереү мотлаҡ, сөнки башҡа илдәр ата-әсәнең паспортында баланың фотоһы булыуын талап итә.

Сит ил паспортын ялға китер алдынан түгел, ә алдан хәстәрләү яҡшыраҡ. Ике төр паспорттың да әҙер булыу ваҡыты - сама менән ике аҙна. Шулай ҙа паспортты тиҙерәк эшләтеү мөмкинлеге лә бар.

● **Сит ил паспорты алыу өсөн республика халҡы баш ҡалаға килергә тейешме, әллә был мәсьәләне урында ла хәл итеп буламы?**

- Быға тиклем сит ил паспортын Өфө ҡалаһына килеп кенә алырға була ине. Хәҙер Бәләбәй, Белорет, Бөрө, Межгорье, Нефтекама, Октябрьск, Салауат, Стәрлетамаҡ, Сибай ҡалаларында һәм Ҡыйғы районында сит ил паспорты эшләтеп була. Был ҡала һәм районлар республика халҡын хеҙмәтләндерә алһын өсөн махсус рәүештә һайланылған, уларға яҡын яткан район һәм ҡала халҡы ла сит ил паспортын унда эшләтә ала. Был ике яҡ өсөн дә бик ҡулай, бер яҡтан, сираттар кәмей, икенсе яҡтан, сит ил паспорты юллау өсөн сығымдар ҙа аҙыраҡ китә, сөнки паспортты ҡулға алғансы, кеше элек кәм тигәндә өс тапҡыр баш ҡалаға килергә тейеш була. Бынан тыш, Өфө ҡалаһының Орджоникидзе, Октябрь, Дим райондарында ла сит ил паспорты алырға була. Был үҙәктәрҙең барыһы ла кәрәкле ҡоралмалар менән тәьмин ителгән һәм киләсәктә бындай үҙәктәрҙең һаны республикала тағы ла артасаҡ.

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

**Ябай сит ил паспорты алыу өсөн түбәндәге документтар талап ителә:**

- паспорт һәм уның күсермәһе, эшләүселәр өсөн хеҙмәт кенәгәһе йәки уның кадрҙар бүлегендә раҫланған күсермәһе;

- 18 йәшкә тиклемге балалар өсөн тыуыу тураһында таныҡлыҡ һәм уның күсермәһе, паспорт һәм уның күсермәһе;

- эшләүселәр - эш урынынан, эшләмәүселәр һәм пенсионерҙар - йәшәү урыны буйынса торлаҡ идараһынан, уҡыусылар уҡыу урынынан раҫланған ғариза бирә; 5 фотоның 3-әүһен 2 ғаризаға, иҫәп карточкаһына йәбештерергә, 2-һен документтарға ҡушып тапшырырға.

400 һум булған дәүләт һалымын һәр ҡаланың һаҡлыҡ банкыһында түләргә, айырым паспорт алыу өсөн 14 йәшкә тиклемге балаларға 200 һум, ата-әсәнең сит ил паспортына яҙҙырыу өсөн 50 һум түләргә.

18-27 йәштәге ир-ат өсөн хәрби билет йәки хәрби комиссариаттан билдәләнгән өлгөләге справка талап ителә.

**Электрон мәғлүмәт йөрөткән паспорт алыу өсөн түбәндәге документтар талап ителә:**

2 данала тултырылған анкета; 2 төҫлө фото (3,5х4,5); паспорт һәм уның күсермәһе; хеҙмәт кенәгәһенең күсермәһе; 18-27 йәштәге ир-ат өсөн хәрби билет йәки хәрби комиссариаттан билдәләнгән өлгөләге справка; дәүләт һалымы түләү тураһындағы квитанция (1000 һум).

**14 йәшкә тиклемге балалар өсөн:** анкета, анкетаға йәбештереү өсөн 1 төҫлө фото (3,5х4,5), гражданлыҡты белдереүсе ҡушымтаның төп нөсхәһе һәм уның күсермәһе; ата-әсәнең паспорты һәм уларҙың күсермәләре; тыуыу тураһындағы таныҡлыҡ һәм уның күсермәһе; уҡыу йортонан справка; дәүләт һалымы түләү тураһындағы квитанция (500 һум).

**14-18 йәштәге балалар өсөн:** анкета, анкетаға йәбештереү өсөн 1 төҫлө фото (3,5х4,5), паспорт һәм уның күсермәһе; ата-әсәнең паспорты һәм уларҙың күсермәләре; тыуыу тураһындағы таныҡлыҡ һәм уның күсермәһе; гражданлыҡты белдереүсе ҡушымтаның төп нөсхәһе һәм уның күсермәһе; уҡыу йортонан справка; дәүләт һалымын түләү тураһындағы квитанция (1000 һум).

ҺОРАУ-ЯУАП

### Баҡса йортонда теркәлеү...

**Баҡса йорто һатып алдыҡ. Ирем менән даими йәшәү урынын шунда теркәтергә булдыҡ. Был мөмкинме икән?**

- Эйе, хәҙер теләгән бер кеше үҙенең баҡса участкаһындағы йортонда теркәлә ала, тик бының өсөн ике мөһим шарт бар. Беренсенән, йорт халыҡ йәшәгән пункт сиктәрендә булырға һәм ергә милек хоҡуғы тураһында таныҡлыҡта ерҙең ниндәй категорияға ҡарауы күрһәтелергә тейеш.

Икенсенән, йорттоң унда йыл әйләнәһенә йәшәү өсөн яраҡлы булыуы шарт. Бының суд ҡарары менән дә раҫланыуы ихтимал. Уның өсөн "Йорттоң даими йәшәү өсөн яраҡлылығы тураһында" юридик фактты билдәләтеү өсөн юллау менән судҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк.

Шарттар ошо талаптарға яуап биргән хәлдә дача йортона теркәү хаҡында ғариза менән Федераль миграция хеҙмәтенә барырға ғына кәрәк буласаҡ.

### Бала мәнфәғәтендә

**Ирем менән айырылышмағанбыҙ, ләкин бергә йәшәмәйбеҙ. Ул баланы ҡарауҙа, тәрбиәләүҙә ҡатнашмай, матди ярҙам күрһәтмәй. Бала ауылда, уны әсәйем ҡарай, ә мин ирем йәшәгән ҡалала эшләп йөрөйөм. Никахта булһаҡ та мин унан баланы ҡарау өсөн алимент юллай аламмы?**

- Ирегеҙ менән айырылышмаған хәлдә лә һеҙ алимент юллау хаҡында ғариза менән мировой судҡа мөрәжәғәт итә алаһығыҙ. Уның ғаиләһе менән бергә йәшәмәүен, һеҙгә матди ярҙам күрһәтмәүен иҫбатлауығыҙ ҙа етә. Ғаризаны үҙегеҙ йәки балағыҙҙың атаһы йәшәгән урын буйынса бирә алаһығыҙ. Тик шуны ла иҫтән сығармағыҙ: ирегеҙ бала менән бергә йәшәү урынын билдәләүҙе һорап, айырым ғариза яҙыуы ихтимал. Йәки тағы ла насарырағы: әсәйегеҙ йәшәгән ергә барып, баланы үҙе менән алып китеүе бар. Әле баланың йәшәгән урыны билдәләнмәгән. Ул атаһы йәки әсәһе менән йәшәргә тейеш, ә өләсәһе менән түгел. Шуға күрә, атаһы баланы үҙенә алып китһә, закон буйынса хаҡлыҡ уның яғында буласаҡ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.**

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



# Әпсен-төпсөн, шифаһы тейһен

**Мин кеше араһында йөрөгәндә лә, ҡунаҡта ла, төрлө китап уҡыһам да им-том, шифалы үләндәр тураһында ҡолаҡ ҡарпайтып тыңлайым да, теркәп тә ҡуям. Бына ҡайһы берҙәрен гәзит уҡыусылар менән дә уртаҡлашам.**

### Сейәһе лә сейәһе...

Күп кеше сейәнән ҡайнатма яһарға тырыша. Әммә йөрәккә һаҡлау өсөн уны шул көйө ашарға кәрәк. Ә ҡышҡылыҡҡа йә ҡаҡ, йә компот эшләргә, туңдырырға мөмкин.

### Ер еләге бешә ҡыҙарып

Ер еләген күп ашау тимерәүҙән, ҡурылдайҙан, бауырҙағы таштан һаҡлай. Тимерәүгә уның япраҡтарын бешереп һалаһың. Сәй өсөн еләктең үҙен дә, япраҡ-сәскәһен дә киптереп алырға кәрәк. Ашағанда еләктең йәшел тажын ашау бик файҙалы.

### Ҡурылдай йә бронхит

Был сир йәйге, ҡышҡы селләлә әүҙемләшеүсән. Унан һаҡланыу юлдары күп.

а) мал үпкәһенән, ике кишер, бер баш һарымһаҡ, бер баш һуғандан, шуларға бер ҡалаҡ кейәү үләнен дә ҡушып, аш бешереп ашарға кәрәк. Килешә.

б) ҡара торманы бал менән ҡушып ашарға кәрәк.

в) һәр ваҡыт ылыҫтан һурпа яһап эсергә, сайыр сәйнәргә кәрәк.

### Танау ҡанаһа

Йәйге эҫелә күп кешенең танауы ҡанаусан. Ҡанау оҙаҡҡа киткәндәй булһа:

а) кипкән кесерткән япрағын ваҡлап, танау эсенә һибәһең;

б) ҡабырсаҡты онтап, һеркәлә болғайһың да танау өҫтөнә тампон ҡуяһың.

в) бөрлөгән япрағын бешереп, танау эсенә тығаһың;

г) иләнгән тирене йәки кейеҙҙе өтөп еҫкәтһәң дә ҡан туҡтай.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ДИНЕБЕҘҘӘ - КӨНӨБӨҘ

**Үткән шәмбелә Ишембай районында урынлашҡан изге Торатау битендә мосолмандар йыйыны уҙҙы. Унда республикабыҙҙың төрлө төбәктәренән меңгә яҡын дини ҡәрҙәштәр йыйылды. Сара уҙғарыу урыны тип тап ошо изге тау итәге һайланыуы ла юҡҡа ғына түгел, был ерҙә элек-электән башҡорттоң төрлө ырыуҙары кәңәш-төңәшкә йыйылған, уландарын ошонан яуға оҙатҡан, ошонда ҡаршы алған. "Башҡортостан" телевидениеһының "Йома" тапшырыуы алып барыусыһы Морат Лоҡманов та үҙ сығышында мосолмандар йыйынының рухи ҡәлғәһе тап ошо урында булырға тейешлеген билдәләп үтте.**



# МОСОЛМАНДЫҢ РУХИ ҠӘЛҒӘҺЕ...

## Торатауҙа булыр

Мосолмандар йыйыны Ҡөрьән уҡыу менән башланып китте. Артабан дин әһелдәре, йәмәғәт эшмәкәрҙәре сығыш яһаны, вәғәздәр һөйләнде. Бигерәк тә Өфө ҡалаһының "Ғофран" мәсетенән килгән Тулҡын хәҙрәттең иманға саҡырыуын халыҡ яратып ҡабул итте. "Беҙ иманда дуҫбыҙ. Беҙ, дин әһелдәре, булған мөмкинлекте файҙаланып, көнө-төнө эшләргә, мәсеттәрҙә генә түгел, ошондай йыйындарҙа ла халыҡты иманға, Аллаһтың әжер-сауаптарына өлгәшергә саҡырырға, диндә ауырайтып түгел, еңел итеп күрһәтергә тейешбеҙ", - тине ул үҙ сығышында. Ысынлап та, беҙ, дин тигәндә, ни өсөндөр, йөшөү рәүешен түгел, ә башҡарып булмаҫтай ҡатмарлыҡтары булған айырым бер донъяны күҙ алдына килтерә башлайбыҙ. Ғөмүмән алғанда, һәр өлкәлә, һәр эштә ауырлыҡтар етерлек инде ул, бары тик һәр нәмәне ыңғай ҡабул итеп, изге ниәт менән, ихлас күңелдән башҡара белгәндә барыһы ла үҙ ағышына китә, атҡарып сыға алмаҫлыҡ эштәр ҙә еңел булып тойола. Аллаһы Тәғәлә үҙенә тапшырып башлаған гәмәлдәрҙә һәр ваҡыт көс-ҡеүәтен биреп кенә тора. Сараны ойоштороусы Ишембай ҡалаһының "Раушан" мосолман ҡатын-ҡыҙҙар ойошмаһы етәксеһе Зөлфиә ханым Ғүмәрова ла был һүҙҙәрҙе раҫлап, ошолай тине: "Был йыйынды уҙғарыу идеяһы хаж ҡылырға барған ваҡытта тыуҙы. Бөтә донъя мосолмандарының бер урынға тупланып, милләтенә, йәмғиәттә тотҡан урынына, байлығына ҡарамаҫтан, бер туғандай ихлас аралашыуын күреп, беҙҙең үҙебеҙҙән гүзәл Башҡортостаныбыҙҙа ла мосолмандарҙы бер ергә йыйып, мөнәсәбәттәребеҙҙе нығытырға, халҡыбыҙҙы иманға саҡырырға мөмкин бит, тип уйланым һәм әсә, ҡатын-ҡыҙ булараҡ, был эште башлап ебәреүҙе үҙ өҫтөмә алдым. Башлап ебәреү генә фарыз булған, ойоштороған ваҡытта бер ҡатмарлыҡтар ҙа күрмәнем. Кемгә мөрәжәғәт итһәм дә, һәр кем ихлас күтәреп алды, хәленән килгәнсә ярҙам ҡулы һуҙҙы".

"Ғофран" мәсетенең "Ислам нуры" балалар ансамбле башҡарған мөнәжәттәр тирә-йүнде нурға, моңға сорнап, байрам рухын күтәреп ебәрҙе. Һабантуйға йыйылыусылар йәше-ҡартына ҡарамаҫтан, Ҡөрьән уҡыу, аҙан әйтеү, мөнәжәттәр конкурсында ярыштары, спорт уйындарында ҡатнашты. Ишембай районының Ишәй, Урман-Бишҡаҙаҡ, Көҙән, Һайран, Биксән, Маҡар ауыл хакимиәттәре тирмәләр ҡороп, һәр береһе ҡорбан салып, килгән ҡунаҡтарға ҙур һый әҙерләгәйне. Һәр ерҙә ихласлыҡ, һәр ерҙә туғандарса мөнәсәбәт, һәр ерҙә мул табын. Тирмәләрҙең береһендә аш ейеп ултырғанда арабыҙҙан бер дини ҡәрҙәшебеҙ: "Әллә ожмахта ултырабыҙ инде. Аҙыҡтарҙың ниндәй генә төрө юҡ, ҡайһыһын алып ҡабырға белеп булмай", - тине. Был, ысынлап та, шулай ине, тирмә хужалары әле бер ҡунаҡтарҙы оҙатып, икенселәрен ҡаршылап торҙо, әле ҡорбан итенән ауыҙ иттерҙе, әле борлап ҡайнап ултырған самауыр сәйен эсерҙе, табын шул килеш аш-һыуға һығылып ултырыуын дауам итте. Бына ошо инде ул Аллаһы Тәғәләнең беҙгә биргән ризыҡ бәрәкәте.

"Таҙалыҡ - имандың яртыһы" тиелә Хәҙис-Шәрифтәрҙә. Был байрамдағы һоҡландырған күренештәрҙең береһе тап ана шул: йыйнаҡлыҡ, таҙалыҡ күҙәтелеүе булды. Байрам тамамланды, ә бер генә ерҙә лә сүп-сар ҡалдығының түҙрап ятҡанын күрмәсһең! Был мосолмандар йыйынының тағы ла бер өҫтөнлөгө ине. Ә шулай ҙа мине иң ҡыуандырғаны, иң тулҡынландырғаны, иң рухландырғаны - иманға килгән йәштәрҙең, яулыҡ бөркәнгән, түбәтәй кейгән бәләкәй генә балаларҙың күплеге булды. Ғәҙәттә, дин, тиһәк, мәсеттәрҙә ултырған муллаларҙы, барып хәйер бирерлек әбей-һәбейҙәрҙе генә күҙ алдына килтерергә күнеккәнбеҙ. Һәм быға тиклем шулай булды ла. Әммә мин байрам барышында айыҡ аҡыллы, рухлы, ғилемле, матур йәш быуындың үҫеп килеүен күреп, Ислам дине йәшәреүенә, Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙ ғәләйһис-сәләмдең өммәте артыуына, халҡыбыҙҙың иманға ҡайтыуына, быуындар бәйләнеше өҙөлмәүенә шаһит булдым.

Әлбиттә, тәүге тапҡыр эшләнгән әйбер тәжрибә өсөн ярҡшы. Был юлы ла ҡайһы бер мәлдәрҙең уйланып еткерелмәүе күҙәтелде, әммә башланғыс булараҡ, сараның юғары кимәлдә үтеүе, халыҡты бергә туплауы үҙе ҙур баһаға лайыҡ. Был байрам халҡыбыҙҙы иманға саҡырыу өсөн дә, халҡыбыҙҙың телен, тарихын һаҡлап ҡалыу өсөн дә бик кәрәкле мөһим сара булды ул.

**Динара ЯҠШЫБАЕВА.**



Гөлназ ИШЕМБАЕВА фотоһы.

### *ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

**Фәйзелгаян ҒИМАЛЕТДИНОВ, Ишәй ауылы:** Олатайым үҙе иҫән саҡта: "Һин минең иң яратҡан ейәнем", - тип, Ҡөрьән уҡырға өйрәткәйне. Хәҙер үҙем дә ейәндәрем араһынан Нурислам ейәнемдә ниmәһе менәндер үҙемдең бала сағыма оҡшатып, уға ҙур өмөттәр бағып, Ҡөрьән серҙәренә төшөндөрә башланым. Борон-борондан ата-бабаларыбыҙ үҙ белгәндәрен уларына түгел, ә ейәндәренә өйрәтеп ҡалдырыу ягын ҡараған. Тарихҡа күҙ һалып, Аҡһаҡ Тимер, йә булмаһа, Сыңғыҙхан, Батыйхан миҫалын алайыҡмы - шәхестәрҙең һәләте өсөнсө быуындарына, йәғни ейәндәренә күсеүенә шаһит булабыҙ. Мин үҙем белемем буйынса табипмын, медицина күҙлегенән ҡарағанда ла гендарҙың өсөнсө быуынға тапшырылыуы раҫланған. Был улым, ысынлап та, бик отҡор булып сыҡты, өйрәткәндәремде теләп башҡара, тиҙ үк ятлап ала. Биш йәштән Ҡөрьән сүрәләрен уҡырға өйрәнде. Әле алты сүрәһен яттан белә. Аҙан әйтергә өйрәнде, доғалар уҡый. Мин уны дамулла тип йөрөтәм. Намаҙға саҡ ҡына ҙурая биргәс баҫыр, тип торам. Беҙ уны иртә булһа ла мәктәпкә бирҙек, быйыл беренсе класты тамамланы. Инглиз телен үҙләштерә. Баланы бәләкәй саҡтан дини ҡанундар нигеҙендә тәрбиәләргә кәрәк, шул саҡта ул әхлаҡи яҡтан да, ғилем яғынан да үҫешә. Был бала, ысынлап та, бүтәндәрҙән айырмалы рәүештә тыйнаҡлы, инсафлы, отҡор, эшкә лә әүәҫ булып үҫеп килә. Мин үҙем бейергә лә яратам. Әле "Байыҡ" конкурсында ҡатнашып, финалға үттем. Үҙемдең бейеүҙәремде ейәнемә лә өйрәтәм. Ул башҡортса матур итеп бейей.

Ғөмүмән, малайҙарҙы олатай тәрбиәләргә тейеш. Ир баланы ирҙәр генә ирҙәрсә үҫтерә ала. Ҡатын-ҡыҙҙар ир-егеттәрҙең бар психологияһын аңлап етмәй. Егеттәрҙең һуғыш сукмары булып үҫеүе әле ул ирлек тигәнде аңлатмай, ул гүзәл зат алдында көслө зат булараҡ үҙен лайыҡлы күрһәтергә, ихтирам итергә, ярҙам ҡулы һуҙырға, кәрәк саҡта, йылы һүҙен дә йәлләмәҫкә тейеш. Егет кешелә ир намыҫын күтәрергә кәрәк. Мин быларҙың барыһына ла тормоштан миҫалдар килтереп өйрәтәм. Әле ҡасан атта һыбай йөрөргә өйрәтәһен, тип түҙемһеҙлек менән көтөп йөрөй. Был ейәнемә ныҡ ышанам, ул минең нәҫелемде дауам итеүсе, йортомдоң нигеҙен һаҡлаусы варисым буласаҡ, Алла бирһә.

**Римма БИРҘИНА, Ишембай ҡалаһы:** Байрам бик ныҡ оҡшаны. Борон атай-олатайҙар сер һөйләшер, шатлыҡ уртаҡлашыр булһалар, ошо изге Торатау итәгенә килгәндәр, бейеп күңел асҡандар. Бындай йыйындың уҙғарылыуы бик кәрәкле, туғандарса мөнәсәбәттәр булдырыһың, берәүгә ҡарап, фәһем, берәүгә ҡарап ғибрәт алаһың. Беҙ, етмеш-һикһән йәшлек әйбейҙәр, арҡан да тартыштыҡ, ҡалаҡҡа йомортҡа һалып та ярыштыҡ, рәхәтләнеп күңел астыҡ. Бына бит, әскеһеҙ ҙә матур итеп байрам итеп булыуын күрҙе халыҡ. Беҙ элек бала саҡта Смаҡай тауына барып, ерҙе ҡара батҡаҡ иткәнсе бейеп ҡайта торғайныҡ. Был урын киләсәктә иманлы кешеләр, иманлы йәштәр йыйылыр урынға әүерелһен ине, иншаллаһ.

**Ғәлим АҠСУЛПАНОВ, Стәрлетамаҡ районы Күсәрбай ауылы:** Минә әле 13 йәш, быйыл алтынсы класты тамамланым. Беҙ ғаиләбеҙ менән Аллаһы Тәғәләгә ышанабыҙ, барыбыҙ ҙа намаҙ уҡыйбыҙ. Бында мосолмандарҙың ҙур байрамы буласағын ишеткәс, ҙур теләк менән килдек. Мин бында аҙан әйтеү, Ҡөрьән уҡыу конкурстарын ҙур ихласлыҡ менән тыңлап, үҙем өсөн бик күп фәһемле әйберҙәр ишеттем, ғилем тупланым. Күп кешеләр менән аралаштым, яңы дуҫтар таптым. Бындай саралар йыл һайын уҙғарылһа, ҡайһылай шәп булыр ине.

**Фәрүәз АҠИМБӘТОВ, Ишембай ҡалаһы:** Минең әле шул тиклем күңелем тулышып, ҙур шатлыҡ кисереп тороуым. Байрам барышын махсус рәүештә Торатау башына менеп, байтаҡ ваҡыт өҫтән күҙәтеп, барса ҡатын-ҡыҙҙарҙың яулыҡта булыуын күреп, хайран ҡалып торҙом. Мосолман ҡатын-ҡыҙының бар гүзәллеге, серлелеге, тыйнаҡлығы ана шунда сағыла бит ул. Был байрамдың әһәмиәте тағы ла ҙурыраҡ булырға тейеш. Киләсәктә күп нәмәләр иғтибарға алыныр, был йыйын күмәк көс менән, тағы ла юғарыраҡ кимәлдә ойошторолор, тип өмөтләнәйек.

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# КЕМ ҺИН, ӘҮЕШКҮЛ ӘҮЛИӘҺЕ?

**Учалы районының Иҫке Байрамғол ауылы янындағы Әүешкүл тауында әүлиә ҡәбере булыуын Башҡортостанда күптәр белә. Бер нисә йыл инде ул ҡәберҙе яңыса "Шәйех Мөхәмәт Миғнан ҡәбере" тип атауға ла өйрәнеп баралар шикелле.**

Басир ағай Мәһәҙиев төшөрөп алған фото буйынса билдәле булған, ә Рәүеф Насыров тарафынан күсереп алған ошо ҡәберташ яҙмаһын уҡығас, мин уның хәҙерге атамаһы менән килешә алмайым. Эйе, тауҙа ысынлап та оло әүлиә ерләнгән, әммә Мөхәмәт Миғнан тигән кеше түгел. Был яңы исем ҡәберташты ярыҡтан ваҡытта ғына ҡушылған. Ысынында иһә, был ҡәбер Бәркә ханды Ислам диненә күндергән остаз, Ҡубрауийа тәриҡәте суфыйҙары шәйехе Сәйфетдин Бахарзыҙыҡы булырға тейеш. Ошоно асыҡлау маҡсатында ҡәберташ яҙмаһын тағы ла бер тапҡыр тикшереп уҙайыҡ әле.

Яҙманың транскрипцияһы (яңғырашы), юлына-юл тура килтереп уҡығанда, ошолай яңғырай:

"Һза мәркәд ал шәшәвәйех
Мөхәмәт маһаниан ал ауәни
651 һижриәти
Фи ғаһед Бәркә хан
Бани Сарай
Фи дәвләт Бәркә хан".

Яҙманың тәфсире түбәндәгесә була: "Ошо мәркәд (ҡәбер) Мөхәмәт кеүек үк күркәм (кешеләрҙән) тәүгеләрҙән билдәле шәйехтеке. Һижри иҫәпкә ярашлы 651 (йыл). (Ул) Бәркә хан дәүеренән, Сарай (ҡалаһын) бина иткән Бәркә хан дәүләтенән".

Алтын Урҙаның бөйөк ханы Бәркә дәүерендә Мөхәмәт ғәләйһиссәләм кеүек үк Исламға өйрәтеүсе күркәм бәндәләрҙән ошо ханды һәм уның халҡын Исламға тәүләп күндереүсе дин остазы, Ҡубрауийа тәриҡәте суфыйҙары шәйехе Сәйфетдин Бахарзи ғына билдәләлер.

Ҡәберташта Сәйфетдин Бахарзиҙың вафаты 651 һижри йыл (миләди буйынса 1251 йыл) тип күрһәтелгән. Бәркә хан илселегенең Ғәрәп хәлифәтенә бик һуңлап барыуы айҡанлы уның үлем хәбәре ғәрәптәргә 1260 йылдар тирәһендә генә еткерелә. Шәйехтең тыуған яғы булған Урта Азия ерҙәренә иһә был хәбәр тағы ла һуңлабыраҡ барып еткәндер. Тап шуның өсөн Исламиәт ғилемендә шәйехтең үлем хәбәре килеп еткән ваҡыт уның үлгән йылы тип таныла. Бында бер ниндәй ҙә аңлашылмаусанлыҡ юҡ, сөнки изге китабыбыҙ Ҡөрьәндә яҙылғанса, кеше үлемен мотлаҡ ике мосолман шаһит дәлилләргә тейеш. Ә Бәркә хан илселегендә бындай шаһиттар булғанмы-юҡмы, беҙгә билдәле түгел: уларҙың мосолманлыҡтарын да шулай уҡ ике шаһит дәлилләргә тейеш тә баһа.

Билдәле шәйехтең үлеме тураһында ла, уның ерләнгән урыны хаҡында ла Урта Азияла төрлө уйҙырмалар нығына, һәм Аҡһаҡ Тимер, ошо ниғеҙһеҙ мәғлүмәттәргә таянып, Сәйфетдин Бахарзиҙың "ҡәбер"ен эҙләтеп таптыра, уның өҫтөнә мавзолей (кәшәнә) төҙөттәрә.

Шәйех Сәйфетдин Бахарзиҙың дини ҡараштары әлеге ваҡытта Башҡортостан ерлегендә нығынған Хунафийа мәҙһәбенә тура килмәй. Был шәйех кешене макрокосмға (Аллаһҡа) оҡшаш, әммә Аллаһ әл рахман әл рәхим сифаттарына эйә булмаған микрокосм сифатында ғына күрә. Илебеҙҙә Ислам тәғлиматен урынлаштырыу өсөн бар ғүмерен биргән шәйехтең Хунафийа мәҙһәбенән булмауы Башҡортостан мөфтөйөнә уның ҡәбер ташын яңыртыу һәм уны яңы исем менән атау өсөн фәтеүә биреүгә этәргәндер, моғайын.

Уйлауымса, был фәтеүә һис тә нигеҙле түгел, һәм ул ғәмәлдән сығарылырға тейешләлер. Исламиәттә ҡәбер таштарын яңыртыу яҡшы ғәмәл булараҡ танылмай. Унан, Ислам ҡанундарына ярашлы, элек башҡа диндә булып үлеп ҡалғандарға ғына мосолман исеме бирелеүе мөмкин. Мәҫәлән, Болғар ханы Алмуштың атаһының элекке исеме Чилка булып, аҙаҡтан ул Ибраһим тип исемләнә башлай. Ә бына мосолманға үлгәндән һуң яңы исем биреү ғәмәле билдәле түгел.

Гөлшат һәм Фәнүр Шаһиевтарҙың фекеренә ("Киске Өфө", №16) ҡушылып, мин дә Әүешкүл әүлиәһе ҡәберен Башҡортостандың ете мөғжизәһе исемлегенә индереүҙе хуплайым, сөнки унда рухиәтебеҙҙе яңыртыусы шәхестәрҙең береһе ерләнгән бит. Мин шулай уҡ был күркәм исемлеккә Ғүмәр бей һәм Турахан кәшәнәләрен, Бәндәбикә кәшәнәһе менән Ерәнсә сәсән ҡәберен, башҡорт сулпы-көмбәҙҙәрен, Ҡалмаш плитаһы яҙмаһын, Шүлгәнташ мәмерйәһен индереүҙе тәҡдим итәм.

**Иршат ЙӘНБИРҘИН.**
**Ейәнсура районы.**





*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# ХИКМӘТТӘРЕН КҮРҺӘТӘ

## Әүлиә шишмәһе...

Учалы районы Иҫке Байрамғол эргәһендәге Әүлиә шишмәһенә Өфө ҡунаҡтарын, Ләлә-Тюльпан мәсете хеҙмәткәрҙәрен көтәүелләп, төш мәленә генә барып еттек. Сит-яттар алдында оятлы булып ҡалмайыҡ, тигән шик-шөбһәләр барыу менән юҡҡа сыҡты. Ҡоҙоҡ янында тулы тәртип, таҙалыҡ хөкөм һөрә. Хатта дежур ҡарауылсылар тәғәйенләнеп ҡуйылыуы ла мосафирҙарҙы артыҡ мәшәҡәттән ҡотҡарҙы. Хәйер аҡсалары һалыу өсөн махсус йәшниктәр ҙә ҡуйылған.

Тау түбәһендә әүлиәләр рухына сүрәләр бағышлағанды тыңлап, күңелдәрҙе хушландырғас, тау түбәненә йүнәләбеҙ. Халыҡ төркөмөнөң туҡтауһыҙ ағылыуына ҡарамаҫтан, ығы-зығы әллә ни һиҙелмәй ҙә тиерлек. Һәр хәлдә, элекке кеүек түгел. Барыһы ла сабыр ғына үҙ мөҙәттәре еткәнен көтә. Ара-тирә тауыш сығарып ҡара! "Һыу инәһе" ролен теләп башҡарғаны йөҙөнә сыҡҡан йәш кенә ҡатындың һүҙҙәре шунда уҡ барыһын да һағайта: "Дарыу урынына ағыу алып ҡайта күрмәгеҙ". Беҙ барғанда ла Гөлшат Рәлиф ҡыҙы әлеге эше менән мәшғүл ине: бер генә урындан алып, изгеләргә тереһыу өләшә ине.

- Бысраныу, бурьяҡланыу ихтималлығын кәметеү ниәтенән сығып, айырым биҙрә, воронка ла ҡуйғанбыҙ, - ти ул.

- Нишләптер, һәр кем һыуҙы үҙ биҙрәһе менән һоҫорға тырышып ята. Ә бит һыу ҙа тере, - тип Гөлнара һүҙҙе дауам итә. Талаш-тартышты ул да үҙһенмәй. - Бер ваҡыт әллә ҡайҙан ситтән килеүселәр булды, ахыры, һауыт-һабаларын йыуырға, сайҡатырға тотонғайнылар. Беҙҙең иҫкәрмәләргә ҡолаҡ та һалмайҙар. Шау-шыу ҡупты. Ә шишмә ағыуынан тып туҡтаны ла ҡуйҙы.

- Ҡырғыҙҙар килгәндә лә шуға оҡшашыраҡ хәл ҡуҙәтелде, - тип һүҙҙе дауам итә Гөлшат. - Иртән иртүк килеп тулған ҡырғыҙҙар ҡоҙоҡ тирәләй түңәрәк яһап ултырышты ла, Ҡөрьән сүрәләрен көйләп уҡый башланы. Бар тәбиғәт, тау-таш өнһеҙ ҡалып, илаһи моңға сорналғандай булды. "Кешеләр килмәҫ борон һыу алып китмәйһегеҙме ни?" - тип һорайбыҙ. Тәүҙә әүлиә ҡәберенә зыярат ҡылырға кәрәклеген аңғартып, мосафирҙар тауға күтәрелде. Унан төшөүҙәренә иһә шишмә эргәһе халыҡ менән тулғайны. Сират ҡойроғона баҫыуҙан башҡа сара ҡалманы уларға. Мин ипле генә итеп уларға һыу алып бирергә теләп өндәшкәйнем, ярҙамдан баш тарттылар. Әйләнә-тирәләгеләрҙең ризаһыҙлыҡ белдереүен, күрәһең, өнәп еткермәгәндәрҙер. Уларҙың сираты етеүгә бығаса бурьяҡланып бөткән һыу күҙ алдында үтә күренмәлегә әйләнде лә ҡуйҙы...

Дөйөм алғанда, йәнемә тыныслыҡ, тәнемә сихәт бир, тип һыуға мөрәжәғәт итеү йолаһы элек-электән булған беҙҙең халыҡта. Хатта мөхәррәмдә - яңы йыл башында, мосолман календары буйынса инде, "Духа" сүрәһен уҡып, ағын һыуға ҡарарға, тигән юлдарҙы ла уҡығаным бар.

Тәбиғәтте һөйөүселәр күп, ә уның өсөн көйөүселәр аҙ. Юлдағы аяҡ аҫтында ятҡан таштарҙы ситкә алып ырғытыуҙы юҡҡа һораған тиһеңме ҡайһы берәүҙәргә осраған аҡ һаҡаллы ҡарт. Шулай уҡ уның унда-бында ырғытылған аҡсаларҙы ла хупламағаны билдәле. "Минең өсөн улар күҙ йәштәре генә", - тип әйткәнен хатта ишетеүсе-күреүселәр булған.

Мәктәп директоры Фәнүр Шаһиев әйткәнсә, уҡытыусылар коллективы, уҡыусылар тарафынан шишмә эргәһе ҡара эҙҙән таҙартыла сүп-сарҙан. - Ағастарҙың ботаҡтарына бәйләнгән сепрәк-сапрактарҙы йолҡоп алыу өсөн айырыуса башланғыс синыфтар күп көс һала, - ти ул.- Шөкөр, ауыл халҡы ла битараф түгел. Сходта Әүлиә шишмәһе янында дежурство ойоштороу идеяһын Ғиләжева Дамира апай күтәреп сыға. Уның әйтеүе генә көс, клуб, балалар баҡсаһы хеҙмәткәрҙәре уның тәҡдимен хуплап ҡаршы ала. Үҙегеҙ күреп тораһығыҙ, иҫ киткес хозур тәбиғәт мөйөшө Башҡортостандың мөғжизәһенә әүереләсәк.

Ысынлап та, Троицк, Арғаяш өлкәһе, Ҡурған, Өфөнән, һ.б. яҡтарҙан ағылған халыҡ төркөмөнә экскурсовод ролен дә үтәргә тура килә Фәнүр Фәнит улына. Учалы, Башҡортостандың тарихын яҡшы белгән егеткә Әүлиә тауына көнөнә әллә нисә тапҡыр менергә тура килә уға. Фәнүрҙең килеүселәрҙең Урал, Ирәмәл тауҙары, әүлиәләр хаҡындағы һорауҙарына аныҡ яуап бирә белгәнен үҙем дә шаһитмын.

Шулай ҙа ҡайһы бер нәмәләргә әле иғтибар етмәй. Иглин районы вәкилдәре тәһәрәтхана, берәй тәғәмхана эшләмәүенә ғәжәп итте. Ҡайнар сәй, тәм-том һатыуҙы ауыл халҡы, теләһә үҙе лә, ойоштора алыр ине. Махсус рәүештә һауыттар һатылһа, оҙон юлдан былай ҙа арыған юлсылар машина-автобустарын ауыл яғына кире бороп та тормаҫ ине. Ғөмүмән, был Әүлиә шишмәһенә ағылған халыҡ төркөмөн барыбер туҡтатып булмаясаҡ. Шулай булғас, уны һаҡлау, тәрбиәләү сараһын да күрергә кәрәк.

**Зөбәйҙә ҠӘЛӘМОВА.**

**✓ Башҡорт сәйәси етәкселеге үҙ халҡы өсөн "алтын урталыҡ"ты табырға ынтылып, тәү мәлдә дошманлашҡан ике яҡтың береһенә лә ҡушылмау яғын өҫтөн күрә, бының өсөн мөмкин булған барлыҡ сараларҙы ҡуллана.**

# БЕҘ ҠЫҘЫЛ ДА,

## йәки Башҡорт халҡының

**Бынан 90 йыл элек Рәсәй тарихындағы иң фажиғәле, ҡан ҡойғос граждандар һуғышы башланғас, башҡорттар араһында бер лозунг киң таралған була: "Беҙ ҡыҙыл да, аҡ та түгел, беҙ - башҡорттар!" Аҙағыраҡ башҡорт милли хәрәкәте лидеры Әхмәтзәки Вәлиди ҙә ошо сәйәси принциптың ул саҡтағы әһәмиәтен иҫкә алып китә. Әлбиттә, иң элгәре ошо сәйәси позицияның ул осорҙағы мәғәнәһен дөрөҫ аңлай алыу кәрәк. Әммә, хәҙерге заман күҙлегенән ҡарап, беҙ ошо тарихи лозунгыны ҡабатлап, яңыса баһалай алабыҙ. Киләсәгебеҙҙе күҙаллау өсөн дә тарихи үткәндәребеҙҙе барлау фарыз: үҙ асылын, мөмкинлектәрен билдәләй алмаған субъект үҙеш маҡсатын да дөрөҫ билдәләй алмай. "Кем беҙ, ҡайҙанбыҙ, йәшәйеш юлыбыҙ ҡайҙа алып бара? - бына ошондай һорауҙарға тарихи ретроспектива аша яуап табып була ла инде. Һеҙгә БР Фәндәр академияһы Гуманитар тикшеренеүҙәр институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре, философия фәндәре кандидаты Азат БЕРДИНДЫҢ башҡорттарҙың милли идеологияһы хаҡындағы фәһемле фекерҙәрен тәҡдим итәбеҙ.**

### Башҡортҡа сама белеп эш итеү хас

XX быуат башында Рәсәйҙең элита ҡатламы, сәйәси етәкселеге ил проблемаларын хәл итеү юлдарын тиҙ генә таба алмайынса, килеп тыуған ҡапма-ҡаршылыҡты көсәйтеп, тәүҙәрәк бер-береһен ҡан дошман итеп күрмәгән кешеләрҙе граждандар һуғышы афәтенә алып инеү мөмкинлеген тыуҙыра. Ә бына башҡорттарға бер сиктән икенсеһенә тайпылыу хас түгел, шуға ла уларҙы ҡыҙылдар йәиһә аҡтар фанатизмы ла әүрәтә алмаған. Тап ошо бер-береһенә дошмандарса ҡараштағы булған ике яҡ бөтә ил халҡын ҡырылышҡа алып инә, әммә был хәл башҡорт күңеленә ят була. Дөрөҫөн әйткәндә, бер үк ил граждандарының бер-береһен ҡырыуын бер нисек тә ыңғай баһалап булмай, был халыҡтың эске сифаттарына ҡаршы килә. Граждандар һуғышына көсләп тигәндәй йәлеп ителгән күптәр йә был, йә теге яҡты ахырынаса үҙенеке итеп тоя алмай ҡаңғыра, әммә ошо ҡапма-ҡаршы тороуҙың үҙенә ят күренеш икәнен, уны ысынлап ҡабул итергә теләмәүен башҡорттарҙан башҡа бер кем дә асыҡтан-асыҡ белдерергә баҙнат итмәй. Башҡорт зыялылары үҙ халҡы исеменән ошо фекерҙе һис бер икеләнеүһеҙ Рәсәйҙең яңы власть даирәләренә тиклем еткерә алған.

Яңы ғына барлыҡҡа килеп, үҫеш юлына сыҡҡан йәш башҡорт зыялылары ҡатламы үҙ халҡынан айырылып өлгөрмәүе һәм уның проблемалары өсөн көйөп-янып йәшәүе арҡаһында Рәсәй ысынбарлығындағы сәйәси хәлдәрҙе объектив анализлап, ошо ҡапма-ҡаршылыҡлы заманда үҙ халҡына йүнәлеш биреп, туплай алыуға өлгәшкән.

Бына казактар фажиғәһен алып ҡарайыҡ. Михаил Шолохов уны бик сағыу рәүештә күрһәтә алған: Григорий Мелехов аҡ та, ҡыҙыл да түгел, бер сиктән икенсеһенә һуғылып ҡаңғыра, үҙ трагедияһының сәбәптәренә төшөнә алмай, үҙ асылын таба алмай ыҙалана. Башҡорттарға ла ошондай ҡазалы юлды үтергә тура килә, әммә улар ошо сәйәси ваҡиғаларҙа әүҙем ҡатнашып, үҙ мәнфәғәттәре өсөн көрәшеү юлын һайлай. Бында улар һәр береһе айырым-айырым шәхес сифатында түгел, ә аңлы маҡсат менән ойошҡан ғәскәр рәүешендә хәрәкәт итә.

Автономия өсөн көрәш тотош халыҡ массаларының берҙәм һәм ойошҡан көскә әүерелеүенә килтерә. Әлбиттә, ошондай мәлдә халыҡ мәнфәғәттәрен сағылдырыусы ойошманың булыуы мотлаҡ, Башҡорт Үҙәк шураһы тап ошондай ойошмаға әүерелә. Шура ағзалары милли хәрәкәттә ошо ваҡиғаларға тиклем уҙғарылған өс башҡорт ҡоролтайы ҡарарҙарына нигеҙләнеп эш итә. Ҡоролтай ул саҡта халыҡ мәнфәғәттәрен сағылдырыусы төп демократик орган ролен үтәй ҙә инде, сөнки уның делегаттары башҡорттар йәшәгән барлыҡ төбәктәрҙән һайланған була.

Башҡорт сәйәси етәкселеге үҙ халҡы өсөн "алтын урталыҡ"ты табырға ынтылып, тәү мәлдә дошманлашҡан ике яҡтың береһенә лә ҡушылмау яғын өҫтөн күрә, бының өсөн мөмкин булған барлыҡ сараларҙы ҡуллана.



Үҙ халҡы араһында ҙур абруй яулаған Әхмәтзәки Вәлиди Төркөстанды мөстәҡил дәүләт сифатында күрергә теләнә лә, Башҡортостандың Рәсәй составындағы автономия статусына өлгәшеүен ғәмәли маҡсат итеп ҡуя. Формалашып килеүсе яңы башҡорт идеологияһында бар өлкәләрҙә лә сәйәси ысынбарлыҡ менән иҫәпләшеп, самалап, үлсәп эш итә белеүгә өҫтөнлөк бирелә. Граждандар һуғышының иң ауыр мәлдәрендә лә, килеп тыуған ҡапма-ҡаршылыҡтарға, билдәһеҙлеккә, тарҡаулыҡҡа ҡарамаҫтан, башҡорт етәкселеге сәйәси компромисс юлын һайлай, сөнки был халыҡ идеологияһына тап килә. Автономия өсөн эҙмә-эҙлекле алып барылған көрәш һөҙөмтәһендә Үҙәк Совет власы менән Килешеү төҙөүгә өлгәшеү башҡорт сәйәсмәндәренең оло ҡаҙанышы итеп баһалана. Әлбиттә, башҡорт етәкселегенең автономияның Бәләкәй Башҡортостан сиктәрендә генә ойошторолоуы менән ризалашыуын да сәйәси компромисс тип ҡарарға кәрәк. Ул саҡта Башҡорт хөкүмәте тап ошо территория сиктәрендә ойоштороу эшмәкәрлеген йәйелдереп, урындағы власть органдарын булдырып, башҡорт ғәскәри корпусын төҙөүгә өлгәшә.

### Башҡортлоҡтоң ижтимағи-сәйәси феномен булыуы

"Беҙ ҡыҙыл да, аҡ та түгел, беҙ - башҡорттар!" лозунгыһының беҙгә сәйерерәк булып тойолған сағыштырыуы төбөндә оло мәғәнә ятыуына иғтибар итеү фарыз. Бында, мәҫәлән, "Беҙ урыҫ та, татар ҙа түгел, беҙ - башҡорттар!" тип әйтеү урынлыраҡ тойола бит инде. "Ҡыҙылдар һәм аҡтар" - ижтимағи-сәйәси көстәр атамаһы, ә "башҡорт" - этнос исеме. Әммә был осраҡта беҙ башҡортлоҡто этник феномен булараҡ ҡына түгел, ә ижтимағи-сәйәси төшөнсә сифатында ла ҡарай алабыҙ. Тарихта башҡорттарҙың ижтимағи сословие һәм сәйәси берләшмә рәүешендә ҡаралыуы ла ысынбарлыҡҡа һәм этностарҙың социаль ҡатламдарға бүленеүе тәғлимәтенә тап килә.

Башҡорттарҙың бер үк ваҡытта этник һәм ижтимағи-сәйәси феномен булып формалашыуы уларҙың тарихи килеп сығышы һәм үҫеше менән бәйле. Тарихсы Булат Аҙнабаев башҡорттарҙың Алтын Урҙа дәүләте осоронда уҡ айырым халыҡ һәм ижтимағи сословие рәүешендә ҡаралыуын раҫлай. Башҡорттарҙың этнос һәм социаль сословие үҙенсәлектәре ҡушылып килә, шунлыҡтан, йыш ҡына ҡайһы бер тарихсылар был хәлгә асыҡлыҡ индерә алмайынса, буталсыҡ полемика алып бара: башҡорт ҡасан этнос исемен, ҡасан сословие атамаһын аңлата икән? Бында бәхәс алып барырлыҡ бер ниндәй нигеҙ юҡ. Алтын Урҙа осоронда уҡ башҡорттар аҫаба халыҡ - ер биләмәләре хужалары булараҡ билдәле була, һәм ошо аҫабалыҡ хандар тарафынан танылып, башҡорт халҡын этнос һәм социаль ҡатлам булараҡ нарыҡлап тора. Һуңынан тап башҡорттарҙың тарихи аҫабалыҡ хоҡуғы уларҙың Нуғай хакимдары менән өҙөлйлы конфликтына сәбәп була. Нуғай ханлығында биләмәләр, уң һәм һул ҡанаттарға бүленеп, Бөйөк мырҙа тарафынан бирелә. Заманында үҙҙәренең аҫабалыҡ хоҡуғын Сыңғыҙ хандан раҫлатҡан башҡорттар, Нуғай хакимдарының Сыңғыҙ вариҫтары булмауынан файҙаланып, уларҙың үҙ ерҙәре менән идара итеүен танымай. Һуңынан башҡорттар Нуғай хакимы Исмаил мырҙаны инҡар итеп, унан башҡа һәм уның ихтыярынан тыш, Мәскәү дәүләтенә ҡушылыуҙы хуп күрә. Бында бына нимә мөһим: һан яғынан артыҡ ҙур булмаған башҡорттар Евразия империялары составына инеү мәсьәләләрен һәр саҡта ла үҙаллы хәл иткән, үҙ хакимын үҙе һайлап, бер үк ваҡытта үҙ хоҡуҡ-мәнфәғәттәрен ғәмәлгә ашыра алған. Ата-бабаларыбыҙ хакимдарҙың теләһә ниндәй шарттарына күнгән, тип уйларға ярамай, киреһенсә, улар үҙ шарттарын ҡабул иттереүгә өлгәшә алған. Ошо шарттарҙың иң мөһиме - үҙаллылыҡҡа хоҡуҡ, йәғни оло дәүләт составында автоном рәүештә йәшәй алыу. Этностың бына ошо ижтимағи-сәйәси статусын һаҡлауға ынтылыу башҡорт халҡы идеологияһының нигеҙ ташы булып формалашҡан, тип әйтергә була.

Шулай итеп, башҡорттарҙың үҙаллы этнос булараҡ хоҡуҡтары Рус дәүләтенә ҡушылыу ваҡытынан күпкә алдараҡ формалашҡан була, һәм рус батшаһы тарафынан уларҙы таныу һәм раҫлау тәбиғи рәүештә хәл ителә. Рус дәүләтенә ҡушылыу айырым ырыу делегациялары тарафынан башҡарылғас, бөтә башҡорт халҡы тураһында һүҙ алып барыу мөмкинлеге, йәиһә ошо хаҡтағы реаль документтарҙың булыу-булмауы менән бәйле бәхәстәр ҙә бар. Аҫабалыҡ хоҡуғы ырыу-ҡәбилә ерҙәренә ҡағыла, шуның өсөн ошо хоҡуҡты таныу, биләмәләр сиктәрен раҫлатыу ырыу башлыҡтарының төп бурысы була ла инде. Рус наместниктарына айырым ырыу вәкилдәре килгән хәлдә лә, улар барыбер башҡорт исеме аҫтында теркәлгән. Ер биләмәләренә, дин иреген хоҡуҡ, ғөрөф-ғәҙәттәрҙең, йәшәү рәүешенең һәм быуаттар дауамында нығынған идара итеү рәүешенең һаҡланыуына рус батшаһы исеменән ризалыҡ белдерелгән. Ә документтарҙың нөсхәләре табылмаһа ла, килешеү нигеҙендә реаль хоҡуҡтарҙың танылыуы һәм оҙаҡ ваҡыттар буйына һаҡланыуы үҙе үк бар бәхәстәргә сик ҡуя.

Аҫабалыҡ хоҡуғының башҡорттар өсөн ни тиклем мөһим икәнлегенә рустар тәүҙә артыҡ иғтибар итмәгән, күрәһең, шулай уҡ башҡорт-нуғай конфликты ошо хоҡуҡ менән бәйле булыуын да улар белмәгән. Нисек булһа ла, Ҡазан ханлығы яулангандан һуңғы осорҙа рус батшалығына башҡорт ырыуҙарын тыныс юл менән үҙ ҡанаты аҫтына алыу отошлораҡ булған. Иван Грозный илдең көнсығыш сиктәрен һаҡлап тороу йәһәтенән башҡорттарҙың бик кәрәкле көс икәнен яҡшы аңлаған. Һуңыраҡ башҡорттарҙың тап ошо килешеүҙәр нигеҙендә раҫланған хоҡуҡтарының батша чиновниктары тарафынан тупаҫ һәм даими рәүештә боҙола килеүе уларҙы ике быуат дауамында тиңһеҙ көрәш алып барыуға, ҙур юғалтыуҙарға ҡарамайынса, һәр 15-20 йыл һайын тиерлек яңы ихтилалға күтәрелеүгә килтергән. Тимәк, башҡорт статусының тейелгеһеҙ булыуы, уның үҙ ерендә үҙаллы һәм ирекле тормош ҡора алыуы халыҡ үҙаңында төп урынды биләгән, һәм был башҡорт халҡы идеологияһының иң тоторолҡло яғы рәүешендә ҡабул ителә. Башҡорттар Рәсәйгә ҡаршы түгел, ә үҙ хоҡуҡтарын ҡыҫыусы, уларҙы түбәнһетеүсе, бөлдөрөүсе системаға ҡаршы күтәрелә. Асыҡ һәм йомарт, ҡунаҡсыл, аҡтыҡ сиккә етеүҙән уртасалыҡта булыуҙы хуп күргән, үҙенең ирекле булмышын, тәбиғи һәм социаль статусын кәмһетеүҙән дә яманыраҡ башҡа нәмәне белмәгән башҡорт бындай осраҡтарҙа үҙенең ҡурҡыу белмәҫ һуғышсан халыҡ икәнен дә күрһәтә белгән. Башҡорт ихтилалдарын ҡәҙимге бунт менән сағыштырып булмай: башҡорттар Рәсәй властарына бер ниндәй ҙә элек ысынбарлыҡта булмаған талаптар ҡуймай, уларҙан тормошҡа ашмаҫтай артыҡ бер ни ҙә һорамай, бары элекке килешеүҙәрҙә теркәлгән законлы хоҡуҡтарын яҡлап сығыш яһай.

### Ерһеҙ башҡорт башҡортлоғонан яҙа

XIX быуаттың икенсе яртыһында, кантонлыҡ системаһы һәм башҡорт ғәскәре бөтөрөлгәс, башҡорт ерҙәрен генераль межалау башлана, аҫаба ерҙәр һатыу-алыу объектына әйләнделеп, уларҙы алыуға юл асыла. Башҡорттар, ҡәҙимге граждандыҡ сословиеһына күсерелеү менән үҙҙәренең элекке

**Башҡорттарҙың этнос һәм социаль сословие үҙенсәлектәре ҡушылып килә, шунлыҡтан, йыш ҡына ҡайһы бер тарихсылар был хәлгә асыҡлыҡ индерә алмайынса, буталсыҡ полемика алып бара: башҡорт ҡасан этнос исемен, ҡасан сословие атамаһын аңлата икән? Бында бәхәс алып барырлыҡ бер ниндәй нигеҙ юҡ. Алтын Урҙа осоронда уҡ башҡорттар аҫаба халыҡ - ер биләмәләре хужалары булараҡ билдәле була, һәм ошо аҫабалыҡ хандар тарафынан танылып, башҡорт халҡын этнос һәм социаль ҡатлам булараҡ нарыҡлап тора.**

***✓ Башҡорттарға традиционализм, йәғни ҡәҙимселек хас, улар быуаттар дауамында барлыҡҡа килгән ғөрөф-ғәҙәттәренә ярашлы йәшәргә күнеккән. Элекке статусын юғалтыу менән ул яңы шарттарға тиҙ генә яраҡлашып китә алмай.***



# АК ТА ТҮГЕЛ...

## милли идеологияһы тураһында

айырым социаль статусын юғалта, ә ерһеҙ ҡалғандары, бөтөнләйгә бөлгөнлөккә төшөп, башҡорт ярлы-ябаға ҡатламын барлыҡҡа килтерә. Үҙенең ҡәҙимге йәшәү рәүешен, традицион хужалыҡ итеү мөмкинлектәрен юғалтыу башҡорттар араһында рухи төшөнкөлөккә нигеҙ бирә. Башҡорт ерҙәрен талау алдынғы рус интеллигенцияһында борсолоу һәм протест тойғоһо уятып, ошо осорҙағы әҙәби һәм публицистик әҫәрҙәрҙә киң сағылыш таба. Мәҫәлән, Д. Мамин-Сибиряк ошо дәүергә хас булған бер парадоксты билдәләп үтә: башҡорттар бөлгөнлөккә төшә барһа ла, уларҙың һаны арта бара. Башҡорттарға традиционализм, йәғни ҡәҙимселек хас, улар быуаттар дауамында барлыҡҡа килгән ғөрөф-ғәҙәттәренә ярашлы йәшәргә күнеккән. Элекке статусын юғалтыу менән ул яңы шарттарға тиҙ генә яраҡлашып китә алмай. Уларҙың ерҙәре башҡаларҙыҡынан күберәк булған хәлдә лә, ер тауар етештереү сығанағы сифатында файҙаланылмай. Ерһеҙ башҡорттарҙың бер өлөшө алтын приискыларында, завод-фабрикаларҙа ялланып эшләүселәр сафын тулыландыра. Әле күптән түгел генә ер хужаһы булған кешенең берәҙәккә, зимагорға әйләнеүе халыҡ араһында әхлаҡи төшөнкөлөктөң арта барыуына килтергән. Шулай итеп, халҡыбыҙҙың XIX быуат аҙағындағы трагедияһы Рәсәйҙә буржуаз реформалар башланыуы менән бәйле. Европанан артта ҡалған Рәсәй бер нисә тиҫтә йыл эсендә үҙенең хужалыҡ итеү системаһын тамырынан үҙгәртергә маташһа ла, был илде бөлгөнлөккә төшөрөү һәм билдәле рус революциялары менән тамамлана. Ошо осорҙа башҡорт халҡының алдынғы вәкилдәре үҙаңында ла миллилек ныҡ үҫеш кисерә, улар традицион хоҡуҡтары өсөн көрәшкә халҡын күтәрергә әҙер булып сыға. Тап шуның өсөн башҡорт милли хәрәкәтендә ер мәсьәләһе иң үҙәк проблема булып иҫәпләнә.

### Тарих ҡабатлана...

Әле иҫкә алынған тарихи осорҙо яманаты сыҡҡан хосусилаштырыу кампанияһы менән сағыштырһаң, улар өсөн уртаҡ сифаттарҙы күрергә була. Теге ваҡытта ла, хәҙер ҙә ил күләмендә башланған реформалар тотош халыҡ массаларының ҡәҙимге, күнегелгән йәшәү рәүешен тамырынан үҙгәртә, әммә бар кеше лә ошо үҙгәрештәрҙе ҡабул итеп, яраҡлашып китә алмай. Элегерәк даими эш урыны, вазифаһы, бурыстары булған, хеҙмәте өсөн ҙур булмаһа ла, даими рәүештә эш хаҡы алып торған кеше тулыһынса үҙ ҡарамағына ҡалдырыла. Тик барыһы ла үҙ эшен ҡора, үҙенә яраҡлы урын да таба алмай ыҙалана. Тап шуның арҡаһында ауылдарҙа ла, ҡалала ла бар ваҡытын буштан-бушҡа ауҙарып, ваҡытлыса ғына ялланып эшләп алып, эскелеккә һабышып китеүселәр ҙә аҙ түгел. Был хәл бигерәк тә традицион йәшәү ҡанундарын һаҡлаусы ауыл мөхитенә емергес йоғонто яһаны. Иҫ китмәле бит: Рәсәй буйынса меңәрләгән ауылдар юҡҡа сыҡты, бөтмәй ҡалғандарында ла төшөнкөлөк хөкөм һөрә. Хатта йәштәр араһында ла уҡырға ла, эшләргә лә, һис булмаһа, армияла хеҙмәт итергә лә теләмәгәндәр бар. Телевидениенан, ваҡытлы матбуғат сараларынан бер туҡтауһыҙ тиерлек кешене матди ихтыяждары тураһында ҡайғыртырға, йә быныһын, йә тегеһен ҡулланырға саҡырыу яңғырап тора. Торабара кемдеңдер аңында үҙенең бары тик ҡулланыусы булыуы тураһындағы фекер өҫтөнлөк ала, бының өсөн ул хатта енәйәт юлына баҫырға ла әҙер булып сыға. Быны уйланып еткерелмәй башҡарылған реформаларҙың кеше факторын һис бер иҫәпкә алмауы һөҙөмтәһе икәнен дә онотторға ярамай.

### Милли ҡиммәттәргә тоғролоҡ милләтте һаҡлай

XIX быуат аҙаҡтарында, XX быуат башындағы реформаларҙың һәм күптән түгел, 90-сы йылдарҙа үҙебеҙ кисергән үҙгәрештәрҙең башҡорт халҡының үҙаңына, киләсәккә ҡарашына нисек йоғонто яһауына, бында ниндәй айырма булыуына иғтибар итергә кәрәк. Традицион хоҡуҡтары юҡҡа сығарылған, кәмһетелгән башҡорт халҡы илдә тоҡанып киткән революцион процестарға бик әүҙем ҡушылып китеп, тик үҙенә генә хас булған талаптарын бар Рәсәй халыҡтарына еткереп, милли азатлыҡ көрәшенә күтәрелә, ҡан ҡойоп, ҙур юғалтыуҙарға юлығып, үҙ дәүләтселегенә - автономия хоҡуғының Үҙәк власть тарафынан танылыуына өлгәшә. Ә бына 90-сы йылдарҙа хәл икенсерәк, күпкә еңелерәк булды. Башҡортостандың автономиялы республика булыуы Федераль Үҙәк башлап ебәргән реформаларҙың ауыр йоғонтоһон йомшарта биреп, бер ни тиклем ваҡытҡа кисектереп тороу мөмкинлеген бирҙе. Ошо саҡта иғлан ителгән дәүләт суверенитеты ҡағыҙҙа ғына яҙылған декларатив төшөнсә булып ҡалманы, ә республика халыҡтарының мәнфәғәттәрен һаҡлап тороусы ҡалҡан ролен дә үтәне. Әлегә тиклем эшләп килгән хужалыҡ итеү механизмын тулыһынса юҡ итеүҙең катастрофик һөҙөмтәләргә килтерәсәген Башҡортостан Президенты Мортаза Рәхимов та, республика етәкселеге лә яҡшы аңлай ине. Шуның өсөн беҙҙә колхоз системаһы тарҡатылмай ҡала бирҙе, хосусилаштырыуҙа ла ашығыслыҡ булманы, был иһә реформаларҙың иң киҫкен мәлен уҙғарып, халыҡҡа киләсәк үҙгәрештәргә аҡрынлап яраҡлаша алыу мөмкинлеген бирҙе. Республика етәкселегенең ошо осорҙағы идеологияһында бер сиктән икенсеһенә тайпылмау өҫтөнлөк итте, ә был башҡорт халҡына хас уртасалыҡ, самалап эш итеү кеүек ҡараштарға тап килә. Әлбиттә, колхоздар беҙҙә лә тарҡалды, хосусилаштырыуҙан да ҡотолоп булмай ине. Шулай ҙа бына нәмә мөһим: республиканың төп етештереүсе көстәре ситкә таратылып, юҡҡа сығарыуға дусар ителмәне, ул үҙ мөмкинлектәрен юғалтманы. Реформалар идеологияһы тураһында һүҙ йөрөткәндә, бына нимәгә иғтибар итергә кәрәк: хужалыҡ итеү системаһын тамырынан үҙгәртеү бер үк ваҡытта кешеләрҙең аңын һәм үҙаңын ҡайтанан ҡороу менән бәйле. Рәсәйҙә башланған реформаларҙы шуның өсөн антропологик революцияға тиңләп була. Әммә был турала ил етәкселәре лә, реформаны башлап ебәреүсе идеологтар ҙа бер ни ҙә әйтмәне. Бөтөнләйе менән икенсе йәмғиәт системаһы шарттарында формалашҡан кешене тиҙ арала нисек үҙгәртеп ҡороп була? Бары тик көс ҡулланыу, мәжбүр итеү, һындырыу юлы менән генә. Дөрөҫөн әйткәндә, Рәсәй халҡын тап шулай һындырҙылар ҙа инде. Икенсенән, үҙгәртеп ҡороуҙың моделе рәүешендә Көнбайыш системаһы һәм унда быуаттар дауамында формалашкан Көнбайыш кешеһе торҙо. Әммә беҙҙең шарттарҙа йәшәгән кешенең үҙлеге (идентичность), йәмғиәт ағзаһы булараҡ асылы бөтөнләйгә икенсе, Көнбайыш кешеһенә хас булмаған сифаттар менән билдәләнеүе һис иҫәпкә алынманы.

Бөйөк антрополог Леви-Стросс үҙенең ғилми тикшеренеүҙәре һөҙөмтәһендә бик мөһим бер һығымтаға килә: әгәр бер йәмғиәт үҙ ҡиммәттәрен тулыһынса икенсе бер йәмғиәттең ҡиммәттәре менән алыштырыу юлына сыҡһа, ул йәмғиәт үҙенүҙе һәләк итә икән. Төрлө йәмғиәттәр араһында мәҙәни хеҙмәттәшлек булып, алдынғы тәжрибә менән уртаҡлашыу, ниндәйҙер яңылыҡтарҙы үҙләштереү мөмкин, әммә бер йәмғиәт икенсеһен ҡабатлай алмай, икенсе булырға теләү үҙ-үҙендән ваз кисеүгә тиң икәнен аңларға кәрәк беҙгә. Бер милләт үҙ телен, мәҙәниәтен, йәшәү рәүешен, башҡа ҡиммәттәрен икенсе милләттеке менән алыштыра икән, ул үҙаллы милләт булыуҙан туҡтаясаҡ. Милли үҙенсәлектәр һәм ҡиммәттәрҙең генетик юл менән түгел, ә этник мөхиттәге иң мөһим сигналдарҙы - мәҙәни мираҫты үҙләштереү аша формалашыуын иҫтә тоторға кәрәк.

### Тарих һабаҡтарын белеү киләсәк өсөн кәрәк

1917 йылдың бөтә Рәсәй һәм, әлбиттә, башҡорт халҡы өсөн гигант тарихи һабаҡ булыуын билдәләп үтеү урынлы булыр. Уңышһыҙ социаль реформаларҙың тотош илде һәләкәткә алып барыуы хаҡында киҫәтә был ваҡиғалар. Беҙҙең башҡорт сәйәсмәндәренең дә, башҡалар менән бергәләп, яңы Рәсәй етәкселеге менән билдәле компромисҡа килеүе, федераль дәүләтселектең, һуңынан Советтар Союзының барлыҡҡа килеүе илде социаль катастрофанан ҡотҡарып ҡала. Халҡыбыҙ өсөн сикләнгән булһа ла автономия хоҡуғын алыу уның Рәсәй составында күп быуаттар дауамында айырым статусы булыуының да һөҙөмтәһе ул. Ғөмүмән, башҡорттарҙы Рәсәй составындағы уникаль халыҡ тип ҡарау раҫ. Шул уҡ аҫабалыҡ, ғәскәри сословиела тороу, кантон идаралығы системаһы, башҡорт эштәрен көйләүсе айырым дәүләт хоҡуҡи акттары - былар барыһы ла үҙ ваҡытында башҡорт халҡының ижтимағи-сәйәси үҙенсәлеген һәм билдәле кимәлдәге үҙаллылығын күрһәтеп тора. Зәки Вәлидиҙең пландарында айырым башҡорт ғәскәре дәүләтселектең иң мөһим факторы итеп ҡаралһа, Килешеү нигеҙендә булдырылған кантон идаралыҡ системаһы шул уҡ ырыу аҫабалығының асыҡ сағылышы булып тора. Башҡорт дәүләтселегенең башҡа атрибуттарына - байрағына, гербына, башҡорт теленең дәүләт теле статусы алыуына, айырым нәшриәт, мәғариф учреждениелары булдырылыуына автономияның тәүге аҙымдарынан уҡ ҙур иғтибар бүленә.

Башҡорт халҡына батша Рәсәйендә лә, Совет дәүерендә лә ошо ижтимағи-сәйәси статус өсөн башҡа бер халыҡтың да яҙмышында булмаған юғалтыуҙар аша үтергә тура килә. Башҡорттарҙың эске бойондороҡһоҙлоғо, ныҡ үҫешкән азатлыҡ тойғоһо уларҙың үҙ статусын яҡлау һәм һаҡлау өсөн көрәшкә күтәрелергә һәр саҡта әҙер булыуында ла сағыла. Башҡорт ихтилалдарының аныҡ сәбәбе төрлө булһа ла, башҡорттар власть даирәләренә үҙҙәренең һәр бер чиновник баш-баштаҡлығына түҙеп, бер һүҙһеҙ буйһоноусы меҫкен халыҡ булмауын ҡаттан-ҡат белдерә килә. 1735 - 1740 йылдарҙағы ихтилалды баҫтырыу ваҡытында тотош халыҡ геноцидҡа дусар ителеп, аяуһыҙ ҙур юғалтыуҙарға дусар була. Ғәжәп бит: был язалауҙар башҡорт рухын һындыра алмай, киреһенсә, уны нығыта ғына бирә. Был тарихи хәҡиҡәтте тағы ла бер тапҡыр раҫлай: ирек өсөн йәнен фиҙа ҡылыуҙан ҡурҡмаған халыҡ ҡына ошо изге маҡсатҡа өлгәшә ала. Мәғлүм булыуынса, Салауат Юлаев етәкселегендәге 1772-1775 йылдарҙағы күтәрелеш ирек һөйөүсе халыҡ рухының һуңғы аккорды булып яңғырай. Был батша властарынан башҡорт мәсьәләһен нисек тә булһа хәл итеүҙе талап итә. Һәр бер яңы батша өсөн тап башҡорт эштәре иң киҫкен эске мәсьәлә булып иҫәпләнә. Ниһайәт, Европалағыса эш итергә ынтылыусы Екатерина II башҡорттарҙы тынысландырыу өсөн берҙән-бер һөҙөмтәле сара таба: башҡорттар ғәскәри хәлгә күсерелеп, уларға билдәле бер өҫтөнлөктәр бирелә. Императрицаның ихтилалда ҡатнашҡан бик күптәргә амнистия иғлан итеүе лә ул саҡта бик ваҡытлы сара була. Башҡортарҙың хоҡуҡи хәле ҡабул ителгән дәүләт документтарында ҡәтғи һәм аныҡ сағылыш таба. Быны башҡорттарға империяла айырым статус биреләүгә тиңләп була. Шуның өсөн кантонлыҡ осороның һәм башҡорттарҙың ғәскәри бурыс үтәүенең тик кире яҡтарын ғына күреү объектив булмаҫ ине. Һөҙөмтәлә башҡорт ерендә бығаса күрелмәгән тыныслыҡ урынлаша. Башҡорт ғәскәре Рәсәй империяһының күп хәрби походтарында, айырыуса 1812-1814 йылдарҙа француз баҫҡынсыларына ҡаршы һуғышта ҡатнашып, дан ҡаҙана. Башҡорттоң эске идеологияһын белмәгән кешегә бер аҙ сәйерерәк тойолалыр: әле бер нисә тиҫтә йыл элек кенә баш күтәргән ихтилалсыларҙың улейәндәре рус армияһы сафтарында Рәсәй өсөн йән аямай һуғышҡа инә. Әммә был ике тарихи күренеш араһында тығыҙ бәйләнеш бар: тәүгеһендә лә, икенсеһендә лә башҡортар ғәҙеллек һәм азатлыҡ өсөн көрәш алып барған. Тап шуның өсөн Өфөлә ихтилалсылар рухын һәм ил өсөн башын һалған башҡорт атлы ғәскәрҙәре данын мәңгеләштергән тарихи һәйкәлдәр ҡуйылырға тейеш.

Әйткәнемсә, хәҙерге осорҙа ил етәкселәре Рәсәйҙе Көнбайыш моделе буйынса үҙгәртеп ҡороу сәйәсәтен алып бара. Әммә был юлдың уңышлы тамамланыуына өмөт юҡ. Рәсәйҙең киләсәге өсөн үтә хәүефле депопуляция процестары тап ошоға дәлил булып тора. Башҡортостан - Рәсәйҙең иң боронғо тарихи төбәге, һәм ул оло илебеҙ яҙмышының иң һынылышлы мәлдәрендә уның ныҡлы терәге булып һаналған. Бәлки, беҙ Башҡортостандың Рәсәйҙә тотҡан ролен тулыһынса баһалап та еткермәйбеҙҙер. Һис шикһеҙ, тарихи традицияларға тоғролоғо һәм бер үк ваҡытта яңы башланғыстары менән Башҡортостан киләсәктә лә Ватаныбыҙ үҫеше өсөн яңы мөмкинлектәр асасаҡ.

**Шулай итеп, халҡыбыҙҙың киләсәген ҡайғыртабыҙ тиһәк, милли традицияларыбыҙға нигеҙләнгән идеологияға өҫтөнлөк биреү фарыз. Башҡалар артынан һуҡырҙарса эйәреү ҡабатланмаҫ милли үҙенсәлектәребеҙҙе, ә шуның менән бергә милли статусыбыҙҙы, халҡыбыҙҙың дәүләтселеген һаҡлап ҡалыу мөмкинлектәрен юҡҡа сығарасаҡ. Тимәк, әлеге шарттарҙа беҙгә үҙ ерлегебеҙгә һәм мөмкинлектәребеҙгә таянып, яңы үҫеш юлдарын билдәләй алыу кәрәк. Башҡортостандың тарихи, традицион үҙаллылығы, уның автоном дәүләтселегенең киләсәктә лә һаҡланып ҡалыуы мөһим. Рәсәйҙең милли-территориаль нигеҙҙә ҡоролған федератив ҡоролошо бер республика сиктәрендә төрлө милләт кешеләренең һыйышып һәм берҙәм йәшәй алыуын күптән раҫланы бит инде.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ**
**әҙерләне.**

ЗАУЫҠ

# КҮҘ КҮРМӘҺӘ, КҮҢЕЛ КҮҘЕМ

## бөгөн дә үткер-зирәк

### Һөйөнәм

Шыбыр-шыбыр ямғыр яуҙы
Төндә лә һәм көндөҙ ҙә,
Мин ямғырҙы тәбрикләнем,
Ҡыуанып та, өнһөҙ ҙә.

Ужымдар бейек ҡалҡыныр,
Башаҡ тиҙҙән баш төртөр,
Тыуып-үҫкән яҡтарыма
Тәбиғәт, тим, үлсәп тормай
Килтерсе, муллыҡ килтер...

### Баш

Бер урында
Оҙай ятһа,
Мүкләнә таш.
Шуға оҡшаш
Булып ҡуя
Уйланмайса,
Тик торһа баш.

***

Ҡартайҙым. Күҙҙәр зәғиф, тип
Зарланырға юҡ сәбәп.
Зарланыу бит меҫкендәрҙән
Күсеп килгән буш ғәҙәт.

Күҙ күрмәһә, күңел күҙем
Бөгөн дә үткер-зирәк,
Йыр яҙыу, йәшәүҙе данлау
Хаҡ Тәғәләнең үҙенән
Бирелгән һәйбәт ғәҙәт.

***

Атлағанда булә күрмә
Кешенең юлын,-
Юл бүлеүҙәр ҡорота ул
Юлға арҡыры төшкәндең
Аяҡ һәм ҡулын.

### Ҡәләм осонда

Ҡәләм осонан
Йондоҙҙар тама,
Ҡәләм осонда
Нәфрәт тә яна.

Ҡәләм осонда
Балҡый мөхәббәт.
Ҡәләм осонда
Үлә ҡәбәхәт.

### Ләкин

Алтынға ла баш эймәнем,
Баш эймәнем көмөшкә.
Ләкин алтын-көмөш әҙләп
Мин йәшәнем һәр эштә.
Шатланышып,
Шундай яҙмыш
Төшкәнгәләр өләшкә.

***

Йәшәгәндә
Бер кемде лә
Кәмһетмә.
Кәмһетеү
Көс бирмәй
Егетлеккә.

Файыҡ МӨХӘМӘТЙӘНОВ.






Флора БИКЕМБӘТОВА

# МИНЕ ТЫУҘЫРЫР ӨСӨН...

(Хикәйә)

Гөльямал тынысланырға теләп, баҡса йорто тәҙрәһенең һалҡын быялаһына маңлайын терәне. Бер үҙе генә ҡалып, аҙаҡҡы көндәрҙә тынғы бирмәй йонсотҡан уйҙарының төбөнә төшөп, ниндәй ҙә булһа бер һығымтаға килергә кәрәк ине уға. Шуға ла йоманы саҡ еткереп, кискә табан булһа ла баҡсаларын килгәйне. Әллә үтә ярһыған, әллә шул тиклем хәтере ҡалған, күңел торошо уға һаман да тынысланырға бирмәй. Ә уйҙары осон һис тоттормай, уның менән уйнаған шикелле, бер урында өйөрөлә лә өйөрөлә. Етмәһә, быялаға сәтер-сәтер итеп бер туҡтауһыҙ һибәләп торған сәберләк көҙгө ямғыр, ел көсәйеп өргән һайын алмағас ботағының шаҡ та шоҡ тәҙрәгә һуҡҡан тауышы ла албырғата.

Ул ҡапыл ғына бөтә нәмәнән төңөлдө лә ҡуйҙы. Бер эшкә лә ҡулы бармаҫ булды. Хатта шул тиклем яратып, ҡәҙерләп үҫтергән сәскәләрен дә ҡарамай, өйөнә инде лә бикләнде. Нимә булды уға? Әллә яңылышамы, әллә уға ла күптәрҙең тормошонда була торған күңелһеҙ ваҡиғанан урап үтергә яҙмағанмы? Ныҡлы ғаиләм бар, тип йөрөгән мәлдә ҡапыл барыһы ла юҡҡа сығырға тора бит. Һуңғы арала ире уның менән тупаҫ һөйләшә, әллә ниндәй һүҙҙәр әйтеп йәберһетеп, нахаҡҡа ғәйепләп ташланы. Барыһына ла Гөльямал сәбәпсе икән, етмәһә. Өйләнешеп, бергә йәшәй башлағанда уҡ уларҙың икеһенең ике төрлө кеше икәне билдәле ине шул. Гөльямал - нескә күңелле, барыһын да күңеләнә яҡын алып барыусан, ә Әхмәт үтә киҫкен, ҡаршы әйткәндә һис тә яратмай, тиҙ генә ҡыҙып китеүсән. Шуға Гөльямал гел уның ыңғайына һыпырып йәшәне. Тәүҙән үк ғаилә йөгөнөң иң ауыр өлөшө Гөльямалға төштө. Әхлаҡи сиктәрҙән сыҡмағас, һәр ҡайһыһы үҙ урынында ирекле йәшәй бирҙе. Уларҙың һәр ҡайһыһы тәртип, тоғролоҡ төшөнсәләренә тап төшөрмәне. Әммә нисек кенә ауыр булмаһын, бар ауырлыҡтарҙы бер үҙе тиерлек йырып сығып килде Гөльямал.

Эшен, бигерәк тә балаларҙы ярата Гөльямал. Үҙе мәктәптә уҡыған сағында уҡ башланғыс синыф уҡытыусыһы булырға хыялланғайны. Педучилищеға имтихандар тапшырғанда йыр буйынса имтиханды үтә алмаҫмын, тип ҡурҡа-ҡурҡа барҙы. Йырларға бәләкәй сағынан яратты ҡыҙ. Имтихан алыусылар уға йырҙан "бишле" ҡуйып сығарҙы. Ҡалған имтихандарын тапшырғас, саҡырыу ҡағыҙы көт, тип ҡайтарҙылар. Ике ауыл араһындағы ырҙынға йәштәр менән эшкә сыҡты ҡыҙ. Аҙыраҡ аҡса ла эшләрмен, тип уйланы. Бер аҙ эшләгәс, саҡырыу ҡағыҙы тотоп әсәһе ырҙынға йүгереп килеп етте.

-Бына, ҡыҙым, уҡырға ингәнһең, китеүеңә аҙ генә ҡалған, - тине әсәһе һөйөнөп бөтә алмайынса.

Шунан китте күңелле уҡыу йылдары. Ауылын, бигерәк тә әсәһен һағынды Гөльямал. Йыр һуҙып ебәрһә, әхирәттәре онотолоп тыңлай ине. Йәшләй генә кейәүгә сыҡҡан әсәһенең тәүге ире тәүҙә әрмегә алына, һуғыш сығып киткәс, уларҙың часы иң беренселәрҙән булып һуғышҡа инә. Шунда ятып ҡала уның тәүге ире. Һуғыш бөтөп, егерме йыл үткәс кенә әсәһен ҡатыны ауырып үлгән Сәйфуллаға димләйҙәр. Шунан һуң Гөльямал тыуа...

...Ҡапыл уның уйҙарын бүлеп, ишек туҡылдаттылар. "Кем йөрөй һуң кискә ҡалып?" - тип ишекте асып ебәреүгә, ҡыуанысы йөҙөнә сығып Хәйерниса инәһе тора. Ул күңеләнә үтә яҡын алған Хәйерниса инәй. Бер аҙ ултырғас, өстәп ҡуйҙы. - Һинә нисә йәш әле ҡыҙым?

- Әй, инәй, 44 йәшем тулды. Бөттө, барыһы ла үтте инде... - Гөльямалдың был яуабына инәй шарҡылдап көлдө генә. - Инәй, һин көләһең, ә мин бер көндә генә ҡапыл ҡартайҙым да ҡуйҙым. Ҡырҡ йәшемә тиклем миңә "ҡыҙыҡай" тип кенә өндәштеләр, йүгереп кенә йөрөнөм...

- Әхмәт кейәү менән ни өсөн арағыҙ боҙолдо һуң? Әллә бисә-сәсә менән буталамы?

- Юҡ та, бигерәк ҡаты бәғерле ул Әхмәт, инәй...

- Башта, танышып йөрөгәнегеҙҙә улай уҡ булмағандыр бит?

- Башта уҡ Әхмәт менән беҙҙең мөнәсәбәт бик сәйер булды. Ятаҡта бергә йәшәгән ҡыҙҙарым уны үҙ итмәне. Минең арттан йөрөгән Фәритте яҡын күрәләр ине улар. Хатта һүҙгә иң һараны булған Лилиәбеҙ ҙә: "Мин һинең урыныңда булһам, Фәритендең баҙнат итеп тәҡдим яһағанын ун йыл булһа ла көтөр инем", - ти әсәһенә ауылдаш та, туған да. Бер нисә йыл элек, бабайы үлгәс, ҡыҙы менән кейәүе үҙҙәре менән ҡалала йәшәргә алып килгәйне уны. Ауыл кешеһенә, бигерәк тә оло кешегә ҡалаға өйрәнеүе ауыр, шуға күрә уны әүрәтер өсөн ҡыҙы Гөльямалдар эргәһенән баҡса һатып алғайны. Шуға ҡыуанып бөтә алмай Хәйерниса инәһе. Әллә ни эш ҡыйратмаһа ла, үҙенә ашарға бешереп, мунсаһын яғып инеп, йәй буйы рәхәтләнә. Тегеләре аҙнаһына бер килеп, аҙыҡ-түлек, кейем ҡалдырып торалар.

Кеше менән аралашыуға һыуһаған инәй Гөльямалдың бында икәнен белгәс, быны байрам һымаҡ ҡабул итте.

- Алмағасыңдың ботағын бәйләп торҙом әле, төнө буйы йоҡлатмаҫ әтеү, - тип һөйләнә-һөйләнә килеп инде ул.

Гөльямал сәй ҡуйып ебәрҙе. Һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәне.

-Нишләп бер үҙең ул, ҡыҙым? - тип һорап ҡуйҙы инәй бер талай һөйләшкәс.

-Кейәүең менән асыуланыштыҡ, инәй, яраша ла алмаҫбыҙ инде, - тип һалды Гөльямал.

-Ҡуй, ҡабаланма, уйлашайыҡ әле, - тине был яңылыҡты ине. Фәрит буйға оҙон түгел ине, үҙем менән типә-тиң. Әхмәтте Фәритте яратҡан кеүек яратмаһам да, нимәһе менәндер миңә оҡшай ине ул. Яныма килгән башҡа егеттәргә: "Ваҡытыңды бушҡа үткәрмә", - тип ҡыуып ебәрә торғайным. Бигерәк ғорур булдым шул. Шуның ауырлығын хәҙер үҙем татыйым...

- Барыбер Әхмәтте һайлағанһың бит, ҡыҙым...

- 8 март байрамына бер ҡосаҡ тюльпандар тотоп килде. Ул саҡ ҡалала ҡыш-яҙҙарын сәскә табыуы ҡыйын ине. Әхмәт бер көн: "Мине офицер итеп Петропавловск-Камчатскийға ебәрәләр, һине лә үҙем менән алырға теләйем", - тине. Уға ризалыҡ биреүемә әсәйем дә сәбәпсе булды шикелле. Атайым үлеп, бер йыл да үтмәгәйне әле ул ваҡыт. "Әсәй, мин кейәүгә сыҡһам, кейәү буласаҡ кеше бик алыҫтан, алыҫ яҡтарҙан ҡоҙалар көт", - тигәйнем, китте бит был сәбәпләнеп. Туйға әҙерләнергә кереште. Ә мин был һүҙҙәрҙе уға, нимә тип әйтер икән, тип кенә еткергәйнем. Ул шул саҡ ҡаршы торһа, Әхмәткә сыҡмаҫ инем бит. Ул туйға әҙерләнә башлағас инде, күңелен ҡыйырға баҙнат итмәнем. Бына шул сағында үҙемдә ихтыяр көсө таба алған булһаммы...

- Әсәйеңде иҫләйем, һуғыш бөткәндә үҙе йәш, үҙе иҫ киткмәле һылыу, ҡыйылып ҡына торған ҡара ҡашлы, ап-аҡ йөҙлө, бөҙрәләнеп торған ҡуйы ҡуңғырт сәсле ине. Ул саҡта тирә-яҡҡа таралған ҡыҙыҡ бер хәл булды. Бер көн кис төшөү менән арьяҡ урамда йәшәгән Дәүләтбай әсәйеңә килеп ингән дә, шундай хәбәр һалған: "Беҙ, ирҙәр, тол ҡалған ҡатындарҙы өй башынан һанап бүлештек. Һәр ҡайһыбыҙға етешәр тейҙе, һин, Хәмдиә, миңә эләктең", - тигән. Хәмдиә атылып сығып китеп, соланында торған һәнәкте тотоп ингән дә: "Хәҙер үк сығып тай, әтеү үтәнән-үтә сәнсәм", - тип тегене урамға тиклем баҫтырып сығарған. Ҡото алынған Дәүләтбай бүтәнсә әсәйеңә бәйләнмәгән...

-Ишеткәнем юҡ ине был турала, инәй, әсәйем ҡайһылай батыр булған икән дә...

-Күрҙеңме, әсәйең ниндәй көслө рухлы булған. Тәүге ире һуғышта үлеп, һинең атайыңды осратҡанға тиклем үҙен һаҡлай белгән. Һине донъяға тыуҙырыр өсөн егерме йыл буйына яусыларға ҡаршы торған. Ә әсәйеңде һоратып килеүселәр бик күп булды... Ә һин бында ирем менән асыуланыштым, тип бөләнөп ултыраһың...

-Мине тыуҙырыр өсөн... - Гөльямал ошо һүҙҙәрҙе ҡабатланы ла, күҙҙәренә йәш алды. Хәйерниса инәһенең әйткән һүҙҙәренең тәьҫире уны шул хәлгә еткергәйне. - Хәйерниса инәй, ә миңә нишләргә һуң улай булғас?

-Балаҡай, йәшең дә бара, һиңә Әхмәт кейәүгә иғтибарлыраҡ булырға кәрәк инде. Бәләкәй генә иғтибарҙы ла ирҙәр ҙурлап баһалай белә ул. Уларҙың сығынлауы ана шул иғтибарҙың булмауынан килә. Әйттең бит: хыянат итмәне, балаларыбыҙҙы ярата, тинең. Хәлең үтә ауыр түгел бит: кейәү әҙерәк түҙемле булһа, һин сабыр булып, үҙ көйөңә йәшәй бир. Күр ҙә тор: барыһы ла һәйбәт булыр.

Төнө буйы һөйләшеп сыҡтылар ҙа, таң алдынан ғына йоҡоға талдылар. Гөльямал Хәйерниса инәһе тороп ҡыштырҙап йөрөй башлағас уянды. Әҙ генә йоҡлаһалар ҙа, һәйбәт ял иткәндәр, арыуҙары онотолған. Баҡса йорто янына машина килеп туҡтағаны ишетелде. Бына балалары тыптыр-тыптыр йүгерешеп тупһаға килеп менде. Ишек асылып китте. Тышта ямғыр тымған. Шундай тыныс, көҙгө ҡояш өтөп алып бармаһа ла, тәнде йылытырлыҡ яҡтырта. Көн дә кисегенән яҡшыраҡ, әбейҙәр сыуағы башлана, ахыры.

Ҡапҡанан бер ҡосаҡ сәскәләр тотоп, Әхмәт килеп инде. Йылмайып ебәрҙе. Хәйерниса инәй әүлиә икән дә. Күҙҙәренә йәштәре төйөлгән Гөльямал уға ҡаршы атланы.

✓ *Уңыш ҡаҙаныу өсөн маҡсатҡа ынтылыусан, тәүәккәл булырға кәрәк. Ҡурҡырға ярамай, үҙ көсөңә тулыһынса ышанып, алға барыуыңды дауам итеү фарыз.*

ЙҮНСЕЛ ЙҮНЕН ТАБЫР

# ЙӨРӨГӘН АЯҠҠА ЙҮРМӘ ЭЛӘГӘ -

## бар итергә тырыш



**Кемдәрҙер бөгөн эшһеҙлеккә, аҡса юҡлыҡҡа һылтанып төшөнкөлөккә бирелгәндә, бәғзеләр ауырлыҡтан сығыу юлын эҙләй, ғаиләһен аҫрау, тормошон яҡшыртыу өсөн яңы саралар уйлап таба. Ана шундай ҡыйыу ҡарашлы эшһөйәрҙәрҙең береһе "Уфа-АвтоПрофи" ойошмаһы директоры Хәлим ӘЙҮПОВ. Унының менән нисек итеп үҙ эшен асып ебәреүе һәм уңыш серҙәре хаҡында һөйләшеү алып барҙыҡ:**

**"Күҙ - ҡурҡаҡ, ҡул - батыр", ти халыҡ мәҡәле. Һеҙ эшҡыуарлыҡ эшенә тотонорға нисек йөрьәт иттегеҙ, быға нимә сәбәпсе булды?**

- Мин оҙаҡ йылдар ДОСААФ системаһында эшләнем. Был өлкә миңә яҡшы таныш булғас, тупланған тәжрибәгә таянып, водителдәр әҙерләү буйынса үҙемдең шәхси мәктәбемде асырға ҡарар иттем. Балалар ҙа үҫеп еткәс, уларҙы үҙем менән ҡуша эшкә өйрәтеү ниәте лә бар ине. Хәҙер эргәмдә ҡыҙым эшләй, ике улым ярҙам итә.

Башта бер аҙ ҡурҡыу булһа ла, тәүәккәлләнем. Бер кемдең дә ярҙамына таянманым, яңғыҙым атҡарып сыҡтым. Аллаға шөкөр, эшем барып сыҡты. Тәүге мәктәпте асып, бер йыл үтеүгә, икенсеһен асып ебәрҙем. Автомәктәп асыу ныҡ ауыр эш ул. Бөгөн водителдәр әҙерләү курстары етерлек булғас, конкурентлыҡ көслө, уҡырға килеүсенең дә талаптары юғары. Һәр мәктәп үҙ өҫтөнлөгө менән алдырырға тырыша. Мин коллективҡа ҙур тәжрибә туплаған уҡытыусыларҙы, инструкторҙарҙы йыйғанмын. Уҡыу сифатына төп баҫым яһайым, имтихандарын тәү тапҡырҙан тапшырырлыҡ итеп әҙерләүҙәрен талап итәм. Беҙҙә "А", "В" категорияһына һәм водителдәрҙе йөрөргә өйрәтеү буйынса производство оҫтаһы (инструкторҙар әҙерләү) курстары бар. Һуңғыһына беҙҙең ҡалала өс-дүрт мәктәптә генә уҡыталар. Тағы ла йыл һайын эшләп йөрөгән профессиональ водителдәр өсөн мотлаҡ һаналған 20 сәғәтлек техминимум үткәрелә. Автомобилдәр паркын яңыртырға тырышам. Водитель курсына уҡырға килгән кеше быға ла иғтибар итә. Беҙҙең паркта туғыҙ машина - "ВАЗ - 21099", "ВАЗ - 2114", ВАЗ - 2115", "Калина", "Hyundai Accent" маркалы автомобилдәр бар. Яңыраҡ "Nissan Almera Classic" машинаһын алдыҡ.

Иҡтисади көрсөк еле һәр өлкәгә ҡағылып үтте. Яңылыҡтарҙан хәбәр итеүҙәренсә, элек республикала көн дә 1100 кеше машина теркәһә, бөгөн был һан 350-гә төшкән. Шулай булғас, уҡырға килеүселәр ҙә кәмей. Унан һуң, күп ерҙәрҙә эш урындары ҡыҫҡартылғас, кеше артыҡ аҡсаһын сығарып бармай. Клиенттарҙы юғалтмаҫ өсөн күберәк реклама эшләргә тура килә, был үҙ сығымдарын талап итә.

**"Уңышһыҙлыҡ - ул уңышҡа табан туп-тура юл. Еңелеүҙәр беҙҙе еңеүгә өйрәтә", тип яҙған бер инглиз авторы. Һеҙ уңышһыҙлыҡты нисек кисерәһегеҙ?**

- Эйе, ысынлап та, барыһы ла һәр ваҡыт шыма ғына бармай, ҡытыршылыҡтарға ла осрап ҡуяһың. Бындай саҡта бик төшөнкөлөккә бирелмәй, ныҡлыҡ, сыҙамлыҡ күрһәтергә тырышам. Сөнки килеп тыуған проблема алдында ҡаушап ҡалып, ҡул төшөрҙөңмө - бөттөң, тигән һүҙ.

Мин Архангел районы Оҙондар ауылында биш ҡыҙ араһында бер малай үҫтем. Атайым мине "Арыш араһында бер бойҙай", тип бер аҙ иркәләтә лә ине. Шулай ҙа атай-әсәй наҙын артыҡ оҙаҡ тойоп үҫергә тура килмәне. Әсәйемдән бик иртә ҡалып, 9-сы класты тамамлағандан һуң, Өфөгә уҡырға сығып киттем. Әрменән ҡайтыуыма атайым да мәрхүм булғайны. Шулай ҙа тормош ауырлыҡтарына бирешмәнем, ярҙам итер кешем булмағас, барыһын да яңғыҙым йырып сыҡтым. Ә уйлап ҡараһаң, яңылыш юлдан китер өсөн аҙым һайын шайтан ҡотҡоһо етерлек, бирешмәнем, үҙ көсөм менән аҡса табырға тырыштым, ғаилә ҡорҙом, фатир алдым. Бәләкәйҙән атайым беҙгә яйы сыҡҡан һайын: "Балалар, мин үҙ ғүмеремдә судҡа шаһит булып та барғаным булманы. Дөрөҫ йәшәргә тырышығыҙ, закон боҙмағыҙ. Хәләл көсөгөҙ менән эшләп ашағыҙ", - тип әйтер ине.

Ысынлап та, һәр эштең үҙ ҡануны бар. Эшең яйлы барһын тиһәң, хөкүмәтте алдарға, хәйләләшергә ярамай. Һалымды, аренда өсөн хаҡты, хеҙмәткәрҙәреңә эш хаҡын ваҡытында түләп барһаң, намыҫың таҙа, күңелең тыныс була. Мин хеҙмәткәрҙәремә бөгөнгө көрсөк шарттарына ҡарамаҫтан, бер көн дә һуңлатмайынса үҙ ваҡытында эш хаҡы түләйем. Уңыш ҡаҙаныу өсөн маҡсатҡа ынтылыусан, тәүәккәл булырға кәрәк. Ҡурҡырға ярамай, үҙ көсөңә тулыһынса ышанып, алға барыуыңды дауам итеү фарыз. Мин һәр ваҡыт аҙналыҡ план төҙөйөм, аҙна аҙағына өлгәшелгән маҡсаттарҙы, башҡарылған эштәрҙе барлап сығам, уларға баһа бирәм. Көндөҙ күбеһенсә ҡала буйынса эштәр менән йөрөһәм, киске дәрестәр ваҡытында туғыҙға тиклем мәктәптә ултырам. Курсанттарҙың хәлен һорашам, шәхси һорауҙары буйынса ҡабул итәм.

**Бөгөн, эш юҡ, аҡса етмәй, тип юҡсылыҡҡа зарланып ултырған кешеләргә ҡарата ниндәй кәңәш бирер инегеҙ?**

- Кемгәлер зарланып ултырып та, "алма беш, ауыҙыма төш" тип ултырып та, эшләмәйенсә, тир түкмәйенсә, бер кем дә һиңә бер нәмә лә килтереп бирмәйәсәк. "Йөрөгән аяҡҡа йүрмә эләгә" тигәндәй, тырышырға, аҡса эшләү юлдарын эҙләргә кәрәк. Кешеләр юҡтан ғына ла бар сығара. Беҙҙең ауылда, мәҫәлән, берәү машина һатып алды ла, урмандан ҡоро ағастар йыйып, шуны ҡалаға утын итеп алып килеп һата ине. Хәҙер пилорама асып ебәрҙе. Бөгөн ауылда ҡыяр үҫтереп һатҡан, мал үрсеткән кешеләр тураһында ла йыш ишетәбеҙ. Йәшәйем, тигән кеше әмәлен таба ул.

Беҙ ҡатыным менән ҡалаға килеп, үҙ көсөбөҙгә йәшәп алып киттек. Унының ҡарауы, биш бала үҫтерергә йөрьәт иттек. Беҙгә "хәйерселек арттыраһығыҙ", тип әйтеүселәр ҙә булды. Аллаға шөкөр, балаларыбыҙҙы кәм-хур итмәйенсә, кеше итеп үҫтерергә тырыштыҡ. Аллаһы Тәғәлә бала биргәс, ризығын да бирә бит ул. Минең тормошта үҙ юлымды табыуым, күркәм ғаилә ҡороуым, балаларым, уңыштарым барыһы ла Аллаһы Тәғәләнең рәхмәтелер. Беҙ бары тик сәбәпсе генә бит, барыһын да беҙгә Аллаһ бирә. Мин һәр эшемде бөйөк Илаһыбыҙға ниәтләп башлайым, унының ярҙамына өмөтләнәм. Эсем бошоп, төшөнкөлөккә бирелә башлаһам, мәсеткә барып, доға ҡылам, күңел тынысланып ҡала. Улдарымды һәр ваҡыт үҙем менән мәсеткә алып барам. Йома намаҙҙарына йөрөргә тырышам. Иманыңды нығытып, харамдан һаҡланып, барына ҡәнәғәт булып, Аллаһ биргәнгә шөкөр ҡылып йәшәй белергә кәрәк.

**"Ата-әсәнең үҙ балаһына биргән иң хәйерле бүләге - күркәм холоҡ", тигән Бәйғәмбәребеҙ. Һеҙ балаларығыҙға ниндәй тәрбиә бирҙегеҙ?**

- Ҡатыным йомшағыраҡ булырға тырышһа, мин үҙемсә атай тәрбиәһе бирергә тырыштым. Уларҙы һәр ваҡыт итәғәтле, намыҫлы, ғилемле булырға өйрәттем. Ғаиләлә балалар күп булһа, улар үҙҙәрен үҙҙәре тәрбиәләй бит ул. Береһенә ҡарап береһе тәртипкә өйрәнә, уҡырға ынтыла, артта ҡалырға теләмәй. Ҡалала бала тәрбиәләүе еңел түгел, уларға насар юлға баҫыр, алама ғәҙәттәргә өйрәнер өсөн мөйөш һайын сәбәп етерлек. Аллаға шөкөр, балалар йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәне, тик яҡшы яҡтан ғына беҙҙе ҡыуандырып торалар, атай-әсәйгә ҡарата ихтирамлылар. Оло улым Илнур Өфө ҡалаһының Октябрь районында эске эштәр идаралығы ҡарамағындағы ведомствонан тыш һаҡ бүлегендә дежур часть начальнигы булып эшләй. Әлеге көндә Мәскәүҙә Иҡтисади хәүефһеҙлек академияһында ситтән тороп өсөнсө курста уҡып йөрөй. Икенсе улым Руслан автотранспорт техникумын, Омск транспорт академияһын бөттө, миңә эште алып барырға ярҙам итә. Ҡыҙым Ләйсән Башҡорт дәүләт педагогия университетын тамамланы ла, әле минең менән эшләп йөрөй. Өсөнсө улым Илгиз әле генә Ырымбур аҙыҡ-түлек университетын тамамлап, дипломын яҡланы. Хәҙер "Макдоналдс"та эшләп йөрөй. Бәләкәй ҡыҙым Айгөл туғыҙынсы класты тамамланы. Улдарымдың береһе лә эсмәй, тәмәке тартмай. Гөлназ һәм Азамат исемле ейәндәрем үҫеп килә. Улар үҙҙәре бер шатлыҡ. Баландың балаһы балдан татлы, тиҙәр бит. Шулар менән мәж киләбеҙ.

**Шулай итеп...**

**"Ни тиклем үҙеңә талапсан булһаң һәм ғәҙел эш итһәң, шул тиклем тормошоң яҡшыраҡ була барыр", тип яҙылғайны уңыш сере тураһындағы бер китапта. Әле беҙ Хәлим Ғайса улы менән әңгәмәләшкәндән һуң, был һүҙҙәрҙең хаҡлығына инандыҡ. Ысынлап та, еңел аҡса эшләү юлын эҙләү, хәйлә, мәкергә барыу бер ваҡытта ла яҡшыға килтермәй. Хәләл көс менән эшләп тапҡанда ғына аштың ҡәҙере була, бәрәкәте арта, күңелең тыныс, донъяң бөтөн була.**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

ӘСТӘҒӘФИРУЛЛА!

# ТИҘ БАЙЫРҒА ТЕЛӘЙЕМ,

## йәки отошло уйындарҙың зарары хаҡында

**Хәҙерге заманда ваҡыт уҙғарыу, күңел асыу, ял итеү маҡсатында отошло уйындар менән мауығыу киң таралыу алды. Отошло уйындарҙы көс түкмәй генә тиҙ арала байығып китеү сығанағы итеп пропагандалау күп кенә илдәрҙең киң мәғлүмәт саралары тарафынан яҡланыла. Осраҡлы һәм яҡын арала уңышҡа ирешеү идеяһы менән янған кешеләр ирекле рәүештә үҙҙәренең тормошон боҙа һәм яҡындарын михнәткә тарыта. Отошло уйындар тураһында кешеләр нимә белә, ысынлап та, бәхет шул "тимер ҡумта"лар эсендә, тип уйлайҙармы? Был турала бер нисә кешенән һорау алдыҡ.**

**Фирүзә АЛТЫНБАЕВА, студент:** Аҡса яғынан ауыр булып киткәс, аптыраған-дың көнөнән уйын клубына һатыусы булып эшкә урынлаштым. Шуға ла был уйындар тураһында бөтәһен дә беләм. Кешеләр шул тиклем күп йөрөй. Әлбиттә, кеҫә яғы һай булғандар унда инергә лә ҡурҡа, тик байҙар ғына йөрөй. Киләләр, уйнайҙар, оталар, отолалар. Отҡан саҡтары бик һирәк була. Отолғандар, ғәҙәттә, клуб эсенән туҙынып сығып китә. Әммә икенсегә тағы килә. Кешеләргә бындай уйындар менән бөтөнләй мауыҡмаҫҡа кәңәш итер инем. Иң яҡшыһы, үҙеңдең күңелеңә ятҡан эш табып, булғаны менән риза булып йәшәргә.

**Гөлсөм БАТЫРШИНА, уҡытыусы:** Отошло уйындар уйнарға ғәҙәтләнеү матди һәм әхлаҡ күҙлегенән дә зыянлы. Унының иң ҡурҡынысы шунда: отошло уйындарға әүәҫләнгән кеше ауырыуға әйләнә. Уға патологик бәйләнгәнлектән, кешене тик махсус дауалау менән генә был "сиренән" арындырырға мөмкин. Уйынсылар - оптимистар, еңелеү уларҙы туҡтата алмай, улар, киреһенсә, мотлаҡ еңеүгә ышанып, ҡат-ҡат уйнауҙарын дауам итә. Ә инде уңышҡа өлгәшкәс, тағы ла ҙурыраҡ файҙа алыу маҡсатынан уйнайҙар. Уйынсы һәр ваҡыт еңел генә байығыу мөмкинлегенә ышана. Ул нисек кенә һаҡ ҡыланырға тырышмаһын, уйын барышында бөтә булған малын, хатта ғаиләһенә кәрәкле аҡсаны ла хәүеф аҫтына ҡуя. Уйынсылар башта аҡсаны бурысҡа ала, яйлап мөлкәтен һата, ә инде һуңынан алдашыу, урлашыу юлы менән аҡса табыуға күсә. Бындай патологик ауырыуҙарға күберәк эскеселәр, наркотиктар менән шөғөлләнеүселәр дусар була. Был төрҙәргә әүәҫлек енәйәтселеккә ылығыуҙы барлыҡҡа килтерә. Уйынсының ғаиләһенә килтергән зыяны бик ҙур. Ауырыуҙар теҙмәһе китә һәм ул шәхес булараҡ тарҡала. Шуға ла бындай кешене махсус дауалау талап ителә.

**Зөһрә БИЛАЛОВА, студент:** Кемдең аҡылы юҡ, кем еңел юл менән аҡса табырға уйлай, кем ялҡау - шулар баҫа инде был юлға. Әлбиттә, отошло уйындар урынлашҡан биналар кешенең иғтибарын йәлеп итеп, тыштан уҡ ялтырап саҡырып ултыра. Йәштәргә һәр нәмәне уйлап эш итегеҙ, кәрәк булһа, эргәгеҙҙәге ышаныслы дуҫтарҙан кәңәш һорағыҙ, тип әйтер инем. Нимә файҙа килтерә, нимә зарар, нимә яҡшы, нимә юҡ - быны һәр кем аңлай. Шулай уҡ сәғәттәр буйы кәрт һуғып ултырыуҙың да бер файҙаһы юҡ. Ваҡытты нисек тә бәрәкәтле үткәрергә тырышырға кәрәк. Юғиһә, ваҡыт шул тиклем тиҙ үтә. Бер йылыбыҙ бер ай, бер айыбыҙ бер көн кеүек. Ғүмерҙең ҡәҙерен белеп йәшәргә өйрәнәйек.

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА**
**яҙып алды.**

*ИНТЕРНЕТТАН*

**Яҡтылыҡ ярҙамында беҙ күреү ағзалары аша үҙебеҙҙе уратып алған донъяны танып беләбеҙ. Тәүҙә яҡтылыҡҡа нервылар системаһы тәьҫир итә, һуңынан уға күреү анализаторҙары, периферик нервылар системаһы ҡушыла. Яҡтылыҡ нурланышы аша эндокрин һәм иммунитет системаһы яйға һалына, матдәләр алышыныуы яҡшыра, организм кире тәьҫир итеүсе экологик факторҙарға бирешеп бармай.**

# КӘЙЕФЕҢ БУЛМАҺА...

## ҡояшҡа күрен

● Тәбиғи яҡтылыҡ етешмәүе, аҙ хәрәкәтләнеү, дөрөҫ туҡланмау кеүек үк, һаулыҡҡа ҙур зыян килтерә. Ҡояш нурҙары аҫтында йышыраҡ йөрөһәң, матдәләр алышыныуы, аш һеңдереү яҡшыра, организмда һөйәк системаһы, остеопороз, кариес, йөрәк һәм йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен булдырмаусы D витамины барлыҡҡа килә.

Ҡояш энергияһы тәьҫире һөҙөмтәһендә күҙҙәр селтәрендә төрлө әйберҙәр сағылышы импульстарҙың химик энергияһына әүерелә, ә улар, үҙ сиратында, баш мейеһендә гипоталамусты әүҙемләштерә. Бынан тыш, яҡтылыҡ тәьҫирендә гипоталамус төрлө эндокрин биҙҙәренә импульстар ебәрә һәм организмда мөһим биологик әүҙем матдәләр: гистамин, серотонин һ.б. барлыҡҡа килә.

Организмға ҡояш яҡтылығы етешмәүе хәлһеҙлеккә, артыҡ ауырлыҡҡа, күңел төшөнкөлөгөнә, йоҡо насарайыуына, депрессияға килтереүе ихтимал. Яһалма яҡтылыҡты мейе хроник ҡарағыһлыҡ итеп ҡабул итә һәм организм поляр төн ваҡытындағы кеүек шарттарҙа эшләүгә яраҡлаша. Шулай итеп, яҡтылыҡ дефициты синдромы барлыҡҡа килә. Һәр ваҡыт күләгәлә булһаң, бина эсендә тәҙрәләрҙе ҡаплап ҡуйһаң, был синдром көньяҡ киңлектәрендә лә барлыҡҡа килеүе ихтимал.

● Кешегә күпме ҡояш нуры кәрәк? Инглиз ғалимдары D витамины етешмәүе тиҙ ҡартайыуға килтерә, тип иҫбатлай. Улар фекеренсә, D витамины дефициты һәр өсөнсө кешелә бар. Был витаминды "ҡояш витамины" тип йөрөтәләр, сөнки организм уның 90 процентын ҡояш тәьҫиренән ала. Шуға ла ҡояш аҫтында йышыраҡ булырға һәм D витаминына бай аҙыҡ-түлек ашарға (балыҡ, йомортҡа, һөт аҙыҡтары) тырышырға кәрәк.

Әгәр ҙә асыҡ һауала булғандан һуң тирегеҙ һиҙелерлек алһыуланһа, тимәк, организм 20000 ЕД D витаминына байыған. Тик нисек зыян килтермәҫлек итеп дөрөҫ ҡыҙынырға һуң? Тәүҙә ҡояшта 10 минут самаһы ғына ҡыҙынығыҙ һәм көн һайын был ваҡытты 1-2 минутҡа арттыра барығыҙ. Тап ошолай итеп ҡыҙынғанда ғына һаулыҡты нығытырға була. Ҡояш нурҙары аҫтында оҙаҡ булыу тире яман шешенә килтереүе бар. Ҡайһы бер үләндәр һәм дарыуҙар тиреңә ҡояшҡа тәьҫирлеген көсәйтеүен онотorға ярамай. Был исемлеккә һары мәтрүшкә, йөрәк ауырыуҙарынан дарыуҙар (кордарон), бөйөр өҫтө биҙе гормондары инә.

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*

# ЕМЕШ-ЕЛӘК ҠАП...

## дарыу урынына

**Емеш-еләктә организм өсөн кәрәк булған төрлө витаминдар, еңел үҙләштерелә торған углеводтар, минераль матдәләр, органик кислоталар, бактерияларҙың үрсеүен туҡтатыусы актив матдәләр етерлек. Шуға ла әлеге миҙгелдә организмығыҙҙы витаминдар менән байытып, ҡайһы бер сирҙәрҙән арынып алыу ҡамасауламаҫ.**



### Һары сейә

Һары сейә (черешня), тип аталһа ла, был емештәр һары ла, ҡыҙыл да, алһыу ҙа, ҡуйы ҡыҙыл төҫтә лә була. Һары сейәлә органик кислоталар аҙ, шәкәр 11,5 процент тирәһе. Был емештәге туҡлыҡлы матдәләр балалар өсөн бигерәк файҙалы. Һары сейәлә A, C, P, B төркөмө витаминдары, никотин кислотаһы, фосфор, кальций һәм тимер бар, ябай сейәгә ҡарағанда углеводтар ҙа күберәк.

Һары сейә бөйөр һәм бауыр эшмәкәрлеген, ҡан әйләнешен яҡшырта; юғары ҡан баҫымы менән яфаланыусылар өсөн көнөнә 250-300 грамм ҡуйы ҡыҙыл төҫтәге емеш дауа буласаҡ; артрит, ревматизм, подагра менән сирләгәндә ауыртыуҙы баҫыу өсөн көнөнә 15 емеш ашарға, өс тапҡыр бер ҡалаҡ емеш һутын эсергә кәңәш итәләр. Емеш һабағынан төнәтмә әҙерләргә лә була: 1 литр һыуҙы ҡайнатып, уға бер ҡалаҡ емеш һабағы өҫтәгәс, һүрән утта 7 минут ҡайнатырға. Уттан алғандан һуң һауытҡа ҡапҡас ябып, тағы 20 минут тоторға. Көнөнә ярты литр тирәһе эсергә.

### Слива

Слива төрлө кислоталарға, глюкозаға, шәкәргә бай. Уның составында капиллярҙарҙы нығытыусы, склерозды булдырмаусы фенол берләшмәләре - флавоноидар, антоциандар һәм лейкоантоциандар күп. Сливала, сортына ҡарап, 0,1 - 2,7 мг-ға тиклем каротин (А витамины), В төркөмө витаминдары, никотин һәм фолий кислоталары була. Һары сейәгә, сейәгә, грушаға, мандаринға ҡарағанда Е витамины ла күберәк. Минераль матдәләрҙән калий, тимер, йод, баҡыр, цинк берләшмәләре осрай. Слива бөйөр сирҙәре, юғары ҡан баҫымы менән яфаланыусылар өсөн файҙалы. Уның составындағы калий организмдан артыҡ һыуҙы һәм тоҙҙарҙы сығара. Слива халыҡ медицинаһында ревматизмдан, матдәләр әйләнешен яҡшыртыу өсөн ҡулланыла. Был емеште бәләкәй балаларға күп ашатырға ярамай, сөнки слива уларҙың ашҡаҙан эшмәкәрлеген боҙоуы бар. Бала имеҙеүсе әсәләргә слива ашау тыйыла.

### Ҡайын еләге

Ҡайын еләге кеше организмы өсөн файҙалы булған матдәләргә: С витаминына, төрлө кислоталарға, эфир майҙарына, микроэлементтарға бай. Япраҡтарында С витамины күп. Халыҡ медицинаһында ҡайын еләген төрлө ауырыуҙарҙы дауалау өсөн ҡулланалар. XX быуат башында йәшәүсе табип Пастор Кнейп, күп итеп ҡайын еләге ашаған кеше бер ҡасан да ауырымай, тип яҙып ҡалдыра. Боронғо Тибет медицинаһы трактаттарында ҡайын еләген үсемлектәр донъяһының батшабикәһе тип атап йөрөтәләр, сөнки ул башҡа емеш-еләктәрҙән үҙенең бай химик составы менән айырылып тора.

Аҙ ҡанлылыҡ менән яфаланыусыларға 2 ҡалаҡ еләккә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, төнәтергә һәм көнөнә 3 тапҡыр ярты стакан эсергә ҡушалар. Ҡайын еләге япраҡтарынан яһалған төнәтмә ҡан баҫымын төшөрә, йөрәк тибеше ритмын әкренәйтә, ҡан тамырҙарын киңәйтә. Төнәтмә яһау өсөн 50 грамм үләнгә ярты литр ҡайнар һыу өҫтәп, 4 сәғәт төнәтергә. Ашар алдынан 150 грамм төнәтмәне көнөнә өс тапҡыр эсергә.

Ҡайын еләге миҙгеле уртаса 2-3 аҙна дауам итә. Әгәр ҙә көн һайын ас ҡарынға бер ус ҡайын еләге ашаһағыҙ, бауырдарға тоҙ ултырмай, ашҡаҙан һәм эсәк ауырыуҙары булмаясаҡ, бөйөр эшмәкәрлеге яҡшыра, ҡан баҫымы төшә. Халыҡ медицинаһы ҡайын еләге менән экземаны ла дауалай. Бының өсөн етен материалға бешкән еләкте урап, экзема урындарына һалырға. 3-4 көндән һыуланып торған урындар кибеп, таҙара башлаясаҡ.

### Йөҙөм

Йөҙөм емештәрендә 55-87 процент һыу, 16-26 процентҡа тиклем шәкәр бар. Бынан тыш, был емеш С, В1, В6, В12, РР, Р, А, К витаминдарына, фолий кислотаһына бай.

Йөҙөм һуты рахит, ашҡаҙан-эсәк сирҙәре, үпкә туберкулезы, цинга, йөрәк ауырыуҙарын булдырмаҫҡа ярҙам итә, аҙ ҡанлылыҡ ваҡытында йөҙөм ашау яҡшы һөҙөмтә бирә. Хәл бөткәндә, тиҙ арыусанлыҡ күҙәтелгәндә, тиҙ ярһып, тиҙ илап барғанда, йоҡо насарланғанда ла йөҙөм ашарға кәрәк. Температура күтәрелгәндә йөҙөм емештәрен тир ҡыуыу сараһы итеп ҡулланырға ярай. Организмдың май һәм минераль әйләнеше боҙолғанда ла йөҙөм ярҙамға килә.

### Абрикос

Был емештә С һәм А витамины, калий, кальций, магний, фосфор, көкөрт күп. Абрикос һутында кремний һәм тимер күп, шуға ла балаларға һәм ауырлы ҡатындарға эсергә тәҡдим ителәр. 150 грамм һут организмды каротиндың бер тәүлек нормаһы менән тәьмин итә, етмәһә, һут емештәргә ҡарағанда еңелерәк эшкәртелә. Күрәгә һәм өрөк ауырлы ҡатындар, балалар, оло йәштәге кешеләр өсөн файҙалы. Абрикостың составындағы магний юғары ҡан баҫымын төшөрә, шуға ла был сир менән яфаланыусылар йәй көнө был емеште күберәк ашай ала. Диабет ваҡытында, үт ҡыуығы тейешле кимәлдә функцияһын башҡармағанда абрикос ашарға ярамай.

### Персик

Өлгөрөп еткән емештә 83 процентҡа яҡын һыу, 15 процент тирәһе шәкәр, эфир майҙары, калий бар. Фосфор, тимер, С, В төркөмө витаминдары күп. Айырыуса Ҡырым персиктары файҙалы матдәләргә бай һанала. Диетик аҙыҡ булараҡ, балалар өсөн дә файҙалы, майлы һәм ауыр аҙыҡты эшкәртергә лә ярҙам итә. Ашҡаҙандың әселеге түбән булғанда персик һутын ашар алдынан 15-20 минут алда эсергә тәҡдим итеlә. Ул организмды һыуыҡ тейеүҙән дә һаҡлай, иммунитетты күтәрә. Шәкәр диабетынан һәм артыҡ ауырлыҡтан яфаланыусыларға был емеште күп ашарға ярамай, сөнки уның составында шәкәр күп.

### Нектарин

Нектарин - персиктың бер сорты. Күптәр уны персик һәм сливаны ҡушыу юлы менән килеп сыҡҡан тип уйлай, әммә был дөрөҫ түгел. Нектарин - ябай персиктың ирекле генетик мутацияһы һөҙөмтәһендә, йәғни персик ағастары үҙҙәрен үҙҙәре һеркәләндерә башлағас, ҡайһы бер саҡта бөрөләр дөрөҫ үҫешмәү сәбәпле барлыҡҡа килә.

*ҺҮҘ АРАҺЫНДА*

# ҠАЙҺЫ УРЫНДА...

## микробтар аҙыраҡ

Статистика буйынса, бер йыл эсендә һәр бишенсе кеше йоғошло сирҙәр менән ауырый. Өйҙә ҡайһы урындар хәүефле һанала һәм ауырыу тыуҙырыусы бактерияларҙан нисек һаҡланырға? Вирустар, бактериялар һәм башҡа төрлө микроорганизмдар кешенең даими юлдашы булып тора. Улар үҙҙәре һәм уларҙың көнкүреш ҡалдыҡтары кешене ауырыуға һабыштырыусы төп сәбәп булып тора. Яҡшы шарттарҙа - йылыла, еүеш һәм туҡланырлыҡ мөхиттә улар тиҙ үрсей һәм кешегә бик күп күңелһеҙлектәр тыуҙыра. Бөтә микроорганизмдар ҙа уңайһыҙ шарттарҙа ла, мәҫәлән, ҡоро һыуыҡ урындарҙа ла ярайһы оҙаҡ ҡына йәшәй ала. Тап шуға ла "урамдан ингәс, ҡулды йыуырға кәрәк" һәм "емеш-еләкте яҡшылап йыуырға кәрәк" тигәнерәк ябай ҡағиҙәләрҙән тыш, ентекле һәм матур итеп өйҙә йыуып сығарыуҙы күҙәтеү ҙә мөһим.

Инфекционистарҙың тикшереү һөҙөмтәләре өйҙәге башҡа урындарға ҡарағанда, бәҙрәфтә хәүеф тыуҙырыусы бактериялар аҙыраҡ булыуын раҫлаған. Ғаилә ағзаларының береһе йоғошло ашҡаҙан сире менән ауырығанда ғына был урында ҡурҡыныс янауы мөмкин. Шуға күрә лә, бәҙрәфкә барғандан һуң, хатта өйҙә булғанда ла ҡулдарығыҙҙы мотлаҡ йыуығыҙ. Балаларығыҙҙы ла быға өйрәтегеҙ, ғәҙәттә, улар йыш ҡына унитаз тирәҫтәренә тотоноусан була. Бигерәк тә һыу ағыҙа торған кнопка һәм рычагтарҙы яҡшылап йыуығыҙ.

Әгәр душ менән оҙаҡ ҡулланмаһаң, уның насадкаһында ҡурҡыныс микробтар йыйыла. Был осраҡта биш минут тирәһе һыу ағыҙып ҡуйығыҙ, шунан һуң ғына йыуына башлағыҙ.

*АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА*

# ТАМУҠҠА ТӘҮГЕ АҘЫМ...

## бик бәләкәй ҡылыҡтан башлана

**Беҙ ауылда йәшәйбеҙ. Көнө-төнө мал ҡарап, эш, тип йөрөп, балалар тураһында уйлап та булмай һымаҡ. Ә шулай ҙа балаларыбыҙ, шөкөр, бәләкәйҙән ҡул араһына инеп, эшкә өйрәнеп, үҙ аллы булып үҫәләр, һәр аҙымы күҙ алдында булғас, насарлыҡ менән шөғөлләнергә әллә ни форсат та бирелмәй уларға. Ә бына ҡалала тыуып үҫкән бала урамға сығып киттеме, уны һәр аҙымында хәүеф һағалайҙыр һымаҡ тойола миңә. Шулай тип уйларға бер ваҡиға сәбәпсе булды.**



Бер саҡ миңә эшемдән ҡалаға ике көнгә семинарға барырға ҡуштылар. Өс бәләкәй баламды ҡалдырып, киске автобус менән юлға сыҡтым. Ҡәйенбикәләргә барып йоҡлармын, тип, әҙ-мәҙ күстәнәс, шулай уҡ бер айлыҡ эш хаҡымды үҙем менән алдым. Ҡалаға барып еткәс, вокзалдан арыу уҡ ер йәйәүләп барырға кәрәк. Быны шунда инде күнелгә әҙерәк шом төштө. Урамда унда-бында ғына лампалар яна. Көн һыуыҡ, тротуар тайғаҡ. Ян-яҡҡа ҡарарға ҡурҡып барыла. Инде туғандарға барып етергә лә күп ҡалманы. Ҡапыл, күк ҡабағы асылдымы ни, башыма ауыр йоҙроҡ килеп төштө, минең күҙҙән уттар сәсрәне. Бер ни ҙә аңламай ҡалдым, дөп-дөп итеп башыма, арҡаға һуҡтылар ҙа, ҡулымдағы пакетты тартып алдылар. Иҫтән яҙып, ҡолап барғанда йүгереп китеп барған бер-нисә үҫмерҙең арҡаһын, аяҡтарын ғына күреп ҡалдым. Күп ятмағанмындыр, иҫемә килгәндә өшөп тә өлгөрмәгәйнем. Аяҡҡа баҫып, өҫ-башымды ҡаҡҡылап ҡына тора инем, ҡапыл ҡәйенбикәнең улы Наил эргәмә килде лә өндәшмәй генә ҡулыма пакетымды тоттороп китте. Мин бер ни ҙә уйлап та, әйтеп тә өлгөрмәнем, ул юҡ булғайны инде.

Баш, арҡа ауырта, аяҡ сатанлай. Йүгермәләп ҡәйенбикәләр йәшәгән подъезға барып ингәс кенә тын алдым. Ҡотолдом буғай, тип өҫ-башымды рәтләнем, пакетыма күҙ һалдым. Бар нәмәләрем дә, хатта аҡсам да теүәл ине.

Кискеһен урамда ҙур-ҙур төркөмдәр булып үҫмерҙәр кеше талап, туҡмап йөрөйҙәр, тип ишеткәнем бар ине. Бер ниндәй тауышһыҙ ғына килеп сыҡтылар бит әле. Шул тиклем ҡотом осҡан, ҡулдар ҡалтырай, тыныслана алмайым да ҡуям. Йәйлап, дүртенсе ҡатҡа күтәрелдем. Зөлифә апайҙар (ҡәйенбикәм) өйҙә ине. Ғәйнислам ҡәйенеҙһн ишекте асты. "О, килен килә ята бит, әйҙә үт!" - тип ҡаршы алды. Аш бүлмәһенән апай, ҡыҙҙары Лениза сығып ҡосаҡлап алдылар. Йылы, яҡты фатир мине үҙ ҡосағына алды. Мин бер аҙға үҙем менән булған күңелһеҙ ваҡиғаны бөтөнләй оноттом. Апай йүгереп йөрөп өҫтәл әҙерләне. Өҫтәлдә ни генә юҡ. Хужабикәнең өҫтә ҡулдары бешергән әллә нисә төрлө бәлеше, йылы ашы, тоҙланған, ҡайнатылған баҡса ниғмәттәре! Ҙур ҡунаҡ кеүек күреп ихлас һыйлайҙар. Еҙнәй: "Бисәкәй, теге үҙең әтмәләгән шарапты ла сығар әле," - тигәс, өҫтәлгә алһыу төҫтәге шарап та сығып ултырҙы. Гәлсәр һауытҡа ғына ҡойоп бирҙеләр. Әҙ-әҙләп кенә уртлап, күңелле итеп һөйләшеп ултырҙыҡ. Дәртләнеп донъя көтәләр, ҙур пландар менән йәшәйҙәр икән. Яңы йылһаҙдар алып ебәргәндәр, төҫлө телевизорҙарын да ҙур экранлыһына яңыртҡандар. Ҡала ситенән ер алып, йорт һалырға ниәттәре. Мал, ҡош-ҡорт үрсетеп, үҙ ихаталарын булдырырға хыял итәләр.

- Был яңы өс бүлмәле фатир, бер баҡса, бер машина улыбыҙ Наилға. Ҡыҙыбыҙға ла бер баҡса, фатир йүнәтәсәкбеҙ, - тип пландары менән уртаҡлаштылар. Һис шикһеҙ, хыялдары тормошҡа ашыр, сөнки икеһе лә хеҙмәт алдынғыһы, эсмәйҙәр, балалары өсөн йән атып торалар. Аш бүлмәһенә Лениза инеп-сығып йөрөй. Һөйкөмлө генә үҫе, бер ҙә ҡала аҡһөйәгенә оҡшамаған. Әсәһенә ярҙам итергә тырышып тора. Шул саҡ Наил да ҡайтып инде.

- Һаумыһығыҙ! - тине ул уңайһыҙланып ҡына. - Мин Радиктарҙа ашаным, - тине лә үҙ бүлмәһенә инеп китте.

- Наилға фотоаппарат алып биргәйнек, дуҫы менән фото эшләйҙәр. Радиктың әсәләре киске сменала булһа, уларға баралар, беҙ кискелә саҡта беҙгә лә инеп дәрес әҙерләйҙәр, - тип һөйләп ултырҙы апай.

Аш бүлмәһенең быяла ишегенән күҙәтә ултырам. Бына Наил ботинкаларын таҙартып киптерергә ҡуйҙы. Үҙе тештәрен таҙартып, йыуынып, йоҡларға ятты. Бик ипле, тәрбиәле бала. Үҙемдең балалар менән сағыштырам. Һыуыҡ өйҙә танауҙарын мырш-мырш тартып, ошо ваҡытта йоҡларға әҙерләнәләрҙер инде улар ҙа. Аталары эсеп ҡайтып, борсомаһа ярар ине, тип көйөнәм. Мин булмаһам, ул тиклем болармай торған ул, тип үҙемде тынысландырам. Йоҡларға яткас та алған тәьҫораттарҙан арына алмай, бер килке уйланып яттым. Ошо өйҙәге мөхит, ата-әсәнең үҙ-ара татыу мөнәсәбәте, етеш тормошҡа һоҡланмау мөмкин түгел ине...

Был ваҡиғанан һуң байтаҡ ваҡыт үтте. Шулай һирәкләп осрашып торҙоҡ Зөлифә апайҙың ғаиләһе менән дә. Иремдең иң өлкән апаһы булғас, Зөлифә апай ҙа, еҙнәй ҙә беҙгә һәр яҡлап ярҙам итеп, ҡеүәтләп, ҡайһы саҡта тәнҡитләп торҙолар. Уларҙан тик яҡшы сәләмдәр, күстәнәстәр килеп торҙо. Балалары белем алып, дипломлы булды. Ауылға, элеккесә, бесән эшләшергә ҡайта алмаһалар ҙа, килгеләп торҙолар. Еңгәйҙәр Наилды шаяртып:

- Фатир бар, машина бар, диплом бар, кәләш, хатта балдаҡтар ҙа әҙер. Ҡасан туйыңа киләйек? - тип шаярталар.

- Тиҙҙән, тиҙҙән, - тип көлөп яуап бирә Наил. Әммә уның күҙҙәрендә ниндәйҙер һағыш тойола, был мине гел генә һиҫкәндерә. Һәм был һиҫкәнеү юҡҡа булмаған икән. Туйға саҡырыу көтөп йөрөгән ерҙән: "Наилде һуңғы юлға оҙатырға килегеҙ," - тигән хәбәрҙе алғас, бар туғандар ҙа шаҡ ҡатты. Наил үҙенең хушлашыу хатында: "Атай, әсәй, зинһар өсөн, мине кисерегеҙ. Мин башҡаса булдыра алмайым. Һеҙ уйлаған кеше түгел бит мин. Өйҙән юғалған ҡиммәтле әйберҙәр ҙә, туй балдаҡтары ла минең арҡала юҡҡа сыҡты," - тип яҙған... Егет ун йыл тирәһе ике төрлө тормош алып барған, бөрөү ҙә, хатта йөрөгән ҡыҙы ла уның наркотиктар менән мауығыуын һиҙмәгән.

- Бер нисек тә һиҙҙермәне бит, өйҙә эш менән булышыр ине, көн дә баҡсала ярҙамлашты, тәртибе лә яҡшы булды. Уны наркоман тип һис әйтерлек түгел ине бит, - тип аптыраны барыһы ла.

**...Ҡала урамында булған ваҡиға тураһында берәүгә лә һөйләгәнем булманы. Хәҙер, ниңә шул кистә әсәһенә булһа ла әйтмәнем икән, тип уйлайым. Әллә ғәмһеҙлекме, әллә тәжрибәһеҙлекме, әллә ата-әсәһенең кәйефен төшөргөм килмәнеме? Аңлата алмайым. Наил да шул үҫмерҙәр менән бергә йөрөгән бит! Ул саҡта мин улай тип уйламағанмын. Шуға ла ата-әсәһенә әйтеү иҫемә лә инеп сыҡмаған. Ә бит ул минән талап алынған пакетты килтереп биреп, миңә ярҙам ҡулы һуҙған. Тик мин генә уға ваҡытында ярҙам ҡулы һуҙмағанмын. Үҙе менән булһа ла һөйләшергә кәрәк булған. Балаларҙың, йәштәрҙең бәләкәй генә шик тыуҙырырҙай ҡылығына ла иғтибар итмәй үтмәҫкә кәрәк икән шул, тип, өлкәндәрҙе тағы бер тапҡыр иҫкәрткем килеп, ошо ваҡиға тураһында яҙырға булдым.**

МӘҘӘНИӘ.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Нәмәгәлер өлгәшер өсөн тәүәккәлләргә кәрәк

Ҡасан да булһа, был донъя кешелек барлыҡҡа килгәндән алып ниндәй булған, тип уйланғаның бармы? Иҫәпләүҙәренсә, тәүге кешеләр Ер шарының бик аҙ ғына өлөшөндә йәшәгән. Әгәр ошо ҡарашҡа таянғанда, донъяның башҡа өлөшө уларға ҙур һәм серле урын булып тойолорға тейеш булған. Ер өҫтөнән ҙур йән эйәләре йөрөгән, вулкан атылған. Тәүтормош кешеләре тәбиғи көстәр тәьҫиренә дусар булып, гелән аҙыҡ һәм йәшәр өсөн ышыҡ урын эҙләргә мәжбүр булған. Шуға ла ерҙә тәүге төйәкләнеүселәрҙең тормошто нисектер нескә итеп ҡабул итеүенә аптырарлыҡ түгел. Беҙ ғүмеренә хәүеф янағанда ла билдәһеҙлеккә барырға ҡыйыулыҡ тапҡан ҡурҡыу белмәҫ ата-бабаларыбыҙға рәхмәтле булырға тейешбеҙ. Әгәр улар быны эшләмәһә, бөгөн беҙ булмаҫ та инек! Бәхеткә күрә, уларҙа йәшәү өсөн көрәштә яҡшыны алып ҡалыу ғына түгел, үҙҙәренә билдәле булған сиктәрҙән сығып, йәшәү шарттарын яҡшыртыу теләге лә көслө булған.

Бөгөн беҙ төймәгә баҫып ҡына өйҙө йылыта алабыҙ, газды ҡабыҙып, сәй ҡайнатабыҙ. Утты беҙ үҙенән-үҙе аңлашылып торған һымаҡ ҡабул итәбеҙ. Әммә кешеләр уның менән беренсе тапҡыр осрашҡан тәүтарихҡа күҙ һал әле. Ул кешеләрҙә ҡыҙыҡһыныу уятырға, шул уҡ ваҡытта ҡотон алырға ла тейеш була. Ут беҙҙең ата-балаларыбыҙ ҡаршыһында яһил яғын күрһәтеп, артабан тикшереүҙән ҡурҡыта алған. Уттың файҙалы мөмкинлектәрен асыр өсөн, уға бешергә, артабанғы аҙымында уны нисек итеп һаҡларға һәм уның менән файҙалана белергә тәүәккәл иткән кеше табылыуы кәрәк булған.

Авантюрлыҡ рухы кешенең төп һыҙаты булып тора, һәм тарих раҫлауынса, тап улар беҙгә мендәрсә йыл элек үҫергә ярҙам иткән. Һиндә киләсәк быуынға үҙең йәшәгән тормошҡа ҡарағанда тағы ла яҡшырағын ҡалдырыу өсөн потенциаль мөмкинлектәр бар. Әммә, күҙәтеүҙәребеҙсә, күп кешеләр үҙ тормошона бер ниндәй ҙә үҙгәрештәр индермәүҙе хуп күрә. Һин дә үҙеңдә батырсылыҡ тапмай, хәүефһеҙ уйын алып барырға теләгән кешеләр кеүек була алаһың. Әммә "тәүәккәлләмәйенсә, бер нәмәгә лә өлгәшеп булмай" - был һәр кешегә ҡағылған кеүек, һиңә лә ҡағыла. Һәр хәлдә, ҡайҙа хәүефһеҙ һәм барыһы ла таныш урында ҡалыуҙы йәки картала билдәләнмәгән уйҙар һәм үҫеш юлынан алға ҡарай китеүҙе һайлағанда, һин теге утты яулар өсөн билдәһеҙлеккә табан барырға батырсылыҡ тапҡан тәүтормош кешеһенә оҡшай башлаясаҡһың. Һин бүтәндәргә оҡшамаған шәхес булып китәсәкһең.

Хәҙер инде беҙҙең ата-бабаларға саҡырыу ташлаған картала билдәһеҙ булған бер генә ер ҙә юҡ, әммә кеше аңы һәм йөрәгендә беҙ белмәгән сер һәм хәүеф тулып ята. Һөйөү көсөн тикшереү, моғайын да, кешеләргә ташлаған киләһе бөйөк саҡырыу булыр. Рухани һәм ғалим Пьер Тейяр де Шарден ҡасан беҙ кешелек өсөн һөйөү энегияһын ҡулланырға өйрәнәбеҙ, шул саҡта тарихта утты икенсе тапҡыр асасаҡбыҙ, тигән. Һин был бурысты атҡарыусы кеше буласаҡһыңмы?

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

✓ *Балаларға "Арғужа" йырын йырлағас, дәрескә иҫе китмәй ултырған уҡыусы ла яҡшы яҡҡа үҙгәргән кеүек булды, уның да күҙҙәрендә уйсанлыҡ сағылды.*



*БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ЕТЕ МӨҒЖИЗӘҺЕ*

# ҒИЛӘЖЕТДИН ИШАН РУХЫ...

## беҙҙе һаман яҡлай, ҡурсалай

**"Башҡортостандың ете мөғжизәһе" конкурсын шатланып ҡабул иттем. Был конкурсты үҙенең тыуған Башҡортостанын өҙөлөп яратҡан, йөрәгендә башҡорттоң ҡанлы ла, йәшле лә, шатлыҡлы ла тарихын йөрөткән кешеләр күтәреп алыр, моғайын.**

Беҙҙең Көйөргәҙе районы Илкәнәй ауылында ла бар мөғжизәле урын - ул Ғиләжетдин ишан хәҙрәттең ҡәберлеге. Хәҙрәттең әүлиәлек сифаты бик көслө булған. Мин белә белгәндән бирле лә, әле лә ауыл халҡы уның ҡурсалауын һәр ваҡыт тойоп, уның рухына һыйынып йәшәй. Ауырыу-юғалтыуҙарға дусар булғандар уның ҡәберенә зыярат ҡылып, йәненә тыныслыҡ, тәненә сихәт таба. Беҙҙең өйҙә өләсәйем иҫән саҡта уның таянып йөрөгән таяғы һаҡлана ине. Өләсәйем Хәйерниса Ғабдрахман ҡыҙы 1987 йылда гүр эйәһе булғас, мин шул ишан хәҙрәттең таяғын, Әнүр Ғиләжетдинов исемле өс туған ағайым аша, Мәләүез мәсетенә тапшырҙым.

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, иҫке мәсет янғынға тарыны, беҙҙең олатайыбыҙҙың таяғы юғалды. Мин белгәндә беҙҙең Илкәнәйҙәге өйҙә шул таяҡты сайып, һыуы менән ҡойоноп дауаланалар ине. Ҡансыра ауылынан Ғәлиә апайым (Аллаға шөкөр, әле лә иҫән-һау) башы ауыртҡанда шул изге һыу менән сайынып дауаланды.

Ғиләжетдин олатай бик һирәк осраҡта ғына төшкә инә. Йә бик ауыр саҡта, йә бик диндар мосолмандарға ғына. Өфөлә йәшәүсе бер туғаным сетеректә хәлгә осрап, шул ҡайғыһын хәмер менән баҫып атай йортонда, ауылда бер үҙе ятҡан. Үҙе һөйләне: "Элек һеҙҙең дини ҡараштарығыҙға өҫтәнерәк ҡарай инем, хәҙер үҙем ышандым: мине теге донъянан, упҡын һымаҡ ерҙән башына аҡ сәллә кейгән, түңәрәк йөҙлө, һөйкөмлө генә рухани, аҡ ҡыҫҡа һаҡаллы бер бабай иплән кенә күтәреп алып сыҡты," - тип һөйләне. Әле ул мәрйә киленебеҙҙе лә мәсеткә йөрөтә, үҙе хәмерҙән бөтөнләй баш тартты.

Мин ситтә йәшәгәс, ауылға һирәк ҡайтам. Сәфәрем шул зыяраттағы әсәйемдең, өләсәйемдең ҡәберлеген ҡарап, бер аҙ таҙартып китеүҙән ғибәрәт. Һәр ваҡыт, ниңә шул тиклем селекте ир-аттар таҙартмай, Ғиләжетдин ишан-хәҙрәттең ҡәберлегенә юл һалмай икән, тип йөрәгем әрней торғайны. Мәләүез районы Ташлыкүл ауылында йәшәүсе Ғабдрафиҡ исемле мөьмин төшөндә Ғиләжетдин хәҙрәтте сәлләле, түңәрәк йөҙлө, һөйкөмлө, тыйнаҡ ҡына итеп, нәҡ шул туғаным һүрәтләгән ҡиәфәттә күргән. Хәҙрәт: "Зыяратымды селек баҫты, таҙартып китһән ине", - тип зарланған. Ике донъя рәхәтен күрһен, сауаптары үҙенә, яҡындарына насип булһын Ғабдрафиҡ әфәнденең. Һеҙгә балта тотоп, юл һалғаныбыҙ, зыяратта намаҙ ҡылғаныбыҙ өсөн беҙ бик рәхмәтлебеҙ.

Ғиләжетдин ишан хәҙрәттең әүлиәлеге Илкәнәй ауылы халҡын граждандар һуғышы ваҡытында таланыуҙарҙан, язалауҙарҙан һаҡлаған. Ауылға һуғышсан ғәскәр инә алмаған, ишан отряд алдына ҡуйы томан төшөргән. Шунда бер мулла кеше: "Беҙ был ауылды урап үтәйек, күрәһегеҙ бит, бындағы халыҡты ниндәйҙер изге көс һаҡлай", - тигән.

Ғаилә риүәйәттәре буйынса, ишан ҡатындарына, балаларына бик йомшаҡ булған. Уның өсөн бөтә кеше лә бер тигеҙ, береһен дә айырып ҡарамаған. Өләсәйем һүҙҙәренән: "Ныҡ ауырып ятҡанға ла ишан өйгә үҙе килеп дауалар, тифтан вафат булғанға ла үҙе йыназа уҡыр булған".

Әүлиәлек... Башҡорт әүлиәләре... Минең ҡарашҡа, әүлиәләрҙең элекке ваҡыттағы тәбиғи ҡүмәклеге халыҡты рухи яҡтан таҙартыу, туплау, алға өндәү, һаҡлап алып ҡалыу миссияларын үтәгән бер күренештер ул.

Ғиләжетдин олатай ҙа заманына күрә алдынғы ҡарашлы, ғилемле, үҙ халҡының рухи лидерҙарының береһе булған. Әхәт Сәлиховтың 1995 йылдың 14 декабрендә "Совет Башҡортостаны" гәзитенең 240-сы һанында баҫылған "Тағы ла Зәйнулла ишан хаҡында" тигән мәҡәләһендә ошондай юлдар бар: "Был китап бай мәғлүмәтле булып сыҡты... Бында Нәҡшбәндиә тәриҡәтенең Башҡортостанда таралыуы һүрәтләнә.

Унан Әхмәр хәҙрәттәренә,
Тағы Ергән Толомхужа,
Рәхмәтулла ғәләйһигә инде.
Урмани Мөхәмәтшәриф хәҙрәтенә инде,
Тағы етте Илкәнәй Ғиләжетдин хәҙрәттәренә,
Унан ҡалды Сәхиулла хәҙрәттәренә.

Һүҙ 1901 йылда Ырымбурҙа Сәхиулла Ергәни хәҙрәткә бағышланған мәрсиәләр китабы тураһында бара.

Әхмәр Үтәбайҙың: "Милләткә тәбиғәт тарафынан һалынған генетик потенциалды, көстө уятыу механизмы суфыйсылыҡта, тәриҡәттә ята," - тигән юлдарын уҡығас, мин Ғиләжетдин хәҙрәттең Илкәнәй һәм уның тирә-яғындағы башҡа ауылдар халҡы өсөн заманында ни тиклем көслө рухлы яҡлаусыһы булғанына тағы ла бер тапҡыр инандым. Илкәнәй халҡы әле лә йылҡыһынан ҡаҙына тиклем Ғиләжетдин хәҙрәт рухына инләп үҫтерә, һәр ауыл уның исеменә, рухына һыйынып йәшәй.

Минең ғаиләм, минең туғандарым өсөн Ғиләжетдин ишан иң беренсе мөғжизә, яҡлаусыбыҙ, һаҡлаусыбыҙ. Беҙҙең Башҡортостандың ярмалы ҡара тупрағы ла, сит далалар менән сағыштырғанда, торғаны бер хазина.

**Роза ХӘМИТОВА.**
**Күгәрсен районы Йомағужа ауылы.**

# БАШҠОРТ ҠАЙҘА ЙӘШӘҺӘ ЛӘ...

## моңло булып ҡала

**Мин Силәбе өлкәһе Арғаяш яҡтарында йәмле Миәс йылғаһы, таҙа һыулы Арғужа күле буйында үҫтем. Беҙҙең яҡтарҙа ла тәбиғәттең гүзәл, күркәм урындары бар. Бер ваҡыт бер кеше ауыҙынан ошондай фараз ишеттем: "Кеше ниндәй тәбиғәттә йәшәй, шул тәбиғәттең гүзәллеген йөҙөнә ала". Ә бына минең уйымса, кеше тәбиғәттән йөҙ матурлығын ғына түгел, күңел матурлығын да алалыр.**

1934 йылға саҡлы беҙҙең район Башҡортостан составына ингән, ә унан һуң беҙ Рәсәйҙең бер өлөшө булып ҡалдыҡ. Күп кенә дәүер башҡорт ауылдарында башҡорт телендә уҡытыуҙы тыйҙылар. Беҙҙең йәшлеккә тура килде был. Беҙ маңҡортҡа әйләндек, тиһәм, дөрөҫ булмаҫ ине, сөнки халҡымдың теле бөтмәне, дини байрамдар, башҡорт туйҙары, балаға исем ҡуштырыуҙар үҙ телебеҙҙә барҙы. Иң мөһиме, халыҡ үҙенең боронғо моңло йырҙарын онотманы.

Мин ҙур ғаиләлә әсәйемдең бишек йырҙарын ишетеп үҫтем. Аҙаҡ уның боронғо башҡорт йырҙарын өй эштәре башҡарғанда, ҡунаҡтар алдында йырлағанын ишетеп, үҙем дә оҙон көйҙәргә ғашиҡ булдым. Ул "Азамат", "Арғужа", "Таштуғай", "Ашҡаҙар" йырҙарын неҫкә тауышы менән моңло итеп йырлай ине. Йырҙы, бигерәк тә башҡортомдоң оҙон көйҙәрен, йөрәк менән башҡарһаң ғына, тыңлаусыны тетрәндереп була.

Әсәйемдән күп кенә боронғо көйҙәр өйрәндем. Шулай бер байрамға ҡайттым. Әсәйемдең ғүмере ни бары бер ай ғына ҡалған. Күптән күңелемә яҡын күргән йырҙы "Ашҡаҙар"ҙы өйрәтеүен һораным. Йөрәге ауырып йөрөһә лә, ауырһынмай, миңә был йырҙың тарихын һөйләп, көйөн өйрәтә башланы. Күп тапҡырҙар ишеткәнгә күрә, тиҙ оттом, хәҙер ҙә яратып йырлайым.

Шулай яҙыусы-шағирә, яҡташым Кәтибә апай Кинйәбулатова менән уның фатирында осрашырға тура килде. Сәй эсеп ултырғанда ул үҙенә генә хас моңло, күкрәк тауышы менән "Арғужа" йырын йырланы. "Кәтибә апай, улай булғас, мин дә һеҙгә "Ашҡаҙар" йырын йырлайым", - тинем. Йырҙы иғтибар менән тыңлап бөткәс, былай тигән һүҙҙәре йөрәгемдә уйылып ҡалды: "Халҡыбыҙға Салауат Юлаев премияһы ла, бүтән төрлө премия ла бирелмәгән, ә ниндәй көслө йыр сығарған, һай-һай!"

Мин Өфөнөң урыҫ мәктәбендә башҡорт телен алып барам. Кластарҙа урыҫ балаларынан башҡа, башҡорт, татар балалары ла бар. Етенсе класта "Башҡорт халыҡ йырҙары" тигән теманы нисегерәк ҡыҙыҡлы, фәһемле итеп үткәрергә, тип уйланым. Минең уйлауымса, башҡорт теле уҡытыусыларҙан ябай уҡытыусыларҙан юғарыраҡ булырға тейеш, йәғни рус яҙыусыһы әйтмешләй, "В России поэт больше чем поэт!" Башҡорт халҡының, теленең, моңоноң ғорурлығын, бөйөклөгөн, гүзәллеген күрһәтер, өйрәтер өсөн үҙең дә шулай булырға ынтылырға кәрәк, тип дәресте дауам иттем. Тыуған илемдә урынлашҡан саф, таҙа һыулы Арғужа күлен рәсемгә төшөрҙөм. Күл ярын бейек булмаған тауҙар уратҡан. Шул тау биттәрендә ҡупшы ғына ҡайындар һирәк-һаяҡ ҡына осрай, һыуға яҡын баҫҡыс кеүек таштары ла бар.

Уҡыусылар күҙҙәрен алмай, артабан тыңлайҙар. Уларҙың күҙҙәрендә ҡыҙыҡһыныу күрәм. Йырҙың тарихын һөйләгәндә, башҡорт яугирының һуғышта иле өсөн йәнен аямағанына баҫым яһайым һәм:

Арғужа ла буйлап йөрөгәнемдә,
Ятып ҡалған ҡайыш дилбегәм.
Дилбегә лә өсөн ҡайғырмайым,
Ятып ҡалған тыуған илгенәм, - тигән һүҙҙәрен аңлатам.

Балаларға "Арғужа" йырын йырлағас, дәрескә иҫе китмәй ултырған уҡыусы ла яҡшы яҡҡа үҙгәргән кеүек булды, уның да күҙҙәрендә уйсанлыҡ сағылды.

**Һүҙҙең һуңында ошо фекеремде һеҙгә еткерер инем: ысын башҡорт ҡайҙа йәшәһә лә моңло башҡорт булып ҡала, сөнки уның йөрәгендә кешеләргә әйтә торған изге һүҙе үҙ моңо аша бирелә. Ә уның моңо - Башҡортостандың бер мөғжизәһелер.**

**Рәйсә ӘСӘҘУЛЛИНА.**
**Өфө ҡалаһы.**

# ӘКИӘТ ДОНЪЯҺЫ УЛ - МОРАҘЫМ

Мораҙым мәмерйәһен "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" конкурсына тәҡдим итеүгә мин дә ҡушылам. Миңә лә ул мәмерйәләрҙең береһендә булырға тура килгәне бар.

Мораҙым ауылын үтеп киткәс, сихри әкиәт донъяһына барып ингәндәй булаһың. Уң яҡта бейек ҡаялы тау теҙмәләре һуҙылып китә, ә тау башында мөһабәт ағастар үҫә. Ошо таш ҡаялы тау буйынан Оло Әйек йылғаһы аға. Мәмерйәгә барып еткәнсе, зәңгәр таҫмалай борғаланып-һырғаланып аҡҡан был йылғаны өс тапҡыр кисеп үтәһең. Бер аҙ барғас, матур бер аҡланға килеп сығаһың. Аҡландың тирә-яғы тау һыҙаттары һәм икһеҙ-сикһеҙ ҡара урмандар менән уратып алынған. Мөғжизәле мәмерйәләр киң ишектәрен асып, һәр кемде "Килегеҙ бында, рәхим итегеҙ!" тип әйҙәп саҡырып торғандай. Мәмерйәгә инер өсөн бер аҙ тауға күтәрелергә кәрәк. Барып ингәс тә үҙеңде ниндәйҙер һалҡын бер бүлмәгә ингән кеүек хис итәһең. Тын алыуҙары иркенәйеп, рәхәт булып китә. Табиптар ҙа бит мәмерйә һауаһының тын юлдарына, үпкә сирлеләргә шифалы булыуын иҫбат итә. Төпкә үткән һайын, мәмерйәнең мөғжизәләре асыла бара.

Был тәбиғәт мөғжизәһен күрергә тип ҡайҙан ғына килмәйҙәр. Үҙебеҙҙең республиканан ғына түгел, сит илдәрҙә лә мәмерйә хаҡында ишетеп беләләр. Был тәбиғәт ҡомартҡыһы Аллаһы Тәғәләнең әҙәм балаһына биргән бер бүләгелер. Уны матур итеп һаҡлайыҡ һәм киләсәк быуынға ошо матурлығында бүләк итәйек.

**Винер ӘХМӘТОВ.**
**Күгәрсен районы Теләүембәт ауылы.**

## ТЕЛ ХИКМӘТТӘРЕ

**Гәзиттең 18-се һанында һеҙҙең иғтибарға "Тел хикмәттәре" тигән рубрика тәҡдим итеп, был рубрикалағы материалдарҙың башҡорт теленең, башҡа телдәрҙең, шулай уҡ телебеҙҙең башҡа телдәр менән сағыштырмаса мөнәсәбәтендә күҙәтелгән ҡыҙыҡлы күренештәр, хикмәттәр хаҡында булырға тейешлеген дә әйтеп үткәйнек. Редакцияға хаттар килә башланы ла инде. Мәләүеҙ ҡалаһынан Фәүзиә Йәнтилинаның бер нисә хикмәтен һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итәбеҙ.**

### ЗЫЯЛЫ

Зыялы һүҙе яңы ҡулланыла башлап, уны әле күптәрҙең аңламаған сағы. Бер мәл иптәшем менән сәй эсеп ултырһаҡ, апайымдың улы Нур инеп килә. Бик аҡыллы, итәғәтле егет, әле X синыфта уҡып йөрөй.

-Ана беҙҙең зыялыбыҙ инеп килә, хәҙер сәй яңыртам, - тип түрбашҡа йүнәлдем.

Бер аҙҙан Нур туғаныбыҙ ҡулын йыуып, өҫтәл артына килеп тә ултырҙы. Йөҙөнә ҡараһам, миңә ҡаты итеп үпкәләгәнен тойҙом. Сәй эсеп бөткәс, ҡустым:

-Апай, минең һеҙгә ниндәй зыяным тейҙе? - тип әйтеп һалмаһынмы.

Ҡустыма зыялы менән зыянлының айырмаһын аңлатып бирергә тура килде.

### ТӨПСӨК

Өйөбөҙҙә башҡортса аралашабыҙ, әммә үҙ-ара һөйләшкәндә "төпсөк" һүҙен бер ҙә ҡулланмайбыҙ икән. Бер мәл иптәшем сәфәргә китте лә, көн һайын тиерлек хәл-әхүәл белешеп шылтырата башланы. Сираттағы шылтыратыуында атаһын һағынып өлгөргән улым мин һөйләшкәндә яныма килеп, ҡолағын телефон трубкаһына ҡуйып, тыңларға тотондо.

- Төпсөк ни хәлдә? - тип һорады атаһы, кинйәбеҙ хаҡында белергә теләп. Быны ишеткән улыбыҙҙың ауыҙы турһайҙы, төҫөнә үпкәләгән һыҙаттар сығарҙы ла, ситкә китте. Мин һаман да атаһы менән һөйләшеүемде дауам иттем.

- Ниндәй ҡорт сакты, атайыңа нимә үпкәләнең? - тип һораным аҙаҡтан үҙенән.

-Ниңә атайым мине тәмәкесе тип үсекләй ул, - тине улым, һаман да яҙыла алмайынса.

-Тәмәкесе тимәне бит, - тием мин уның көйәфе ни өсөн ҡырылғанын һаман да аңлап етмәйенсә.

-Улар булғас нимә ул мине "бычок" тип мыҫҡыл итә ул? - тине улым һаман да турһайып.

Шул саҡта ғына мәсьәләнең әтнәкәһен аңлап ҡалдым. Улыбыҙ "төпсөк" һүҙенең мәғәнәһен аңламайынса, уны тәмәке төпсөгө - "бычок" тип уйлаған икән.

### ЙЫУҒЫС ТУРАҺЫНДА ЙЫР

1974 йылда Аптраҡ урта мәктәбенә ете йәш ҡыҙ уҡытырға килдек. Алтауыбыҙ ауыл ҡыҙҙары, ә Нурия Стәрлетамаҡ ҡыҙы. Башҡортса һөйләшмәй, аңлауын бер аҙ аңлай. Ул саҡта "Өфө йүкәләре", "Кышҡы романс" йырҙарының иң популяр сағы. Беҙ, ҡыҙҙар, шул йырҙарҙы йырлайбыҙ, Нурияға ла улар тәьҫир итә башланы.

Яҙ муйыл сәскәләре күрергә бөтәбеҙ ҙә туғайға сыҡтыҡ. Йөрөп арығас, түңәрәк яһап ултырып һөйләшергә керештек. Бер ваҡыт Нурия:

- Ҡыҙлар, давайте песню споем,- ти.
- Какую? - тибеҙ.
- Про уфимскую мочалку...
- Про какую еще мочалку?
- Про уфимскую, Рима Хасанова. Она такая популярная, мне очень нравится, только я одно не понимаю, какой-то дурак про мочалку стихи сочинил, а Риму Хасанову не жалко было такую мелодию на мочалку тратить...
- Ә һин ул йырҙы ни өсөн йыуғыс тураһында тиһең ул? - тип аптырайбыҙ беҙ уға төбәлеп.
- Нәнәйкә из деревни привозила йүкә и всегда говорила:" Бына йүкә, мунсаға йөрөргә..."

Беҙ шул саҡ ҡына мәсьәләнең әтнәкәһен аңлап ҡалдыҡ. Нурияға аңлатып та тормайынса, көләштөк тә, "Өфө йүкәләре" йырын башҡарҙыҡ. Нурия ла ҡушылды.

**Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА.**

## АТЫҢ КЕМ?

# ИСКӘНДӘР МЕНӘН ЗАҺИҘӘ...

## өйөбөҙгә йәм бирә



Бөрйән районы Әбделмәмбәт ауылында йәшәүсе Рәзинә менән Илдус Сөләймәновтарҙың йәш ғаиләһендә береһенән-береһе матур, шуҡ, шаян ике сабый үҫеп килә. Ата-әсә сабыйҙарына яғымлы, матур башҡорт исемдәрен һайлаған. "Ауылыбыҙҙа бороңғо башҡорт исемдәрен йөрөткән балалар йылдан-йыл күбәйә. Был бик ҡыуаныслы күренеш. Балаларыбыҙ исемдәрен ғорурланып йөрөтөрлөк булһын, тип, беҙ ҙә матур башҡорт исемдәрен һайларға тырыштыҡ. Искәндәр менән Заһиҙә үҫкәс, исемдәрен яратып, беҙгә рәхмәт әйтерлек булһын" - тиҙәр бәхетле ата-әсә йылмайып. Исеменә күрә еҫеме, тиҙәр бит. Үҙ халҡының исемен йөрөтөүсе бала, милләтенең ғорурлығы булып үҫер, ата-әсә исеменә, халҡы намыҫына тап төшөрмәҫ, тип ышанғы килә. Амин, шулай булһын!

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА.**

## ҺИНЕ ЭҘЛӘЙЕМ...




**Абонемент №5.** Ҡара күҙле, оҙон сәсле, уртаса буйлы, юғары белемле, күркәм холоҡло гүзәл затмын. Намаҙ уҡыйым. Миңә 35 йәш, Өфөлә йәшәйем, күсергә риза түгелмен. 31-39 йәштәге ислам динен тотҡан, юғары белемле, ышаныслы терәк һәм тоғро тормош юлдашы булырҙай башҡорт егете менән иманлы ғаилә ҡороп йәшәргә теләйем. Хатты **rauani@mail.ru** электрон адресына йәки редакцияға яҙырға.

## ИҒЛАН

Өфө ҡалаһында һәм республикала урынлашҡан объекттарҙа эшләү өсөн сантехниктар бригадалары, мастерҙар, участка начальниктары талап ителә. Йәшәү өсөн урын биреләсәк.

Тел.:
**8-917-793-77-55**,
тел./факс:
**(347) 273-10-87**

## АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙ - ҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТҮҘЕМЛЕЛӘРҘЕҢ...

## асыуынан ҡурҡ

Һәр бала бер аҙ ғына даһи, һәр даһи бер аҙ ғына бала.

**(Артур Шопенгауэр).**

Геройҙар ҡурҡыныс минуттарҙа бик кәрәк, ҡалған ваҡытта улар - ҡурҡыныс.

**(Габриэль Лауб).**

Түҙемле кешенең асыуынан ҡурҡ.

**(Джон Драйден).**

Бик нытҡ асыуың килһә, унға тиклем һана ла, шунан ғына һүҙеңде әйт; әгәр ҙә бик тә нытҡ асыулы икәнһең, йөҙгә тиклем һана һәм... бер һүҙ ҙә әйтмә.

**(Марк Твен).**

Йөрәк менән баш көрәшкәндә... ашҡаҙан енеп сыға.

**(Станислав Лец).**

Һәр кем үҙен ниндәй дәрәжәлә бәхетһеҙ тип иҫәпләй, шул тиклем дәрәжәлә бәхетһеҙ була.

**(Сенека).**

Әгәр ҙә кешенең башҡа маҡтанырлыҡ урыны булмаһа, ул үҙенең бәхетһеҙлеге менән маҡтана башлай.

**(Синклер Льюис).**

Хужа кеше ғүмер буйы йәшәп тә күрмәгәндә, ҡунаҡ кеше уның өйөндә өс сәғәт булып та ниндәйҙер етешһеҙлекте шәйләүе бик мөмкин.

**(Юрий Крижаныч).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер ваҡыт кеше шундай төш күрә: йәнәһе лә, ул ҡомдан атлай, ә уның эргәһендә - Аллаһ үҙе. Күк йөҙөндә бер-бер артлы был кешенең тормош күренештәре хасил була, һәр береһендә ул кешенең ҡомдан үткән эҙе күренә, йәнәшендә тағы бер рәт эҙҙәр килә, ти. Уныһы - Алланыҡы.**

**Ғүмеренең һуңғы һүрәтен ҡарағас, кеше артына боролоп, ҡомдағы эҙҙәргә ҡарай. Ни өсөндөр, ошо ғүмеренең картлыҡтағы иң ауыр мәлендә ҡомда тик бер рәт кенә эҙҙәр ҡалған була. Кеше быны аңлай алмай һәм Алланан һорай:**

**- Ғүмеремдең ҡартлыҡ мәлендә ҡом буйлап бер генә сылбыр эҙҙәр теҙелгән. Иң ауыр сағымда Һин ни өсөн мине яңғыҙ ҡалдырҙың?**

**Аллаһ шулай тип яуап биргән:**

**- Ғүмереңден һуңғы ҡартлыҡ мәлендә ысынлап та ҡом буйлап тик бер генә сылбыр эҙҙәр һуҙылғандыр. Тик һин бер үҙең ҡалмағайның, ундай ваҡыттарҙа мин һине ҡулдарымда күтәреп барҙым..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы,**
**Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 6159
Заказ 2596